ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 декабрь (акъюлай) 2018

№50 (832)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙ ҙә йәш инек бит,** йәғни Ҡорҙаштарыма нәсихәт итеп әйтәм... 3



**Оттоҡмо, әллә отолдоҡмо?** 6



**Спорт - ҡыйыуҙар майҙаны,** унда мәмәйҙәргә урын юҡ 8-9



**Беҙ бер бөтөн:** уҡытыусы - уҡыусы - атай-әсәй 12



**ТВ-программа** 14

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыуҙың ҡыҙыу миҙгеле дауам итә. Шулай итеп, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 609 һум 96 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 641 һум 16 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 550 һум 38 тингә яҙыла ала. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Торатау" геопаркын булдырыу тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Артабан геопарк ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы объекттары исемлегенә индереүгә дәғүә итәсәк. Гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына ошо ҡарар тураһындағы фекерҙәрҙе еткерәбеҙ

***Илшат ТАЖЕТДИНОВ, Башҡортостан Республикаһы Премьер-министр урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы:*** Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров "Торатау геопаркы тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы. Киләсәктә был ошо биләмәләге тәбиғәт ҡомартҡыһы булып торған шихандарҙы ЮНЕСКО-ның Бөтөн донъя мираҫы объекттары исемлегенә индереү мәсьәләһен ҡарау мөмкинлеге бирә. Ҡул ҡуйылған документта әйтелеүенсә, парк республикабыҙҙың геологик, биологик һәм тарихи-мәҙәни мираҫын һаҡлау маҡсатында булдырыла. Минеңсә, был уйланылған, эҙмә-эҙлекле һәм дөрөҫ ҡарар булды. "Янғантау" менән бер рәттән, был республикала хәҙер икенсе геопарк буласаҡ. Башҡортостандың башҡа бер ҡайҙа ла тиңе булмаған тәбиғәт хазиналарын һаҡлау буйынса был документ шихандарҙы популярлаштырыу, ЮНЕСКО булышлығында уларҙы бар донъяға билдәле итеү маҡсатында ҡабул ителә. Туризмды тергеҙеү һәм үҫтереү сараларын йәнләндереү республикабыҙ үҫешенә ҙур бер ҡеүәт тә ул: Башҡортостанға донъя илдәренән туристар йәлеп итеү, ошо өлкәлә эшҡыуарлыҡты үҫтереү, ә иң мөһиме - халыҡ күңелендә изгелек, ырыҫ һәм ғорурлыҡ төйәге булараҡ йәшәгән шихандарҙың тейелгеһеҙлеген тәьмин итеү, уйлап ҡараһаң, ҡаһармանлыҡҡа тиң аҙым ул.

***Өлфәт ЙОМАҒУЖИН, Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының башҡарма директоры:*** Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Торатауҙы һәм Йөрәктауҙы үҙ эсенә алған "Торатау" геопаркын ойоштороу тураһындағы ҡарарын ҡыуанып, тарихи ваҡиға тип ҡабул иттем. Сөнки "Башҡортостан сода компанияһы" был тауҙарға күптән яҫҡына ине, уларҙың республика халҡы өсөн тарихи, мәҙәни әһәмиәткә эйә икәнен иғтибарға ла алманылар. Әгәр тауҙар глобаль һаҡланыу системаһы исемлегенә инһә, был объекттар инде халыҡ-ара кимәлдә яҡлаулы буласаҡ. Ҡарар ҡапыл ҡабул ителгән кеүек тойолһа ла, уға әҙерлек эштәре күптән алып барылды. Рәсәйҙә беренсе "Янғантау" геопаркын ойоштороу менән бер рәттән, "Торатау" геопаркы буйынса ла һөйләшеүҙәр булды, әммә Рәсәйҙең Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы менән уртаҡ фекергә килеп булмай ине. Унан һуң, эш башлар өсөн теләк кенә етмәй, мөһим ҡарар кәрәк.

Парижда "Янғантау" геопаркын презентациялағанда Рәсәйҙең Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы, ниһайәт, ниәтебеҙҙе хупланы, шихандарҙы һаҡлап ҡалыуҙың әһәмиәтле булыуы менән килеште. Был турала ни өсөн ентекләп аңлатам, сөнки ЮНЕСКО-ның мәҙәни мираҫы исемлегенә инеү өсөн билдәле бер процедураларҙы үтергә кәрәк. Иң тәүҙә объект үҙ дәүләтендә иғлан ителеп, кәмендә бер йыл эшләргә, билдәле талаптарға тап килергә, илдең ошо Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы менән килешелергә, ЮНЕСКО-ның ҡағиҙәләрен үтәргә тейеш. "Янғантау" геопаркы буйынса эш алып барғанда был пункттарҙың барыһын да үттек, тәжрибә тупланыҡ һәм киләһе йылда уның ЮНЕСКО-ның глобаль тәбиғи мираҫы исемлегенә инеп, халыҡ-ара кимәлдә яҡланыусы һәм һаҡланыусы статусына эйә буласағына өмөтләнәбеҙ. Геопарк буйынса тәүге "сирҡаныу" алдыҡ, шуға күрә Радий Фәрит улының был ҡарарын хупларға ғына кәрәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**



12+

✓ Был Указ "Сода" комбинатының һәм башҡа сәнәғәтселәрҙең тәбиғәткә табыш сығанағы итеп ҡарарға түгел, ә етештереү ҡеүәттәрен яңыртыу иҫәбенә булған сеймалды эшкәртеү йүнен күрергә кәрәклеген аңғартты.



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Торатау" геопаркын булдырыу тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Артабан геопарк ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы объекттары исемлегенә индерелергә дәғүә итәсәк. Гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына ошо ҡарар тураһындағы фекерҙәрҙе еткерәбеҙ

**(Башы 1-се биттә).**

*Урал КИЛСЕНБАЕВ, БР Башлығының ижтимағи-сәйәси үҫеш буйынса идаралығы начальнигы:* "Торатау" геопаркын булдырыу бик ваҡытлы һәм урынлы ҡарар булды. Ғәҙәттә, чиновниктарҙың, етәкселәрҙең "хис-тойғоһо ла, милләте лә, йөрәге лә юҡ" тигәнерәк ҡараш йәшәй. Мин быны менән төптө ризалаша алмайым. Үҙем тураһында, мин башҡорт, шулай уҡ балаларым да, тип әйтә алам һәм мин үҙемдең ошо аҡыллы милләткә мөнәсәбәтем булыуы менән ғорурланам, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бик зирәк аҡылға эйә булғандар. Бала саҡта ошо шихандар янынан үтеп барышлай атайым минә дүрт шихан тарихын мауыҡтырғыс итеп һөйләй торғайны; әле был хаҡта тороп ҡалған тауҙарҙың өсәүһе миҫалында мин үҙемдең балаларыма һөйләйем. Артабан балаларым да ҡасандыр дүртәү булған шихандар хаҡында балаларына һөйләйәсәк, тип уйлайым... Радий Фәрит улының ҡарарын дөрөҫ һәм ваҡытлы булды тип ҡабул иттем. Был республика халҡына киләсәктә тәбиғәт ҡомартҡыларының һаҡланып ҡаласағына ышаныс бирә.

*Данир ГӘЙНУЛЛИН, Бөтөн донъя башҡорттар ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе:* "Торатау" геопаркы тураһындағы Указ шихандар яҙмышын ҡурсып, нисәмә йылдар күңелдә йөрөткән хәүефте алып ташланы һәм тәбиғәт ҡомартҡыларын киләһе быуындарға тапшырып ҡалдырыу мөмкинлеге бирҙе. ЮНЕСКО ҡарамағындағы тәбиғи һәм тарихи-мәҙәни объект статусын алыу шихандар биләмәһендә фәнни эҙләнеүҙәрҙе дауам итергә һәм ошо биләмәләр менән идара итеү эштәрен һөҙөмтәләрәк, урындағы халыҡ мәнфәғәтенә яраштырып алып барырға мөмкинлек бирәсәк, тип уйлайым. Һуңғы ваҡытта Башҡортостан Республикаһы бындай проекттарҙы тормошҡа ашырыу буйынса етди тәжрибәгә эйә була бара. Мәҫәлән, Шүлгәнташ мәмерйәһе менән "Янғантау" геопаркын ЮНЕСКО объекттары исемлегенә индереү шундай проекттар булды. Республика етәкселеге әлеге проекты ла аҙағынаса еткереүҙә нығышмаллыҡ күрһәтер, тигән өмөттәмен, сөнки ул, ысынлап та, донъя кимәлендә билдәлелек алырға лайыҡлы ҡомартҡы. Республикабыҙ Башлығы вазифаһын башҡарыусы үҙенең Указы менән Башҡортостан "Сода" комбинатының һәм башҡа сәнәғәтселәрҙең тәбиғәткә табыш сығанағы итеп ҡарарға, әҙер тәбиғәт ҡомартҡыһын юҡҡа сығарырға түгел, ә етештереү ҡеүәттәрен яңыртыу иҫәбенә булған сеймалды эшкәртеү йүнен күрергә кәрәклеген аңғартты.

*Фидус ЯМАЛТДИНОВ, Башҡортостан хөкүмәтенең элекке Премьер-министр урынбаҫары:* Башҡортостанда элекке етәкселек осоронда беҙгә:"Мин президент булған саҡта Торатауға бер кем дә теймәйәсәк!" - тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килде. Мәсьәләгә бындай мөнәсәбәтте мин ҡабул итә алмайым, сөнки кеше менән ниндәй генә хәлдәр килеп сыҡмаҫҡа мөмкин. Ә бына Радий Фәрит улы Хәбировты мин системалы, юғары квалификациялы юрист булараҡ беләм һәм әлеге мәсьәләне хәл итеүҙә уның мөнәсәбәте миңә оҡшай. "Торатау" геопаркы тураһында" Указы менән ул тәбиғәт ҡомартҡыларын яҡлаусы система булдырҙы. Был документта тәбиғәтте, уның флораһы һәм фаунаһын һаҡлау, шихандарҙың туризм йүнәлешендә мөмкинлектәрен үҫтереү буйынса тотош саралар комплексы бар. Был Указ беҙгә геопарктарҙың донъя системаһына инеү мөмкинлектәрен аса, һәм киләсәктә тауҙарыбыҙ ЮНЕСКО яҡлауында буласаҡ.

*Рәсих ХӘМИТОВ, тау геологы, дәүләт эшмәкәре, Рәсәй ер аҫты байлыҡтарын разведкалау отличнигы:* Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Фәрит улы Хәбировтың "Торатау геопаркы тураһында"ғы Указы бик ваҡытлы, кәрәкле һәм актуаль булыуы менән республикабыҙҙың фән һәм мәҙәниәт өлкәһе йәмәғәтселеге, киң халыҡ массалары тарафынан хуплап ҡабул ителде, сөнки был шихандар темаһы - башҡортмо ул, русмы, татармы - ошо ерҙә йәшәгән, илен йәндәй күргән һәр бер илһөйәрҙең күңелен өйкәп торған принципиаль мәсьәлә ине. Сөнки был тәбиғи ҡомартҡылар халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадында, әҙәби мираҫында, дини һәм сәйәси ҡараштарында - тотош алғанда, күп быуатлыҡ тарихында ғына урын алып торған түгел, бәлки, Указда әйтелеүенсә, геология, биология һәм тарихи-мәҙәни ҡиммәттәре менән дә киң билдәлелек алған тәбиғәт хазиналары ул. 1960 йылдан алып рәсми рәүештә дәүләт әһәмиәтендәге һаҡланырға тейешле геологик-археологик ҡомартҡы булараҡ, шул йылдарҙа уҡ был шихандар донъя әһәмиәтендәге "GEOSITES" геологик мираҫ исемлегенә индерелгәйне инде. Ә бит, мәғлүм булыуынса, теге йәки донъя мираҫы исемлегенә индереү өсөн тәбиғи һәйкәлдәр алты критерийҙың берәүһенә генә булһа ла тап килергә тейеш. Шул яҡтан ҡарағанда ла беҙҙә шихандар тәбиғи критерийҙарҙың дүртәүһенә лә һәм мәҙәни талаптарҙың икеһенә лә тулыһынса яуап бирә. Был факт үҙе генә лә шихандарыбыҙҙың ЮНЕСКО-ның Бөтөн донъя мираҫы объекттары исемлегенә индереү мәсьәләһен хәл итә.

*Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе:* Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары шихандар тирәләй барған ығы-зығылы хәлдәрҙе бер йыл ғына күҙәтмәне инде. Торатауҙың яҙмышы хәл ителгәндә, уның кемдеңдер шәхси милке булып тора алмауы күҙҙә тотола. Ҡабатланмаҫ тәбиғи мөғжизә генә түгел, ә үҙенсәлекле тәбиғи һәм геологик ҡомартҡы булараҡ та шихандар баһалап бөткөһөҙ мәҙәни-тарихи ҡиммәткә эйә. Шуның өсөн дә улар айырым һаҡ статусына мохтаж; улар бер нисек тә кемдәрҙеңдер шәхси ҡулдарына биреп ҡуя торған әйбер түгел. Радий Фәрит улы Хәбиров ҡул ҡуйған Указ тулыһынса беҙҙең өмөттәрҙе аҡланы, тип әйтә алам. Дәүләт Йыйылышы, һис һүҙһеҙ, был аҙымды хуплай. Ул ғына ла түгел, геопарк булдырыу артабан Торатау менән Йөрәктауҙы ЮНЕСКО-ның Бөтөн донъя мираҫы объекттары исемлегенә индереү мөмкинлеге бирәсәк һәм, ниһайәт, ошо өлкәлә оҙаҡҡа һуҙылған бәхәстәргә сик ҡуясаҡ. Тимәк, уникаль тәбиғәт ҡомартҡылары булған был шихандарҙы беҙ имен-аман киләсәк быуындарға тапшырып ҡалдыра аласаҡбыҙ.

*Абдрахман ВӘЛИДОВ, шихандарҙы һаҡлау буйынса хәрәкәт лидеры, Ишембай районы:* Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың Ишембай һәм Стәрлетамаҡ райондары территорияһында "Торатау" геопаркын төҙөү һәм унда геологик, биологик, тарихи-мәҙәни ҡиммәткә эйә булған Торатау, Йөрәктау һәм башҡа объекттарҙы индереү тураһындағы ҡарарын шатланып ҡабул иттем. Беҙ, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, быйыл шихандарҙы һаҡлау буйынса халыҡтан 50 меңдән ашыу ҡултамға йыйып, Мәскәүгә, Кремлгә алып барғайныҡ. Әлбиттә, беҙ был шихандар комплексына ингән объекттарҙы айырып ҡарамайбыҙ, уларға комплекслы ҡараш кәрәк. Тәбиғәт ҡомартҡыһы тигән статусы булмау сәбәпле, Ҡуштау мәсьәләһен еңел генә хәл итергә уйлайҙар уйлауға. Шихандар - Ер йөҙөндәге 230 миллиондар элек хасил булған риф массивтарынан торған берҙән-бер географик һәйкәлдәр һәм уларҙы мотлаҡ комплекста ҡарарға кәрәк. Яңыраҡ ҡына ошо шихандарҙы ҡарарға бөтөн илдән ғалимдар - археологтар, геологтар килеп ҡайттылар, уларҙы үҙем оҙата йөрөнөм. Улар, ысынлап та, бындай шихандарҙың Ер йөҙөндә башҡа булмауы, уларҙы һаҡларға кәрәклеген әйттеләр һәм был йәһәттән ярҙам итергә әҙер булыуҙарын белдерҙеләр. Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусының Указында Торатау, Йөрәктауҙан тыш, "башҡа объекттар" тигән һүҙ булыуы ла оҡшаны. Бәлки, ошонда шихандарыбыҙҙы комплексы ҡарауҙың бер юлы ла йәшеренгәндер. Нисек кенә булмаһын, беҙгә хәҙер ошо тема буйынса бер өҫтәл артына ултырып һөйләшергә кәрәк. Экологтар, геологтар, тарихсылар һәм башҡа белгестәр үҙ фекерен белдерергә тейеш. Бер кешенең - Радий Хәбировтың ғына өҫтөнә яуаплылыҡ һалмайыҡ, үҙебеҙ ҙә күтәрешәйек был йөктө, дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итеүгә, аңлашыуға булышлыҡ итәйек.

*Дмитрий КАЗАНЦЕВ, сәйәсмән:* Радий Хәбировтың Торатау һәм Йөрәктауға ЮНЕСКО тарафынан махсус һаҡлау статусын бирергә теләү ниәте Аҡ йорттоң эҙмә-эҙлекле эше тураһында һөйләй. Төбәктең элекке етәкселеге, ҡыҙғанысҡа күрә, үҙҙәренең шихандарҙы һаҡлауҙары тураһындағы яңғырауыҡлы белдереүҙәрен аныҡ нығытманы. Был ябай булмаған тарих "тамамланмаған" кеүек ине. Республика властарының БСК һәм Рәсәй Хөкүмәте менән аңлашыуға килеүе, ниһайәт, "тоннель аҙағында яҡтылыҡ күренеүгә" булышлыҡ итте. Хәҙер башҡорт шихан-тауҙарын һаҡлау ғына түгел, ә ул уникаль тәбиғәт комплексын Башҡортостандан ситтә күрһәтеү өсөн перспективалар асылды. Әлеге көтөлмәгән ҡарар Хәбировтың федераль кимәлдәге тәжрибәһе, хәлдең дөйөм көйҙәләнешен ҡуҙаллауы менән бәйлелер һәм локаль масштаб менән генә сикләнмәйҙер, тип уйлайым. Шуға күрә, республика етәксеһе Торатау менән Йөрәктауҙы халыҡ-ара кимәлдәге геопарктар исемлегенә индереп, Башҡортостандың яңы брендын булдырыу һәм уны күтәреү өсөн тейешле аҙымдар эшләй. Әгәр ҙә ошо статус бирелһә, дәүләт донъя йәмәғәтселеге алдында билдәләнгән йөкләмә аласаҡ һәм ул был һорауға ҡарата, хатта ҡайһы бер айырым ҡыҙыҡһыныусыларҙың тырышыуына ҡарамайынса, өҫтөнлөклө ҡараштың булмаясағына гарантия бирәсәк. Һәм тағы. Әлеге ҡарар менән Хөкүмәткә Өфөләге Конгресс-холдың исемен "Торатау Конгресс-холы" тип үҙгәртеү бурысы йөкмәтелгән. Беҙҙең республикала ниндәйҙер ваҡиғаға бәйле конгресс туризмы үҫешкән, ә Өфө һуңғы ваҡытта илдең эшлекле үҙәктәре рәтендә киң популярлыҡ яуланы. Шуға күрә Конгресс-холды "Торатау" тәбиғи объект исеме менән атау төбәкте тағы ла күберәк белеүҙәренә килтерәсәк.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Ноябрҙә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 30-урындан 24-сегә күтәрелеп, губернаторҙарҙың йоғонто яһау рейтингында үҙенең позицияһын нығытты. Сәйәси һәм иҡтисади аналитиктар агентлығы һуңғы тикшеренеү йомғаҡтарын баҫтырып сығарҙы. Аналитиктар иҫәпләүенсә, республика етәксеһенең рейтингы Өлфәт Мостафин Өфө хакимиәте башлығы вазифаһына һайланғандан һуң нығыған.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Указы менән Лира Иғтисамова республиканың финанс министры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде.

✓ Башҡортостанда республика Башлығы стипендиаттары билдәләнде. Ҡарарҙа әйтелгәнсә, улар - уҡыуҙа яҡшы өлгәшкән 55 аспирант, 130 университет студенты, 125 колледж студенты һәм республикабыҙҙан ситтә белем алған 7 студент. Быйыл йәй түләүҙәр билдәләнде: аспиранттарға - 7000 һум, вуз студенттарына - 5750 һум, урта махсус уҡыу йорто студенттарына - 2300 һум.

✓ Башҡортостанда 2018 йылда 117 ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативы теркәлгән. Яңынан ойошторолған кооперативтар һаны буйынса республика Рәсәйҙә беренсе урынды биләй. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, төбәк илдә тәүгеләрҙән булып ауыл хужалығы кооперативтарын булдырыу буйынса килем килтереүсе проекттарҙы тормошҡа ашыра башланы. 2020 йылға ҡәҙәр кооперативтарҙың килемлелеген дүрт тапҡырға арттырыу күҙаллана.

✓ Башҡортостан властары ҙур һыйҙырышлы автобустар һатып алыуға 690 миллион һумдан ашыу аҡса тотонорға ниәтләй. Бюджет инвестициялары Республика адреслы инвестиция программаһында ҡаралған. Башҡортостан Иҡтисади үҫеш министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, автобустар менән тәьмин итеүгә электрон аукциондар 27 ноябрҙә иғлан ителгән. Бөтәһе 100 автобус һатып алыу күҙаллана.

✓ Татарстанда Радик Юлъяҡшинға татар телен һаҡлауға ҙур өлөш индергәне өсөн Тукай исемендәге премия бирергә тәҡдим иттеләр. 1 декабрҙә Радик Юлъяҡшиндың "Татнефть-Арена"лағы концертына туғыҙ меңдән ашыу кеше килде. Татар эстрадаһында тәүге тапҡыр ошондай рекорд ҡуйылды. Концертта "Элвин Грей" лейблының презентацияһы уҙҙы.

УЙЛЫҒА - УЙ

# БЕҘ ҘӘ ЙӘШ ИНЕК БИТ,

## йәғни Ҡорҙаштарыма нәсихәт

**Атайҙар һәм балалар, ололар һәм йәштәр араһындағы мөнәсәбәт тә халыҡтар өсөн борон-борондан актуаль мәсьәлә булып килә. Йәш быуындың һәм ҡарттарҙың донъяға ҡарашында йыш ҡына осраған айырмалыҡтары илдәге сәйәсәттең һәр саҡ үҙгәреп тороуы һәм тормошобоҙҙоң төрләнәнә килеүе менән бәйле булһа кәрәк.**

Бынан илле (хатта ун биш-егерме!) йылдар менән генә сағыштырғанда ла, көнкүрешебеҙгә әүҙем үтеп инә барған фән үҙгәрештәре, ысынлап та, хәҙерге йәштәрҙең оло быуынға бер аҙ өҫтәнерәк ҡарауына һылтау булып торалыр. Шулай ҙа, йәштәребеҙҙең ололарҙы һәр тарафтан тәнҡитләп, улар менән булышыуы ул хәтлем үк һиҙелмәй, быға ваҡыттары ла юҡтыр, күрәһең. Ә бына күп кенә ҡартыраҡ кешеләрҙең: "Ә-ә-әй, хәҙерге йәштәрҙе... Әйтер инем инде... Беҙҙең саҡта йәштәр бөтөнләйгә башҡа булды. Беҙ барыбыҙ ҙа "эш", тип яндыҡ. Колхозда ла бил бөктөк, заводтарҙа лә тир түктек. Әрмегә барып, ил дә һаҡланыҡ. Хәҙер йәштәргә тик комьютер ҙа уйын-көлкө генә булһын, башҡа нәмә кәрәкмәй..." Ҡорҙаштарымдың, йәғни, оло йәштәге бәғзеләрҙең бына шулай һымағыраҡ итеп һөйләшкәнен ишеткеләгәнем бар.

Бындай хәбәрҙәрҙең мәғәнәһенә әллә ни иғтибар ҙа бирмәй "эйе шул, шулаа-й, хәтерләйһеңме, анау йылдары..." тип, замандашыңдың һүҙен йыҡмай, хатта күтәреп алып китергә лә була, әммә мин бына ошо мәсьәләгә объектив күҙлектән сығып ҡарауҙы өҫтөнөрәк күрәм. Ысынлап та, әгәр хәтерләргә тырышып ҡараһағыҙ, хөрмәтле ҡорҙаштар, беҙҙең турала ла бынан ҡырҡ йылдар самаһы элек ололар тап ана шулай итеп "бурылдашҡылай" торғайны бит. "...Йәштәр боҙолдо, тамам шашты, әҙергә "хәҙер", тиеп кенә тора. Беҙҙең һымаҡ, мылтыҡ тотоп, "За Родину, за Сталина!", тип атакаларға барып, үлем менән көн дә осрашып йөрөһә, белерҙәр ине шәй... Һуғыштан һуң ас-яланғас көйө илде бөлгөнлөктән күтәреүҙәре генә ниндәй ауыр булды. Хәҙер йәштәр Аллаһы ла бар тип белмәй..." Ғөмүмән, һәр быуын ололары йәштәр менән ризалашҡыһы килмәй.

Тәрәнерәк фекерләп, уйлап ҡарайыҡ әле, туғандар. Хәҙерге замандың йәштәре тормошто нисек алып барыуына ҡыҙҙәребеҙҙе аса биреберәк бағайыҡ. Беренсенән, илдәге барлыҡ етештереү өлкәһендә тик йәштәребеҙ көс түгә лә баһа! Унда-бында осраған, хаҡлы ялға сыҡһа ла, эшен әле бер аҙ дауам итергә теләүсе, йәштәр менән тәжрибә бүлешеүсе олораҡтарҙы ғына иҫәпкә алмағанда. Телевизорҙа йыш ҡына күрһәткән ҙур ғына, хатта гигант производстволарҙы етәкләгән яуаплы



эштәрҙә лә күпселек йәштәр йөҙөн күрәбеҙ. "Ҡара әле, әсәһе, бынау заводтың директоры беҙҙең кесе улыбыҙ йәшендә генә бит! Әй, үткән гүмер..." тип һөйләшкелеп тә алабыҙ өйҙә бәғзе ваҡыт. Икенсенән, илебеҙҙә һәүетемсә генә юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән һәр төрлө фәнни-техник үҙгәрештәрҙе артабан алға этәреү ҙә оло быуын вәкилдәрен алыштырып торған йәш кадрҙарыбыҙ ҡулында. Утыҙға ла яҡынлашмаған фән кандидаттарыбыҙҙың күплеге, әле генә өсөнсө тиҫтәһен тултырған фән докторҙарыбыҙ барлығы күп нәмәгә ишара. Өсөнсөнән, һаулыҡ һаҡлау эшендә лә, ҡатмарлы операциялар атҡарған хирургтарҙың йәпйәш кенә икәнлеген күреп һөйөнәбеҙ. Тимәк, беҙҙең быуын кешеләре хәҙер "һөйләнмәй" генә, уҙ ҡартлығын ифрат та тыныс ҡаршы алырға тейештер. Дүртенсенән, ил һағында ла йә унда, йә бында сығып торған локаль конфликттарҙа батырлыҡ күрһәткән йәш егеттәребеҙ, хатта ҡыҙҙарыбыҙ хаҡында хәбәрҙәрбыҙ. Борон-борондан Рәсәйҙе, йомшаҡ итеп әйткәндә, яратып етмәгән Ҡушма штаттарҙы һәм башҡа Европа илдәренең батшаларын үҙебеҙ менән һәр саҡ иҫәпләшергә мәжбүр итеүсе дәһшәтле әрмебеҙҙең төп олонон да йәштәребеҙ тәшкил итә. Артабан, икмәк, ит, үҫемлек аҙыҡтары етештереүселәребеҙ - йәштәр түгелме? Кемебеҙҙә хәҙер "ни ашарға", тигән киҫкен проблема тора? Колхоз-совхоздар бөтөрөлөүгә лә ҡарамаҫтан, мал аҫырап, бынамын итеп тормош ҡороп йәшәгән йәштәребеҙ ҙә бихисап. Бынан тыш, беҙ эшләгән осорҙа, беҙҙең эш хаҡынан тотҡан һалымды атайәсәйҙәребеҙгә пенсия итеп түләп барған булһалар, хәҙер беҙ ай һайын алып торған пенсия ҡайҙан килеп тора тип уйлайһығыҙ? Ифрат дөрөҫ! Әлеге йәштәребеҙҙең эш хаҡынан тотолоп килгән һалым иҫәбенән. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, йәштәребеҙ - беҙҙе хәҙерге көндә туйындырып тороусылар. Күп кенә хакимиәт башлыҡтары, төрлө өлкәләрҙәге министрҙар һәм уларҙың урынбаҫарҙарының да йәше әле ҡырҡҡа ла яҡынлашмағандары булыуы ла, минеңсә, күп нәмәгә ишара. Уларҙан юғарыраҡ органдарҙа ла ҡартҡоролар әллә ни күренмәй бит хәҙер.

Бына ошо хаҡта фекер йөрөткәндә бер мәсьәләне айырып асып һалырға ла ниәтем. Беҙ йәш саҡта бәғзе ололарҙың "Алланы ла һанламайҙар", тигәне ифрат та дөрөҫ булған. Ысынлап та, беҙҙе "һөйөклө партиябыҙ" тап ана шундай рухта тәрбиәләп үҫтерҙе бит инде. Бына был мәсьәләлә хатта беҙҙең оло быуын кешеләре хәҙерге йәштәрҙән үрнәк алырға тейеш, тиһәм дә, хаталанмаҫмын. Аллаһ Тәғәлә Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм аша барса халыҡтарға ебәргән оло хаҡиҡәтте аңлаған йәштәр хәҙер күбәйгәндән-күбәйә. Бәғзе беҙҙең кеүек ҡартыраҡтар "...хәййәғәләс-салаһ, хәййәғәләлфәләх..." (намаҙға ашығығыҙ, ҡотолорға (уттан) ашығығыҙ) тип саҡырған аҙандың мәғәнәһен аңларға теләмәй, йомшаҡ-йомшаҡ баҫып, Аллаһ йортон урап үтеп киткән мәлдә, йәш кенә егет һәм ҡыҙҙарыбыҙҙың бер-береһен "Әссәләмү ғәләйкүм!" тип сәләмләй-сәләмләй йома намаҙына ашығыуҙарын күреп һөйөнәһең. Имам һөйләгән хөтбәне тыңларға, йәмәғәт намаҙын уҡырға мәсеткә килгән йәштәребеҙ ололарға ҡарағанда мәртәбәләргә күберәк, айырыуса ҡала ерҙәрендә. Улар бит, кемдер әйтмешләй, барыһы ла "мулла" түгел. Һәр кемеһе ҡайҙалыр эшләп йөрөй. Хатта ауылда имам булып торған бәғзе йәш егеттәрҙең вахта эсулы менән булһа ла ғаиләһенә аҡса эшләп алып ҡайтҡандарын беләм. Әйткәндәй, ҡала ерендәге шундай йәштәрҙең күпселеге үҙҙәренең балаларын башҡорт мәктәбендә уҡытырға тырыша. Бына ни әйтер инем мин хәҙерге йәштәребеҙ хаҡында, ҡәҙерле туғандар.

Әлбиттә, һәр ваҡыттағыса, проблемаларыбыҙ ҙа етерлек (улар Ер йөҙөндә бер ҡасан да бөткәне юҡ һәм бөтмәйәсәк). Йәштәргә эш етешмәү, моғайын, иң беренсе сиратта торалыр. Әммә уныһын һәр кем үҙенсә хәл итергә тырыша. Кемдер Себергә, йә иһә башҡа яҡҡа китеп аҡса таба. Ә күптәр үҙебеҙҙә лә теләгәненә ирешә. Әле күптән түгел, телевизорҙан "республикала буш эш урындары эшһеҙҙәр һанына ҡарағанда ике мәртәбәгә күберәк" тигән мәғлүмәт күреп ҡалдым. Әгәр был хәбәр дөрөҫлөккә тап килһә, артабан да өмөтләнергә була. Тик мин әле маҡтаған йәштәребеҙҙең исемлегенә иртәнән кискә тиклем, һис "кипмәҫтән" эскелек менән булышҡан, атаәсәһенең пенсияһына, йә иһә ҡатыныһының эш хаҡына, йә булмаһа, сабый пособиеһына ғына йәшәп ятҡандар инмәй, әлбиттә. Ундайҙар беҙҙең ваҡытта ла булды, беҙҙән алда ла булғандыр, моғайын. Әммә уларға ҡарап, барлыҡ йәштәребеҙ хаҡында һүҙ йөрөтөү ғәҙел булмаҫ. Ә "суицид", "наркомания", "эскелек" тип аталған афәттән йәштәребеҙҙе тик иманға килеү генә ҡотҡарыр, иншаллаһ. "Эскелек" тигәндәй, кемгә нисектер, әммә миңә һуңғы йылдарҙа ҡала урамдарында иҫерек йәштәр күпкә, хатта мәртәбәләргәләр, һирәгерәк күренгеләгән һымаҡ тойола. Был хаҡта статистика мәғлүмәттәрен белмәйем, әммә беҙҙең заманда "һүкмыш" йәштәр ҡала урамында аҙым һайын тиерлек осрай ине. Был күренеште лә йәштәребеҙгә бер "плюс" итеп иҫәпләйем.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы Яңы йыл байрамдарында ял итеүҙең рәсми графигын баҫтырып сығарҙы. Хеҙмәт кодексына ярашлы, 1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуар - Яңы йыл каникулдары, 7 ғинуар - Христос Раштыуаһы - байрам көндәре булып тора. Шәмбе 29 декабрҙәге ял көнө дүшәмбе 31 декабргә күсерелгән. Шулай итеп, Башҡортостанда йәшәүселәр 10 көн рәттән ял итә. Шуны билдәләп үтәйек, 29 декабрҙәге эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара.

✓ "Башҡортостан" милли паркы туристарға ҡаргиҙәрҙә инергә рөхсәт бирҙе. Ләкин раҫланған маршруттар буйынса ғына йөрөргә мөмкин, тип хәбәр иттеләр милли парк хакимиәтенән. Маршрут буйлап йөрөү өсөн ҡаргиҙәр водителенә һәм пассажирҙарына рөхсәт алырға кәрәк. Техниканың дәүләт теркәүе булмаһа, рөхсәт ҡағыҙы бирелмәй. Маршрутты боҙған өсөн 3-4 мең һум штраф ҡаралған, тип иҫкәрттеләр милли паркта.

✓ Башҡортостандың Ветеринария идаралығы начальнигы - баш ветеринар Азат Йыһаншин 2019 йылдан республикала бөтә йорт бесәйҙәренә һәм эттәренә махсус тамға ҡуйыу башланыуы хаҡында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, уларҙың барыһы ла Теркәү һәм иҫәп буйынса берҙәм федераль мәғлүмәт системаһына индерелә. Был йорт хайуандарына төрлө сирҙәргә, тәү сиратта ҡоторoҡҡа ҡаршы тейешле вакцина яһалғанмы, юҡмы икәнлеген күҙәтеп барыу өсөн кәрәк.

✓ Яңы йыл алдынан сәфәргә сығырға уйлаған пассажирҙар билеттарҙы 50 процент ташлама менән һатып алыу мөмкинлегенә эйә, тип хәбәр иттеләр Рәсәй тимер юлдары компанияһында. Махсус тәкдим "Яңы йыл төнө" акцияһы барышында ғәмәлдә була һәм 31 декабрҙә ҡуҙғалған поездарҙың купе, плацкарт вагондарының өҫкө урындарына ҡағыла. Тәкдим балалар тарифы буйынса, шулай уҡ ойошторолған төркөмдәр өсөн билет алыусыларға ҡағылмай.

✓ Республикала "Башҡортомдоң 100 йыры" дискы менән таныштырыу сараһы булды. Дискты Сибай концерт-театр берекмәһендә ҡатнашыусылар яҙҙырған. Альбомда бөтәһе 100 йыр. Проект авторҙары - республиканың атҡаҙанған артисы Айбулат Ҡотошов һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәмил Туйсин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КҮТӘРГЕҺЕҘ ХАҠТЫ...

**Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 2019 йылдың 1 ғинуарынан төбәктә сүп-сар сығарыу өсөн расланған яҡынса түләү хаҡын республикала йәшәүселәр күтәрә алмаҫлыҡ тип атаны һәм хаҡты кәметергә ҡушты.**

Ноябрҙә республиканың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты төбәк операторының ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү хеҙмәтенең хаҡын иҫәпләп сығарғайны. Уның бер кубометры өҫтәлгән хаҡҡа һалым менән 650,40 һумға тиң ине. Тәүҙә Башҡортостанда йәшәүселәр 2019 йылдың 1 ғинуарынан түләргә тейешле сикке хаҡ аталды. Күп фатирлы йортта йәшәгән бер кешегә ул айына 140,92 һум, шәхси йортта иһә 200,54 һум тәшкил итте. Халыҡ хаҡты ныҡ юғары тип ҡабул иткәндән һуң ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса тарифтар яңынан ҡаралды, фаразланған хаҡ кәметелде. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Михаил Киреев һүҙҙәренсә, хәҙер күп фатирлы йортта йәшәүселәр айына бер кешегә 130 һум, ә шәхси йортта иһә 185 һум түләргә тейеш. "Хаҡты төшөрөгөҙ, халыҡ быны түләй алмай, - тине Радий Хәбиров. - Улар мөмкин түгел һәм ҡабул ителмәй. Тарифтар юғары булмаҫҡа тейеш. Бөгөн үк төбәк операторҙарын саҡырығыҙ. Кәрәк булһа, минә ебәрегеҙ". Республика етәксеһе ауылдарҙан сүп-сарҙы ситкә сығарыу системаһын ентекле уйларға һәм ауыр тормош хәлендә ҡалған граждандарға сүп-сар сығарған өсөн компенсациялар ҡарарға ҡушты.

# ЮЛДАРҘЫ КҮҘӘТӘ...

**Башҡортостан Хөкүмәте 2019 йылда аварияһы юл участкаларында 62 стационар һәм 50 күсмә фото һәм видеотеркәү комплекстарын ҡуйырға хәл итте. Был хаҡта социаль селтәрҙә республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров яҙҙы.**

Билдәләнеүенсә, юлдарҙа "ҡара таптар" ҡалмаһын өсөн кәмендә 660 комплекс кәрәк. Уларҙы һатып алыу өсөн бюджеттан тыш аҡсаны йәлеп итеү, дәүләт-шәхси партнерлыҡ варианттарын ҡарау күҙаллана. Быға тиклем "Приуралье" автомобиль юлдары федераль идаралығы камералар ҡуйыу урындарын үҙгәртергә ниәтләүе хаҡында хәбәр иткәйне. "Видеотеркәү камералары водителдәрҙе тәртипкә өйрәтә. Беҙ түбәндәге алымды ҡулланырға уйлайбыҙ: уларҙың урындарын алмаштырабыҙ, сөнки водителдәр ҡайҙа урынлашҡанын белә. Ниндәй ҙә булһа муляж ҡалдырабыҙ, ә ысын камераны, шартлы рәүештә әйткәндә, икенсе бағанаға ҡуябыҙ. Быны даими эшләргә ниәтләйбеҙ", - тине "Росавтодор"ҙың төбәк бүлексәһе етәксеһе Рәмил Сенжапов. Киләһе йылда М5, М7, Р-240 федераль трассаларында ҡуйыу өсөн 60 камера һатып алыуға килешеүҙәр төҙөлгән, тип хәбәр итте ул.

# СИБАЙҘА...

**Сибайҙа онлайн режимында ҡаланың экологик хәл мәсьәләһе буйынса ғәҙәттән тыш хәлдәр комиссияһы ултырышы уҙҙы. Урындағы хакимиәт, Ғәҙәттән тыш хәлдәр, Экология министрлығы, Роспотребнадзор вәкилдәре, шулай уҡ табиптар һәм ҡала халҡы Сибайҙағы хәлде тикшерҙе.**

Роспотребнадзорҙың төбәк идаралығы мәғлүмәте буйынса, урындағы халыҡтан ҡырҡыу еҫкә зарланып яҙылған ялыуҙар килә. "Тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә һауала көкөртлө водородтың 1,3 тапҡырға күберәк булыуы асыҡланған. Халыҡ һәм комиссия ағзалары был хаҡта белә, - тип хәбәр итте ултырышта ведомство хеҙмәткәре. - Был кеше организмының һауалағы үҙгәрештәрҙе тиҙерәк тойоуын аңлата. Халыҡ ҡыҫҡа ваҡытлы еҫ сығыуын һиҙҙе - кешеләр уны башҡаса ҡабул итте. Ләкин был ҡыҫҡа ваҡытлы күренеш ине - организмда кире эҙемтәләргә килтергән бер нәмә лә йыйылманы, халыҡтың һаулығында сағылыш тапманы". Башҡортостан Республикаһында Гигиена һәм эпидемиология үҙәге филиалы лабораторияһы һауаны тикшереүҙе дауам итә.

КӨНАУАЗ

**Үткән аҙнала "Башҡортостан сода компанияһы" өсөн сеймал базаһы итеп Ҡуштау һайланған", тигән хәбәр бар йәмәғәтселекте тетрәндерҙе. Кемдәрҙер ошо ҡарар арҡаһындаТоратау менән Йөрәктауға һәр төрлө хужалыҡ эшмәкәрлеген алып барыуҙы тыйған федераль һәм халыҡ-ара һаҡланған статус бирелеүе өсөн ҡыуанысын белдерҙе, күпселек ҡарарҙы хупламаны һәм, башҡа шихандар менән бергә Ҡуштау ҙа һаҡланып ҡалырға тейеш, тип күтәрелде. Был шау-шыу тыуҙырған ҡарарға нисек киленгән һуң?**

# ӨС ШИХАНДЫҢ БЕРЕҺЕ БУЛМАҪМЫ?



"Ике ай буйына Рәсәй Хөкүмәте һәм "Башҡортостан сода компанияһы" менән һөйләшеүҙәр алып барҙыҡ, - тине был хәлгә аңлатма биреп Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Ринат Бәширов. - Тәүҙә "Башҡортостан сода компанияһы"ның позицияһы шундай ине: Ҡуштау 2017 йылдан беҙҙеке, Башҡортостан Хөкүмәте, Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы менән килешеп, эштәрҙе башлауға рөхсәт һәм лицензиялар алдыҡ. Шуға күрә Ҡуштауҙы мотлаҡ үҙләштерәбеҙ. Ләкин беҙгә Ҡуштау ғына етмәй, унда үҙләштереү эштәре ҡиммәт, әгәр башҡа шихандар ҙа эшкәртеүгә тапшырылмаһа, республика ҡаҙнаһы ла, социаль өлкә лә аҙыраҡ аласаҡ. Беҙгә Торатау менән Йөрәктау кәрәк".

Ринат Бәширов әйтеүенсә, һөҙөмтәлә ҡарар ҡабул ителә: "Кул ҡуйылған килешеүҙә республика Хөкүмәте үҙенә "Башҡортостан сода компанияһы"на предприятиеһын һаҡлап ҡалыуҙа ярҙам итергә йөкләмә алды. Был беҙҙең өсөн бюджетҡа йылына яҡынса 10 миллиард һум килем, ошо аҡсаға мәктәптәр, поликлиникалар, спорт ҡоролмалары төҙөйбеҙ, биләмәләрҙе төҙөкләндерәбеҙ. Бынан тыш, Хөкүмәт "Башҡортостан сода компанияһы" тирә-йүндәге биләмәләрҙе социаль-иҡтисади үҫтереүгә компенсация взносын йылына 100-ҙән 700 миллион һумға тиклем арттырырға тейеш тигән шарт менән компанияға Ҡуштауҙы үҙләштерергә ҡамасауламаҫҡа ризалашты. Беҙ аҡсаны яңы эш урындары асыуға ла йүнәлтергә уйлайбыҙ", - тип белдерҙе Ринат Рәшит улы.

Билдәле булыуынса, Ҡуштау - өс шихандың береһе, Стәрлетамаҡтан 18 саҡрым көнсығышта һәм Өфөнән 140 саҡрым көньяҡта урынлашҡан. Тау эргәһендә генә Шихан, Үрнәк ҡасабалары һәм Ҡуштау тау саңғыһы үҙәге бар. Быға тиклем "Башҡортостан сода компанияһы"ны вәкилдәре Ҡуштау сеймалының химик составы етештереү өсөн ҡулай түгел тип белдергәйне. Республика Хөкүмәте компанияға сеймал сығанаҡтары сифатында Ғүмәр яткылығын һәм башҡа сығанаҡтар тәҡдим итһә лә, улар был тәҡдимдәрҙең береһен дә ҡабул итмәне. Әлеге ваҡытта "Башҡортостан сода компания"һы Шәкетауҙы эшкәртә. Хәҙер тау ҡаҙылып бөткән тиерлек, сеймал запасы, компания раҫлауынса, дүрт йылға етерлек. Алдан киң мәғлүмәт саралары яҙғанса, Ҡуштау запасы комбинаттың 50 йыл буйы өҙлөкһөҙ эшләүенә етергә тейеш.

"Башинформ" агентлығы хәбәрсеһенең "Сода" компанияһына Шахтауҙың урынын төҙөкләндереү талабы ҡуйыласаҡмы?" тигән һорауына Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Рәйеф Әбдрәхимов шулай тип яуап бирҙе:

- Әлеге көндә Шахтауҙа эштәр тамамланғас та үткәреләсәк саралар планы әҙерләнә. Уның урынында парк буласаҡ тип көтәбеҙ, музей төҙөләсәк, ял итеү зоналары, яһалма һыу сығанағы барлыҡҡа киләсәк. Был хәҙер генә эшләнәсәк эш түгел. Шахтауҙы биш йыл тирәһе эшкәртәсәктәр әле. Шул ваҡытҡа төҙөкләндереү буйынса план әҙер булыр. Ҡуштауҙы эшкәртеү планы ла төҙөлгән, юл планы бар, унда кемдең нимә өсөн яуаплы булыуы билдәләнгән. Иң тәүҙә геологик тикшеренеү эштәре тора. Ҡуштауҙы ҡасан эшкәртә башлаясаҡбыҙ йәки эшкәртә башламаясаҡбыҙмы икәне, был эштәрҙең күләме геологик тикшеренеүҙәрҙән һуң билдәле буласаҡ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡуштауҙа геологик эштәр алып барыу буйынса ҡарар бөгөн түгел, ә 2017 йылда уҡ ҡабул ителгән, йәғни, "Башҡортостан сода компанияһы" етәкселәре белдереүенсә, Башҡортостан Хөкүмәте, Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы менән килешеп, улар тарафынан эштәрҙе башлауға рөхсәт һәм лицензиялар алынған булған. Геологик разведка эштәре тағы ла кәмендә ике йыл дауам итәсәк һәм ул тамамланғандан һуң ғына Ҡуштауҙың "Сода" өсөн сеймал булараҡ тура киләме, юҡмы икәнлеге буйынса ҡарар ҡабул ителәсәк. Был турала һүҙ йөрөтөргә иртәрәк, тимәк. Нисек кенә булмаһын, шихандар буйынса әллә нисәмә йылдарға һуҙылған һорауға асыҡлыҡ индерелгәндәй булды. Бигерәк тә Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың Торатау менән Йөрәктауҙы үҙ эсенә аласаҡ "Торатау" геопаркын булдырыу тураһындағы Указы ҡыуандырҙы. Ә Ҡуштауға килгәндә... Яҡшыға өмөтләнәйек.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓25 декабрҙә Ленин исемендәге майҙанда Ҡыш бабайҙар парады ойоштороласаҡ. Йолаға әйерелгән сарала баш ҡаланың 400-гә яҡын Ҡыш бабайы ҡатнаша. Программала "Держава" барабансылар һәм мажореткалар төркөмө, ҡала мәҙәниәт һарайы оркестрының сығыштары, күңел асыуҙар һәм уйын-көлкө ҡаралған. Бынан тыш, төп Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу ҡатнашлығында үҙәк ҡала шыршыһын асыу тантанаһы була.

✓10 декабрҙә шыршы баҙарҙары асыла. Улар ҡалағы 71 майҙансыҡта 31 декабргәсә эшләй. Өфөлә шыршыны "Алтын", "Шакша", "Юрматы", "Гастелло", "Көньяҡ полюс", "Метро", "Кувыкин", "Заречный", "Любимый", "Сипайлово", "Тагарин", "Энтузиастар", "Корсо" сауҙа комплекстары янында һәм башҡа майҙансыҡтарҙа һатып алырға була.

✓2020 йылда Башҡортостанда үтергә тейешле VI Бөтә донъя фольклориадаһының үҙ логотибы барлыҡҡа килде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Республика халыҡ ижады үҙәге 2018 йылдың сентябрендә Фольклориада логотибын эшләүгә конкурс иғлан иткәйне. Ошо көндәрҙә конкурсҡа йомғаҡ яһалды. Еңеүсе - Өфөнән дизайнер Андрей Масленников ("Ависком" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте).

✓Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе" трилогияһы Бөйөк Британияла нәшер ителә. Башҡорт яҙыусыһының әҫәре The Taste of Forbidden Fruit - "Тән ғазабы" тигән исем аҫтында инглиз теленә тәржемәләнгән. 2018 йылда Мәскәүҙәге "Нәфис әҙәбиәт" нәшриәтендә яҙыусының "Аҙғын тәүбәһе" трилогияһы рус телендә донъя күрҙе. Китап донъяның 25 иленән 300 нәшриәт ҡатнашҡан 31-се Халыҡ-ара китап күргәҙмә-йәрминкәһендә үҙ урынын алды.

✓Рәсәй Хөкүмәте ил иҡтисадын долларҙан баш тарттырыу буйынса проект әҙерләй. Бер-ике аҙнанан планды ил Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев раҫларға тейеш. Хөкүмәт әҙерләгән проектта ниндәйҙер сикләү йәки тыйыу саралары тураһында һүҙ бармай, йәғни долларҙа иҫәпләшеүгә тыйыу булмай. Хөкүмәт көҙ уңында тотҡан төп маҡсат - Рәсәйҙең ҙур сауҙа партнерҙары менән иҫәпте - Ҡытай һәм Европа илдәре менән - юанға һәм евроға, Евразия иҡтисади союзы илдәре менән - һумға күсереү.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Тәбиғәттең һәр миҙгеле үҙенсәлекле. Ҡышын, мәҫәлән, рәхәтләнеп ҡарҙа аунарға, боҙҙан йәки ҡарҙан хыялында йөрөгән матур һарай төҙөргә, сана-саңғы шыуырға, сәкән һуғырға мөмкин. Бигерәк тә ауыл балаларына был йәһәттән хөрриәт - иркенлек, киңлек! Хатта хоккей ҡумтаһы юҡ тип аптырарға ла түгел - йылға өҫтөн ҡарҙан көрәп, һепереп таҙарттыңмы, бына тигән һырғалаҡ була ла ҡуя... Ине...**

# ИҢ МӨҺИМЕ - ҮҘЕГЕҘҘЕ ҺАҠЛАҒЫҘ!

Эйе, шулай була торғайны, хәҙер иһә ауыл булһынмы, ҡаламы - балалар, ҡасан оолар тау өйә, хоккей ҡумтаһы эшләп ҡуя, тип көтә лә йөрөй. Өҫтәүенә, торлаҡты хеҙмәтләндереү йәки коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре уларҙы даими рәүештә таҙа һәм ҡулланыуға яраҡлы рәүештә тоторға тейеш. Сираттағы оператив кәңәшмәлә мәғлүм булыуынса, бөгөн ҡала райондарының Торлаҡ-хужалыҡ идаралыҡтары тарафынан 41 хоккей ҡумтаһы эшләнгән, шуларҙың 15-е - заманса. 37-һенә һыу һибеп, боҙ туңдырылған, 4-һе ҡарҙа спорт уйындары уйнау өсөн йыһазландырылған. Шулай уҡ ихаталарҙа 15 һырғалаҡ эшләнгән. Хоккей ҡумталары йыл әйләнәһенә файҙаланыла. Йәйгеһен балалар унда йәйге спорт уйындарын уйнай. Һәм был уңайлыҡтың барыһын да улар өсөн идара итеү компаниялары булдыра - майҙандарҙы таҙарта, борттар, ҡапҡалар ремонтлана һәм буятыла, яҡтыртыу системаһы ремонтлана. Үкенескә күрә, әҙерҙең бер ваҡытта ла ҡәҙере юҡ: үҫмерҙәр үҙҙәре үк ошо объекттарҙы ҡыйрата, вата, емерә. Был иһә өҫтәмә финанс сығымдарына килтерә. Хоккей ҡумталары дөйөм йорт милкенә ҡарамағанлыҡтан, уларҙы тотоу сығымдары тулыһынса идара итеү ойошмалары елкәһенә ята. Тимәк, баш ҡалала йәш граждандарға бәләкәйҙән үк ҡала милкен "минеке" тигән төшөнсәне һеңдереп тәрбиәләү зарурлығы актуаль булып ҡала. Сөнки был майҙансыҡтар балалар, үҫмерҙәр өсөн генә түгел, уларҙы теләге булған оолар ҙа саф һауала сәләмәтлеген нығытыу, үҙен формала тотоу өсөн файҙалана ала. Тап улар йәштәрҙә һаҡсыллыҡ тойғоһон тәрбиәләргә тейеш тә инде.

Ҡыш - яҙ-йәй-көҙҙән ҡайырмалы, донъянды онотоп уйнар мәл генә түгел, ә йылды йомғаҡлап, уға йомғаҡ яһар һәм бисмиллалап яңы йылды башлар мәл дә. Яңы тормошто үҙең теләгән йәки ихтыяр көсөң еткән теләнә ҡайһы көндән башларға мөмкин булһа ла, күптәр ни өсөндөр тап Яңы йылды көтә. Әйтерһең дә, шаулап-гөрләп байрам иткән, шарт та шорт фейерверктар аттырған сағыу байрамдан һуң тормош ҡапыл үҙгәреп китә. Фейерверк тигәндән, улар инде күпләп сауҙаға сыға башланы. Өфөлә генә пиротехника һатыу рөхсәт ителгән 26 махсус урын бар. Улар шәхси эшҡыуарҙар йәки предприятиелар. Сауҙа менән бер рәттән, пиротехника һатыусыларҙың эше лә етди контроль аҫтына алына, сөнки сертификацияланмаған тауар алыуҙың сәләмәтлек өсөн зыянлы булыуы ла ихтимал. Шуға күрә тәрлә контроль, шул иҫәптән янғынға ҡаршы ойошмалар белгестәре пиротехник изделиеларҙы һатып алғанда һатыусы мотлаҡ тауарҙың талаптарға тап килеүен раҫлаусы документтарҙы, талаптарға ярашлы сертификатты күрһәтергә йәки улар менән таныштырырға бурыслы, тип белдерә. Һәм ҡулланыусы үҙенең хоҡуҡтарын белергә һәм ошо документтарҙы талап итергә тейеш, юҡһа, ажиотаж мәлендә күптәр рөхсәт ителмәгән тауар менән сауҙа итергә лә тартынмай. Һөҙөмтәлә, белгестәр әйтеүенсә, 31 декабрҙән Раштыуа байрамдары тамамланғанға тиклем янғындар - ике, уларҙа һәләк булыусылар һаны 3 тапҡырға арта икән. Бында, әлбиттә, пиротехника ғына түгел, башҡа сәбәптәр ҙә етерлек. Нисек кенә булмаһын - хаҡ кеше ғүмерҙәре менән түләнә. Шуға күрә, йыл һайын байрам алдынан профилактика эштәре алып барыла, байрам көндәрендә янғын хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре көсәйтелгән режимда эшләй. 100-ҙән ашыу объект, бигерәк тә мәктәптәр, балалар ижады йорттары, мәҙәниәт йорттары, сиркәүҙәр һәм ҡорамдар, парктар, скверҙар айырым иғтибар үҙәгендә тора.

Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, тип әйтһәләр ҙә, байрам мәлендә уйламағанда йәрәхәт алырға, бешергә йәки туңырға мөмкин. Өфө ҡала хакимиәте халыҡтың һаулығын һаҡлау бүлеге начальнигы Рәдиф Сабиров белдереүенсә, травмпункттар гәҙәти режимда эшләйәсәк. Әгәр инде ҡапыл сирләп китһәгеҙ, 31 декабрҙә поликлиникалар шәмбе графигы буйынса төшкә тиклем эшләй, ә 1 ғинуарҙан (көндөң беренсе яртыһында) - дежур терапевт ҡабул итәсәк. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бойороғона ярашлы, 22 декабрҙән иртәнге 9-ҙан, 9 ғинуарҙа иртәнге 9-ға тиклем министрлыҡтың һәм медицина ойошмаларының етәксе органдары тәүлек әйләнәһенә дежурҙа буласаҡ.

Медицина ярҙамы күрһәтеү буйынса амбулатория, поликлиникалар байрам көндәре графигы буйынса иртәнге 8-ҙән киске 4-кә, ә инде саҡырыуҙар булғанда, 3-кә тиклем эшләйәсәк. Шулай уҡ дауаханалар ҙа ауырыуҙарҙы ҡабул итәсәк. Шулай уҡ оператив кәңәшмәлә ҡала хакимиәте башлығының ошо көндәрҙә генә тәғәйенләнгән яңы урынбаҫары Алина Сөләймәнова Өфөнөң төп майҙандарында ҡалҡҡан боҙ һарайҙарындағы, майҙансыҡтарҙағы хәүефһеҙлек рейды һөҙөмтәләре менән таныштырҙы. 10 майҙандағы ҡаласыҡтарҙы биҙәгән боҙ һындар балаларға ғына түгел, ололарға ла зыян килтермәһен өсөн ентекле тикшерелгән. Бер нисә етешһеҙлек асыҡланған, улар тиҙ арала бөтөрөләсәк, ә дөйөм алғанда, майҙансыҡтар хәүефһеҙлек нормаларына тура килә. Артабан да был майҙансыҡтар ҡала хеҙмәте белгестәренең күҙ уңында буласаҡ.

Нисек кенә булмаһын, байрам көндәрен сир-сырхауһыҙ, сәләмәтлеккә зыянһыҙ үткәреүҙән дә яҡшыһы юҡ! Шуға күрә иң мөһиме - үҙегеҙҙе һәм яҡындарығыҙҙы һаҡлағыҙ!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

СӘЙӘСӘТ

# ИШЕТЕРГӘ!

**"Берҙәм Рәсәй"ҙең XVIII съезында илдең бөтә төбәктәренән йыйылған делегаттар фирҡәнең спикерҙары менән ағымдағы йыл һөҙөмтәләрен барланы һәм яҡын киләсәккә йүнәлеш билдәләне. 46 кешенән торған Башҡортостан делегацияһын республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров етәкләне.**

Ике көн эсендә съезд делегаттары бик күп мәсьәләләрҙе тикшерҙе, әммә барыһының да хәтерендә ҡалған мәл шул булды: фирҡәнең этик комиссияһы булдырылды һәм фирҡә ағзалары өсөн этик нормалар ҡабул ителде. Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙ сығышында: "Партияла иң мөһиме - уның вәкилдәренең тоторо̆ҡло абруйы булыуы. Абруйҙы һатып алып булмай, уға ныҡышмалы хеҙмәт, кешеләрҙең ихтыяжына ихлас иғтибарлылыҡ, уларға ярҙам итергә тырышыу, хәҡиҡәтте яҡлау һәм ғәҙелһеҙлек менән көрәшеп кенә өлгәшергә була", - тине. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы етәксеһе урынбаҫары Эльвира Айытҡолова этик нормаларҙың ваҡытлы ҡабул ителеүен билдәләне һәм: "Йыш ҡына партияның имиджы айырым шәхескә бәйләнеп ҡарала. Уның эшмәкәрлеге йәмғиәттә негатив реакция тыуҙыра һәм партия ағзаһының һәр кемгә ҡағыла", - тип билдәләне.

Ил башлығы фирҡә ағзаларына шулай уҡ халыҡ өсөн эшләргә, һәр кемдә ишетергә һәм тәкәббәрлек менән тупаҫлыҡҡа юл ҡуймаҫҡа тигән бурыс ҡуйҙы. Шулай уҡ уларҙы бер урында тапанмаҫҡа, ә һөҙөмтәле эшләргә саҡырҙы. Илдең үҫеше өсөн ниндәй аныҡ эш башҡарырға кәрәклеген аңламағандар өсөн партияла, ғөмүмән, власта урын юҡ, тип билдәләне ул. Владимир Путин тотош ил өсөн мөһим аспект - төбәктәр тураһындағы мәсьәләне лә күтәрҙе һәм партияға милли проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙы контролдә тотоу бурысын йөкмәтте.

"Таҙа ил" проекты съезда ҡаралған мөһим проекттарҙың береһе булды. Әлеге экологик проект күп йүнәлештәрҙе үҙ эсенә ала. Съезда Башҡортостан вәкиле буларaҡ ҡатнашыусы Александр Давыдов фекеренсә, был проект төбәктәрҙә законһыҙ булдырылған сүплектәр менән көрәшеү һәм ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар өсөн заманса полигондар төҙөү өсөн мөһим роль уйнай. "Радий Хәбиров икенсе ҡышҡа тиклем республикала рөхсәтһеҙ барлыҡҡа килгән сүплектәрҙе юҡ итергә һәм яңылары барлыҡҡа килмәһен өсөн административ яза булдырырға тигән фарман бирҙе. Беҙҙең партия был мәсьәләне ҡаты контролдә тотасаҡ һәм халыҡ менән берлектә ошондай сүплектәрҙе юҡ итәсәкбеҙ", - тип билдәләне ул.

"Берҙәм Рәсәй" халыҡҡа тағы ла яҡыная. Съезд делегаттары һайлаусылар менән бәйләнештә булыу өсөн заманса канал булдырыуҙың мөһимлеген билдәләне. Оҙаҡламай "Фирҡә ус төбөндә" ("Партия на ладони") тип аталған мобиль ҡушымта эшләй башлаясаҡ.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Пневмония

❖ 3 өләш тоҙ, 4,5 өләш ҡара борос менән кориандрҙы ҡайнаған, әммә эҫе булмаған һыу менән еүешләргә лә, арҡаға үпкә тапҡырына һыларға. Төрәнөп, бер нисә сәғәт ятып торорға. Тәүлегенә бер нисә тапҡыр ҡабатларға. Бынан тыш, тигеҙ күләмдә бал менән ҡара боросто болғап, көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға.

### Киҙеү

❖ Ҡара боростоң дарыуханаларҙа һатылған эфир майын алырға, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 3-4 тамсы майҙы балға ҡушып ашарға.

### Етен орлоғо

❖ Ҡабалан ашау, тәмәке тартыу кеүек ғәҙәттәр ашҡаҙанда оҙайлы гастрит барлыҡҡа килеүгә этәрә. Быяла банкаға 1 ҡалаҡ етен орлоған һалып, өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыу ҡуйырғансы 20 минут тирәһе болғатырға, иҙелергә. Шуны етен орлоҡтары менән бергә эсергә. Ашҡаҙандағы ауыртыу тиҙ үтә, тимәк, ашҡаҙан тынысланa.

### Невралгия

❖ Яран гөлә япрағын өҙөп алып, ҡулдар менән бер аҙ иҙергә һәм шешкән нервы өҫтөнә һалып, етен туҡыма менән нығытырға. Өҫтөнән мамыҡ шәл бәйләгеҙ.

❖ Парапроктит мәлендә тигеҙ күләмдә алынған яран япрағы һәм балдан яһалған ҡатнашманы ҡулланырға.

### Тамаҡ шешкәндә

❖ Эрен тығынын һәм миндалина шешеүен тамаҡты йыш сайҡатыу бөтөрә. 4-5 юл япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә, 1-2 балғалаҡ бал өҫтәргә һәм тамаҡты сайҡатырға. Процедураны сәғәт һайын ҡабатларға.

❖ Тамаҡ ныҡ ауыртҡанда 1 стакан йылы һыуға ярты балғалаҡ аш содаһы, бер семтем тоҙ, 1 тамсы йод өҫтәп, көнөнә 5 тапҡыр тамаҡты сайҡатырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

***✓ Балалар баҡсаһы мөдирҙәре белдереүенсә, сит ойошманың әҙерләү технологияһын тотоу-тотмауҙарын, ашты нисек алып килеүҙәрен һәм аҙыҡ-түлектең ниндәйен тотоноуҙарын күреү, контролдә тотоу мөмкин түгел.***



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**Кейеҙ баҫыу - Урта Азия һәм Евразия далаларында киң таралған малсылар шөғөлө ул. Ул XIX-XX быуатта ла малсылыҡта һарыҡ көтөүҙәре өҫтөнлөк иткән урындарҙа һаҡлана килгән. Был мәҙәни ареалға ҡырғыҙҙар, ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар, ҡалмыҡтар,ноғайҙар һәм башҡа дала халыҡтары һәм көньяҡ һәм көнсығыш башҡорттары инә. Кейеҙҙе ярым күсмә тормош алып барған халыҡтар ғына түгел, ултыраҡ тормош алып барғандар ҙа баҫҡан.**

Баҫылған һәм яҡшы итеп йәйелгән йөндән әҙерләнгәнлектән, йылыны яҡшы һаҡлаған, һыуға бирешеп бармаған материал малсылар көнкүрешендә төрлөсә ҡулланылған. Кейеҙ менән тирмә һәм аласыҡтарҙы көпләгәндәр, иҙәнгә һәм түшәк итеп йәйгәндәр. Ҡышын кейеҙ кейемдәр кейгәндәр. Кейеҙҙе матурлап биҙәгәндәр ҙә, бигерәк тә байрам һәм йола (башлыса туй) өсөн ҡулланылғандары йәмләнгән.

Башҡорттарҙың ҡул менән кейеҙ баҫыуы тураһында XVIII быуатта, И. Георги хеҙмәттәрендә телгә алына. XIX быуатҡа ҡараған ғилми әҙәбиәттә башҡорт малсыларының шөғөлө тураһында мәғлүмәт бөтөнләй юҡ, тиһәң дә була. В. Черемшанский, Н. Казанцев хеҙмәттәрендә генә кәсептәр исемлегендә кейеҙ баҫыу осрай, торлаҡты һүрәтләгәндә улар ҡулдан баҫылған кейеҙҙән яһалған балаҫтар тураһында яҙа. Тирмәләргә ябылған аҡ йәки һоро кейеҙ тураһында П. Небольсиндың юл очерктарында тап итә алабыҙ. Ҡунаҡ һыйлау йолаһы тураһында яҙғанда саҡырыусыларҙың кейеҙ өҫтөнә түңәрәк яһап ултырыуҙары хаҡында әйтелә.

Үҙенең "Башҡорттар" тигән тарихи-этнографик тикшеренеүендә С.И. Руденко Георгиҙың ҡул менән кейеҙ йәйеүҙе һүрәтләүен был эште ат ярҙамында башҡарыу хаҡында яҙып тулыландыра. Үкенескә, автор кейеҙҙе биҙәү тураһында яҙмай. Башҡорт кейеҙҙәрендәге биҙәктәргә башлап Н.В. Бикбулатов иғтибар итә.

Ошоларға ҡарамайынса, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының этнографик экспедициялары ярҙамында башҡорт кейеҙе хаҡындағы мәғлүмәт тулылана бара. 1958 йылда Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өлөшөнә экспедициянан һуң рәссам Г. Мөхәмәтшиндың һүрәттәре һәм фотолары һаҡланып ҡалған. Ошо уҡ авторҙың һәм 1962, 1963, 1971, 1972, 1981, 1982, 1983 йылдарҙағы экспедицияларҙа ҡатнашыусыларҙың биҙәкле кейеҙҙәр фотолары бар. 1970 йылда Йылайыр районында кейеҙ баҫыу мәленә тура килдек. Кейеҙҙең ҡайһы бер өлгөләре БР Милли музейы, Өфөләге Археология һәм этнография музейы, Рәсәй этнография музейын тулыландыра. Ошоларҙың барыһы ла беҙгә башҡорт халҡының быға са аҙ өйрәнелгән шөғөлө тураһында һүҙ йөрөтөргә мөмкинлек бирә лә инде.

Шулай итеп, кейеҙ әҙерләү өсөн ике ауыр хеҙмәт процесын үтергә кәрәк. Уларҙың беренсеһе - һарыҡ ҡырҡыу, икенсеһе - йөндө "туҡмау". Кейеҙ өсөн материал әҙерләү мал ҡарау, донъя көтөү кеүек көндәлек эштәр араһында башҡарылған. Кейеҙҙе лә шул ҡырҡ эш араһында баҫа һалғандар. Һуңғараҡ, XIX быуатта йәйләү циклы үҙгәргәс (йәйләүгә сығыу мәле ҡыҫҡарған һәм үҙ ваҡытынан шылған), боронғо йорт кәсептәрендә лә үҙгәрештәр була.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

КӨНАУАЗ

**Ҡолаҡҡа ятышһыҙ булһа ла, һуңғы ваҡытта аутсорсинг һүҙен йыш ишетергә тура килә. Инглиз һүҙе "аутсорсинг" тышҡы сығанаҡты йәки ресурсты ҡулланыу тигәнде аңлата, йәғни ойошма килешеү нигеҙендә ниндәйҙер төр эшмәкәрлеген тик ошо йүнәлештә эшләүсе компанияға тапшыра. Башҡа төрлө хеҙмәт килешеүҙәренән айырмалы рәүештә, аутсорсинг буйынса килешеү оҙайлы ваҡытҡа төҙөлә. Беҙҙең илдә, башлыса, был хеҙмәт дауахана, балалар баҡсаһы һәм мәктәптәге туҡланыу процесын ойоштороуға, һаҡ мәсьәләләрен көйләүгә һәм йыйыштырыу эшмәкәрлегенә бәйле. Түбәндә беҙ туҡланыуға ҡағылышлы аутсорсинг системаһына туҡталабыҙ. Республика балалар баҡсаһы һәм мәктәптәрендә аутсорсинг системаһын индереү 2016 йылда башланып, 2017 йылда тулыһынса күсеп бөттө. Электән өйрәнгән ашатыу системаһынан аутсорсингка күсеп, беҙ оттоҡмо, әллә отолдоҡмо?**

# ОТТОҠМО, ӘЛЛӘ ОТОЛДОҠМО?



Минең мәктәп йылдарында ашханала дежурлыҡ итеү тәртибе булды. Ашнаҡсыларҙың иттән аш һалыуы, фарштан үҙҙәре котлет эшләп бешереүе ҡәҙимге күренеш ине. Салаттар ҙа мәктәп баҡсаһында үҫтерелгән йәшелсә-емештән көнөндә әҙерләнде. Ғөмүмән, мәктәп ашханаһында сифатлы, витаминға бай, зарарһыҙ аш-һыу етештерелде. Ә бөгөн балаларҙың бөтә ашағаны ярымфабрикаттарға ҡайтып ҡалды. Етмәһә, аш-һыуҙы ла ситтә бешереп, ашханаға алып килеү ҡәҙимге күренешкә әйләнде. Сәйҙе генә түгел, ашты ла эҫе көйөнсә һаҡлаусы термостарҙың булыуы эште күпкә еңеләйтә, әлбиттә, ләкин әҙер аш-һыуҙың ундай һауыттарҙа күпме һәм нисек һаҡланғанлығын беҙ белә алмайбыҙ.

Балалар баҡсаһы мөдирҙәре белдереүенсә, сит ойошманың әҙерләү технологияһын тотоу-тотмауҙарын, ашты нисек алып килеүҙәрен һәм аҙыҡ-түлектең ниндәйен тотоноуҙарын күреү, контролдә тотоу мөмкин түгел. Ләкин белем биреү учреждениелары үҙҙәренә килеп еткән аш-һыуҙың сифатын тикшертергә мөмкин, тик күптәр быны эшләмәй. Мәҫәлән, Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе Гүзәл Аҫылова һүҙҙәренсә, әлегә тиклем республикалағы 3 мең белем биреү учреждениеһының 174-е генә уҡыусыларға килтерелгән аҙыҡтың сифатын тикшертеү өсөн "Һынау үҙәге" дәүләт ҡаҙна учреждениеһына мөрәжәғәт иткән. Уларҙың да күбеһе был процедураны бер тапҡыр ғына башҡарған һәм тынысланған. Ә ҡалған 2826 белем усағы етәкселеген балаларға тәҡдим ителгән аш-һыуҙың ниндәй булыуы борсомай, тимәк. Ә мәсьәләне ҡаты контролдә тоторға тейешле республика Мәғариф министрлығының был иғтибарһыҙлығын нисек баһаларға? Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Эльвира Айытҡолова ла: "Аутсорсинг системаһы индерелгәндән һуң туҡланыуҙың сифаты кәмене. Төрлө районлarҙа был хәл төрлөсә. Беҙҙең бурыс - иң яҡшы практиканы һайларға һәм уны таратырға", - тип, сифатҡа бәйле проблема барлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Баланың һаулығы, тәү сиратта, сифатлы аҙыҡ-түлектән етештерелгән тәмле аш-һыуға бәйле. Тимәк, белем усаҡтарында бындай проблема бөтөнләй булмаҫҡа тейеш.

Сифаттың төшөүенә һәм ашханала ассортименттың кәмеүенә ошо өлкәлә эшләүсе тәьминәтселәрҙең әҙ булыуы ла сәбәпселер, моғайын. Шуға күрә, һайлау конкурсында бөтә компанияларға тәьмин итеүсе булараҡ ҡатнашырға рөхсәт ителә һәм иң әҙ суммаға контракт тәҡдим иткән ойошма конкурс еңеүсеһе тип табыла. Бәләкәй сумманы тик арзан аҙыҡ-түлектән етештерелгән аш-һыу менән генә тәьмин итеп була, ә ундай туҡланыуҙың юғары сифаты тураһында һүҙ йөрөтөп булмай. Бигерәк тә ауыл ерендә был күҙгә ныҡ бәрелә, тип билдәләнеләр Дәүләт Йыйылышының мәктәптәрҙә аутсорсинг һөҙөмтәлелеге мәсьәләләрен тикшереү буйынса эш кәңәшмәһендә. Ләкин һорау бар икән, тәҡдим дә буласаҡ. Аутсорсинг ауыл уңғандарына эшҡыуарлыҡта үҙҙәрен һынап ҡарарға тағы ла бер юл аса. Шуға күрә был өлкәлә хәлдәрҙең яҡын арала яҡшырыуына өмөт бар.

Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Рида Собханҡолова һүҙҙәренсә, мәктәп туҡланыуы баҙары 6 миллиард һум тәшкил итә һәм уны бер тигеҙ өлөштә дәүләт бюджеты менән ата-әсәләр күтәрә. Аутсорсинг системаһы индерелгәндән һуң йылы туҡланыу өсөн түләү "Аксиома" компанияһы аша башҡарыла. Баланың шәхси иҫәбендәге аҡсаның һәр үҙгәрешен асыҡ күреү мөмкинлеге һәм ярҙам хеҙмәтенең килеп тыуған һорауҙарға тиҙ үк асыҡлыҡ индереүе - "Аксиома"ның ыңғай яғы. Ләкин әлеге процессинг үҙәк бөтә яҡлап та камил түгел. Мәҫәлән, баланы туҡланыуға ҡуйыу йәки алыуҙы, теория буйынса, "Аксиома"ның үҙендә лә эшләргә була. Тик практикала хәл бөтөнләй икенсе. Буталыштар килеп тыумаһын өсөн ғаризаны бер көн алдан, иртәнге 10-ға тиклем тәрбиәсе аша бирергә кәрәк. Шулай итеп, тәрбиәсе иғтибарын балаларға йүнәлтеү урынына шылтыратыуҙар һәм ғариза битен тултырыу менән булышырға мәжбүр. Ә бала кисен ауырып китеп, икенсе көнгә балалар баҡсаһына бара алмаһа, 126 һум юҡ булды тигән һүҙ, сөнки аҡса кире ҡайтарылмай. Тәү ҡарашҡа, был ваҡ аҡса һымаҡ, ләкин ай-йыл дауамында ул ҙур суммаға әйләнә. Был хәл менән, тәбиғи, ата-әсәләр риза түгел һәм яңынан иҫәпләү булырға тейеш, тип бара. Ләкин бала ғаризанан алынмағас, уның туҡланыуы өсөн аҡса тотонолған һәм кире ҡайтарыу мөмкин түгел икәнен иҫбатлай туҡланыу комбинаты. Ике яҡ та хаҡлы үҙенсә. Был мәсьәләлә алтын урталыҡты табыу туҡланыу аутсорсингының шулай уҡ киҫекмәҫтән хәл итәһе мәсьәләһе.

Тәьмин итеүсе менән мәктәп һәм балалар баҡсаһының үҙ-ара бәйләнешен законға ярашлы нығытыусы норматив-хоҡуҡи база әлегә тиклем юҡ. Уларҙың бөтә мөнәсәбәте тик дәүләт контракты нигеҙендә генә башҡарыла. Был да төрлө мутлашыусыларға юл асып, аутсорсинг системаһының бәҫен төшөрөүгә булышлыҡ итә. Ләкин аутсорсингтың тик етешһеҙлеген генә күреү урынһыҙ. Мәҫәлән, СанПин-дың аш-һыу әҙерләү блогына талаптары ныҡ ҡаты. Яңы мәктәп һәм балалар баҡсаларында был йәһәттән бөтәһе лә һәйбәт, ләкин уҙған быуат урталарында төҙөлгәндәре заманса талаптарға яраҡлашмауы һөҙөмтәһендә йыш ҡына төрлө штрафтарға дусар була ине. Шулай уҡ кадрҙар мәсьәләһе лә әлегә тиклем тулыһынса хәл ителмәй килде. Нормативҡа ярашлы бешерелгән аш-һыуҙың сифаты өсөн диетик шәфҡәт туташы яуаплы, ләкин күп урында ул ябай шәфҡәт туташы менән алыштырыла килде йәки барыһы ла ашнаҡсының оҫталығына тапшырылды. Аутсорсингка күсеү мәктәп һәм мәктәпкәсә учреждение хакимиәтенең күп төрлө отчеттар исемлегенән балалар туҡланыуына бәйлеләрен алып ташлап, бөтә иғтибарын ойошманың белем һәм хужалыҡ эшмәкәрлеген нығытыуға ваҡытын күбәйтте. Белем биреү усағының был система буйынса туҡланыуға күсеүе аҡсаны экономияларға һәм уҡыусылар өсөн икенсе йүнәлештәге сығымдарҙы ҡапларға ла мөмкинлек бирә.

Бөтә башланғыстарҙың да, бер яйға һалып алғансы, етешһеҙлеге була. Тимәк, аутсорсингтың да, беҙҙең илдә яңыраҡ ҡына ҡулланылышҡа инеүен иҫәпкә алғанда, үҫергә, хаталарын төҙәтергә һәм ике яҡ өсөн дә ҡулайлы булырға мөмкинлеге ҙур. Быны урындағы үҙидаралыҡ тәьмин итеүсе компания һәм ата-әсәләр менән берлектә көйләргә тейеш. Шуға күрә, аутсорсинг системаһына күсеп отолдоҡ, тип ауыҙ тултырып әйтеп булмай, сөнки ҙур һығымталар яһарға бик әҙ ваҡыт үткән. Артабан нимә булырын ваҡыт күрһәтер.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

✓ **Төркиҙәр көн арауығында ваҡытты ҡояшҡа ҡарап билдәләгән, көн һүҙе үҙе лә ҡояш мәғәнәһендә ҡулланылған. Улар йәшәгән тирмәләр үҙенсәлекле ҡояш сәғәте ролен дә үтәгән.**



*ТАРИХИ ФАРАЗ*

# КИНӘЙӘЛЕ ИШАРАМЫ,

## әллә ябай һүрәтме?

**"Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә", тигәндәй, йөрөп ятһаң, мотлаҡ берәй ҡыҙыҡлы хәлгә йәиһә сетерекле осраҡҡа тап булаһың бит ул. Хәлдәрҙең ундайҙары ғәҙәттә ер-һыу, урман-ҡырҙар менән бәйле була.**

Шулай йәйге матур көндәрҙең береһендә 10 һәм 8 йәшлек ейәнсәрҙәремдең - Таһир Кусимов исемендәге гимназияның 5-се, 3-сө синыф уҡыусылары Ләйлә менән Лизаның - үтә ныҡышмалы үтенеүҙәренә ҡаршы тора алмайынса, үҙебеҙсә сәйәхәткә сығып киттек. Унан алда ла йә Ирәндеккә, йә Уралтау һыртына йөрөштөргөләй инек. Был юлы ҡыҙҙарыма легендар Һаңғала (Ханҡала) тауын, ундағы Ҡараһаҡал батыр мәмерйәһен күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙым. Төрлө мажараларға әүәҫ ҡыҙҙарға саф йәшмәнән торған оло тау бик оҡшаны. Ә бына уларҙың "Ни өсөн ул төрлө төҫтәге (ҡыҙыл, йәшел, күк, ҡара) йәшмәләрҙән тора?" тигән һорауына аныҡ ҡына яуап таба алманым. Ысынлап та, тауҙарҙың яҡынтирәләгеләре ябай таштан, ә Һаңғала бер үҙе йәшмәләрҙән хасил. Әлеге феноменды нисек аңлатырға?

Риүәйәттәр буйынса, ошо тау битләсендә илбаҫар Сынғыҙ хан ғәскәрен ял иттереп киткән, үҙебеҙҙең Ҡараһаҡал батырыбыҙ төйәкләп, көс йыйып торған. Минә ҡалһа, риүәйәттәр ысынбарлыҡҡа тап киләләр. Ни өсөн тигәндә, тау тирәһендәге бик күп ҡорғандар ошоноң тере шаһиттары. Боронғо ҡорғандар бар икән, тимәк, ул урында ҡоралһы яу, ҡан ҡойош булған. Башҡорт ғәскәренең башлығы Ҡараһаҡалға яугирҙәре йәшмәне соҡоп, ышыҡ урын да эшләгәндәр. Мәмерйә тигәндәре тап кеше ҡулы, кеше көсө менән яһалған ҡыуышҡа оҡшай. Унда еңел генә күтәреләм, аннат ҡына баҫып алам тимә. Таш ҡыуыш шул ҡәҙәре йәтеш, унайлы урында, уға кеше күҙенә салынмайынса, һиҙҙермәйенсә яҡынлашыуы мөмкин түгел. Әйтергә кәрәк, Сынғыҙ ҙа, Ҡараһаҡал да ифрат уңайлы урында һайлаған. Тауҙа ҙур ғәскәргә һәр төрлө хәүеф-хәтәрҙән, ел-ямғырҙан ышыҡлаһыр урын етерлек.





Әллә ҡайҙарҙан күҙгә ташланып, һөрәйеп торған мөһабәт тауҙың иң бейек нөктәһендә кемдеңдер ҡәберлеге бар. Бәҙҙе бер олораҡтар, унда ниндәйҙер батыр ерләнгән, ти торғайны. Мәгәр шулай икән, уның аҡтарылып ташлап, урынында тәрән соҡор өңөрәйеп ҡалыуы үтә йәмһеҙ күренеш. Ерем-һыуым, ватаным, тип баш һалған батырҙарыбыҙға ҡарата ундай мөнәсәбәт булырға тейеш түгел. Ныҡ төпсөнөп һорашҡан ейәнсәрҙәремә: "Был соҡор квартал сигенең билдәләнеше", - тип аңлатҡан булдым инде. Алдаштым, ул сик арыраҡ ине.

Ҡыҙҙарҙы ғәжәпкә ҡалдырғаны емештәре ҡыҙарып бешкән бер метр ғына бейеклектәге мышар (миләш) ағастары булды. Ул ағастың әрһеҙлегенә үҙем дә аптырайым. Диңгеҙ кимәленән 700-800 метр таш бейеклектә, туктауһыҙ ыжғыр ел, ҡышын һыуыҡ, йәйен томра аҫтында емеш биреп ултыр әле. Бында ҡарға бутҡаһының иҫәбе-һаны юҡ, йыуаһының тәме үҙенә бер башҡа. Тимерлеккә күмер әҙерләү маҡсатында йығып алынған йыуан ҡарағас төпһәләре күп. Шауҙырҙап емерелгән ҡаяһынан аҫҡа ҡараһаң, башың әйләнә. Ә ҡыҙҙарыма ҡыуаныс, улар бөгөн ун бер, ун ике быуын олатайҙарының изге төйәген күрҙеләр, олатайҙарының эҙен һаҡлаған һуҡмаҡтар буйлап үттеләр. Ҡыҫҡаһы, тарих менән аралаштылар.

Шулай йәшмә тауҙың бер осонан икенсеһенә барып сыҡтыҡ. Ошонда һәләк булып баш һалған батырҙар рухына бағышлап, намаҙ уҡыныҡ, доға ҡылдыҡ. Улар риза булып ҡалғандарҙыр, тигән өмөттәмен.

Тауҙың төньяҡ битләүенән һутлы бөрләгән, ҡурай еләге сүпләй-сүпләй төшөп барғанда ташҡа баҫылған сәйер генә һүрәткә тап булдыҡ. Һүрәттән ҡамсат бүрек кейгән башҡорт яугиры ҡарап тора төҫлө. Үҙе көләмһерәп йылмайғандай ҙа һымаҡ. Йәшмә таштағы төҫлө рәсем ҙур түгел, усҡа һыймалы. Мин уны яҫы таш менән ҡаплап киттем. Таш булһа ла, ел-ямғыр теймәһен.

Хәйер, ул ысынлап та һүрәтме, әллә тәбиғәт-әсәбеҙ тыуҙырған сираттағы мөғжизәме? Бәлки, ошо ерҙә азатлыҡ хаҡына ҡан ҡойған башҡорт батырҙарының рухы тыныслыҡ тапҡан, уны һаҡлағыҙ, тигәнерәк юғарынан төшкән ишаралыр? Унһын ҡапыл ғына әйтеп булмай. Ә бына ошо мөғжизәне ошоғаса бер кемдең дә күргәне булмағанлығына иманыбыҙ камил.

Әлбиттә, ҡайтышлай, юл буйынса ҡыҙҙарым мине теге серле һынға ҡағылышлы һорауҙар менән күмде. Килә торғас хатта, ул Ҡараһаҡал батыр һүрәте булырға тейеш, тигән ҡарарға килделәр. "Ә, бәлки, кем белә..." тип уйлап ҡуйҙым үҙем дә. Тәүтормош рәссамы дөм-ҡараңғы Ташөй мәмерйәһендә (Шүлгәнташ) һәр төрлө хайуандар һынын мәңгеләштереп ҡалдыра алғанды, ниңә батыр йөрәкле сардарыбыҙ һүрәтен төшөрмәҫкә, ти? Был, әлбиттә, бары тик фараз ғына. Шулай ҙа кем белә, бәлки... Һәммәбеҙгә мәғлүм: ысынбарлыҡ фараздарҙан тыуа...

**Иҙрис НОҒОМАНОВ.**
**Әбйәлил районы.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1782 йыл** - Башҡортостан территорияһы өйәҙҙәргә бүленә.

➔ **1783 йыл** - Ҙур Себер тракты - Екатеринбург аша Рәсәйҙең европа өлөшөнән Себергә илтеүсе юл рәсми раҫлана.

➔ **1784 йыл** - Өфөлә типтәрҙәрҙең кавалерия ғәскәре ойоштorола.

➔ **1784 йыл** - Тәүге дворяндар һайлауҙары үткәрелә.

➔ **1784-1792; 1796-1798 йылдар** - Ырымбур хәрби губернаторы Осип Андреевич Ингельстром идара иткән йылдар. Башҡортостанды кантондарға бүлеп, күп йылдар хеҙмәт иткәндәре өсөн чиндарын ҡалдырыу хоҡуғы менән башҡорттарҙы кантон начальниктары итеп тәғәйенләй. Мосолмандарҙың Ырымбур дини идаралығын ойоштора.

➔ **1784 йыл** - И. Татищев менән И. Мясниковтың Минйәр заводы төҙәлә.

➔ **1786 йыл** - Ырымбурҙа ҙур янғын була.

➔ **1787 йыл** - Лугининдарҙың Арти заводы төҙәлә.

➔ **1788 йыл** - Лугининдарҙың Ҡуһа заводы төҙәлә.

➔ **1788 йылдың 22 сентябре** - Баш бирмәҫ башҡорттарҙы дингә ылыҡтырып бойһондороп тотоу ниәтендә императрица Екатерина II Өфөлә мосолмандарҙың Ырымбур дини йыйылышын асыу хаҡында указ сығара. Дини йыйылыш 1799 йылдың 4 декабрендә генә асыла. Бойорокта, Дини йыйылыш ағзалары - Ҡаҙан татарҙарынан, ә кәнсәләр хеҙмәткәрҙәре урыҫтарҙан булырға тейеш, тип әйтелә.

➔ **1790-1800 йыл** - Ырымбур казактары һәм мишәрҙәре менән бергә башҡорттар М.И. Кутузов етәкселегендә фин армияһының хәрби хәрәкәттәрендә ҡатнаша.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ОНОТОЛҒАН ҠӘҮЕМ

## Төрки календары

Төркиҙәр яҙ, йәй, көҙ һәм ҡыш миҙгелдәренең һәр береһен ун бишәр көндән торған алты өлөшкә бүлеп, йыл әйләнәһенең 24 мәлен билдәләгән. Миҙгелдәрҙең һәр бер мәле тәбиғәт торошон һәм үҙгәрештәрен сағылдырған.

Яҙ мәлдәре: 4 февраль - яҙ башы, 18 февраль - тәүге ямғыр, 6 март - бөжәктәрҙең уяныуы, 21 март - яҙғы көн һәм төн тигеҙләнеше, 5 апрель - яҙғы сыуаҡ, 21 апрель - ләйсән (ашлыҡ) ямғыры.

Йәй мәлдәре: 6 май - йәй башы, 21 май - кесе тулыш, 6 июнь - орлоҡ мәле, 21 июнь - йәйге ҡояш торошо, 7 июль - кесе эҫелек, 24 июль - оло эҫелек.

Көҙ мәлдәре: 8 август - көҙ башы, 23 август - эҫелек аҙағы, 8 сентябрь - аҡ ысыҡ, 21 сентябрь - көҙгө көн һәм төн тигеҙләнеше, 8 октябрь - һалҡын ысыҡ, 23 октябрь - бәҫ төшөү.

Ҡыш мәлдәре: 7 ноябрь - ҡыш башы, 22 ноябрь - кесе ҡар, 7 декабрь - оло ҡар, 22 декабрь - ҡышҡы ҡояш торошо, 6 ғинуар - кесе һалҡындар, 21 ғинуар - оло һалҡындар.

Төркиҙәр көн арауығында ваҡытты ҡояшҡа ҡарап билдәләгән, көн һүҙе үҙе лә ҡояш мәғәнәһендә ҡулланылған. Улар йәшәгән тирмәләр үҙенсәлекле ҡояш сәғәте ролен дә үтәгән. Тирмәнең ишек яғы һәр ваҡытта көнсығышҡа ҡаратып ҡоролған. Ҡояш йүгән теҙгене бейеклегенә күтәрелеүгә, уның нурҙары усаҡ көмбәҙенә төшкән. Был ваҡытта малдар көтөүгә ҡыуылған. Төшлөк ваҡытында ҡояш тирмәнең ҡатын-ҡыҙҙар яғына (төньяҡ өлөшөнә) ҡарай. Сәғәт дүрттәр тирәһендә ҡояш нурҙары был яҡтан китә, һәм быҙауҙарҙы ялан-ҡәртәгә ҡыуалай торған ваҡыт етә. Ҡояш нурҙары усаҡ көмбәҙенең өҫкө осонан түбәнгәрәк төшөп, теҙген оҙонлоғона етеүгә, көтөүҙән малдар ҡайтып, киске һауын ваҡыты еткән.

Шулай итеп, боронғо төркиҙәр, тәбиғәт балалары булараҡ, үҙ тормоштарын тәбиғи мөхит ритмына яраҡлаштырып, күп быуаттар дауамында ҡояш һәм ай торошона ҡарап көн иткән.

## Төркиҙәрҙең ғөрөф-ғәҙәттәре һәм байрамдары

Төркиҙәр өсөн ҡыш йылдың иң ауыр ваҡыты булып торған. Көслө ел һәм ҡаты һыуыҡтар, ҡар ҡатламының артыҡ ҡалын булыуы арҡаһында тибендә йөрөгән малдар зыянланған, кешеләрҙең дә аҙыҡ запастары аҙайып, ашап-эсеү яғы хөртәйә барған. Ҡыш тәбиғәттең оҙайлы ваҡытҡа йоҡоға талыуы кеүек ҡабул ителгән. Төркиҙәр ошо миҙгелдә кеше өсөн зыянлы көстәрҙең ныҡ әүҙемләшеп китеүенә ышанған. Ҡояшҡа табыныусы боронғо төркиҙәр ҡыш айҙарының кире эмоциональ йөгөнтөһөн ауыр кисергән, күрәһең. Хәрәкәт яратыусы ата-бабаларыбыҙ оҙон ҡыш айҙарын йорт-ҡура тирәһендә генә үткәрергә мәжбүр булған. Улар ошо миҙгелдә үлеп тереләү менән тиңләгән. Бәлки, шуның өсөн беҙ ҙә, уларҙың бөгөнгө вариҫтары булараҡ, ҡышҡы ҡараңғылыҡты һәм һалҡынды өнөп бөтөрмәйбеҙҙер.

Ҡышҡы ҡояш торошо көнөндә, йәғни 22 декабрҙә, төркиҙәр Нардуған тип аталған байрам ойоштorған. Тап ошо көн, ҡояштың йыллыҡ әйләнеш циклы тамамланып, көн ҡайтанан оҙая башлағанлыҡтан, төркиҙәр тарафынан шатлыҡ менән ҡаршыланған.

Нардуған байрамы иртәнән үк ата-бабалар рухына, йорт-өй эйәләренә ҡорбан салыу менән башланып киткән. Ил-йорт, нәҫел-нәсәп имenлеген, оҙон ҡыштың имен-аман үтеүен теләп, намаҙ ҡылынған, Тәңренән яҡлау һәм дә һаҡлау үтенелгән. Ҡатын-ҡыҙҙар мул табын әҙерләгән, барыһына ла һый-хөрмәт күрһәтелгән. Табындан һуң күңелле уйындар, йыр-бейеүҙәр башланған. Олоһо ла, кесеһе лә усал ҡыш һалҡынына бирешмәгән мәңге йәшел шыршы тирәләй әйлән-бәйлән уйнаған. Төркиҙәр Нардуған байрамы кешегә оҙон ҡышты имен-аман үтеп сығыу өсөн көс-ҡеүәт бирә, тип ышанған. Ҡышҡы оҙон төндәр төркиҙәр өсөн батырҙар тураһында хикәйәттәр һөйләү ваҡыты булған. Ҡараңғы һәм буранлы ҡышҡы кистәрен әкиәт һәм хикәйәттәрҙе яттан һөйләй белеүсе тел оҫталары саҡырылған, йәштәр (балаларҙан башҡа) аҡһаҡалдар һүҙен йотлоғоп тыңлар булған. Боронғолар һүҙен тыңлау кешегә көс-ҡеүәт өҫтәй, уның рухын нығыта, тип иҫәпләнгән.

**Рафаэль БӘҘӘРТИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Балаға спорт бер нисек тә зыян килтермәй. Был, иң беренсе, уның сәләмәтлеге. Икенсенән, эске тәртибе. Өсөнсөнән, ныҡлы рухы. Бына ошо өс күрһәткес үҫешкәндә, кеше тормоштағы ауырлыҡтарҙы еңеп, уңыштарға өлгәшә аласаҡ.*

# СПОРТ - ҠЫЙЫУҘАР

## унда мәмәйҙәргә

**Һуңғы йылдарҙағы рухи күтәрелеш осоронда йәштәребеҙ спортҡа ла йөҙ борҙо. Быға саса ят булған спорт төрҙәре буйынса алдынғылыҡ яулаған милләттәштәребеҙ хаҡында интернеттан һәм башҡа мәғлүмәт сараларынан уҡып-күреп-белеп торабыҙ. Ҡыуанyслы хәл, әлбиттә. Һәм был башы ғыналыр, тип уйлайбыҙ. Ә шулай ҙа нимә beләбеҙ беҙ спорт һәм спортсылар тормошо хаҡында? Спорт төрҙәренең файҙаһы һәм зыяны хаҡында? Милләттәргә хас спорт төрҙәре тураһында, мәҫәлән? Ошолар хаҡында республикабыҙ һәм Рәсәй кимәлендә билдәле булған спортсылар (шулай уҡ тәжрибәле педагогтар) - Башҡорт дәүләт аграр университетының физик тәрбиә кафедраһы мөдире Руслан БИКЕМБӘТОВ һәм баш ҡалабыҙҙың олимпия резервындағы "Өфөлө" спорт мәктәбе директоры Фуат ДӘМИНДАРОВ менән һөйләштек.**

**Бына һеҙҙең, ябай ауыл малайҙарының, спортҡа мөнәсәбәтегеҙ, бөгөнгө ҙур күрһәткестәргә алып килгән спортсы юлығыҙ ниндәй шарттарҙа башланды?**

**Ф. Дәминдаров:** Әбйәлил районының Әбйәлил ҡасабаһында тыуып үҫтем. Атайым спорт менән шөғөлләнгән кеше һәм мин бәләкәй генә көйөнсә уға эйәреп йөрөп, уның шөғөлдәрен күреп, уны ҡабатлап, уға оҡшарға тырыштым. Волейбол, футбол уйнайҙармы, ололар араһында буталып йөрөйөм, ҡарап ултырам, туп ситкә осһа, йүгереп барып алып киләм. Ҡайһы саҡ шул туп ҡаты ғына итеп башҡа ла килеп эләгә торғайны. Бәләкәй саҡта хатта бер тапҡыр ҡолата ла һуҡҡан. Ололар ҡурҡышып йүгерешеп килһә, мин тырышып-тырмашып тороп, туп артынан йүгереп маташам, ти.

Бына ошо атайҙан, эргәләге ағайҙарҙан күреп башланды ла барыһы ла. Атанан күргән - уҡ юнған, тиелә бит халыҡта ла. Ары уҡырға Магнитогорск университетына спорт буйынса менеджмент һөнәренә уҡырға юлландым. Был шундай яңы специальность булып, ике сығарылыштан һуң ябылып та ҡуйҙы. Бында спорт үҙәктәренә, спорт командаларына етәкселәр әҙерләйҙәр ине. Бында ла университеттың йыйылма командаһында булдым.

**Р. Бикембәтов:** Ейәнсура районының Абҙан ауылынанмын. Шулай уҡ бала саҡтан әрһеҙ ауыл малайҙары булып, атай ҡулы аҫтында эшкә лә, спортҡа ла өйрәнеп үҫтем. Һәр ваҡыт хәрәкәтсән уйындарҙа ҡатнаштым, ҡырҙа, тауҙарҙа йөрөнөм, йәйҙәрен һыуҙан сыҡманым. Мәктәпкә инде беҙ сыныҡҡан, тос балалар булып килдек. Класыбыҙҙағы ун өс малай һәр ваҡыт спорт уйындарында, ярыштарҙа ҡатнашып йөрөнөк. Физкультура уҡытыусыларыбыҙ Булат Рәшит улы Арыҫланбаев һәм Әнисә Ғаяз ҡыҙы Хөсәйеновалар ҙа спортҡа һөйөү тәрбиәләүҙә ҙур өлөш индергәндәрҙер, тием. Ошо башланғысҡа хыянат итмәй, мәктәптән һуң Сибай институтының физкультура һәм биология факультетына уҡырға барҙым. Институтта волейбол, баскетбол һәм лапта менән шөғөлләндем. Ятаҡта Ейәнсура районының көрәшселәр ауылы булған Муйнаҡ егеттәре менән бергә тура килеп, улар шауҡымында яңынан көрәшкә әүрәп киттем. Көрәш буйынса Рәсәй чемпионатына тиклем барып етеп, юғары ғына күрһәткестәргә өлгәшелде.

**Һеҙ икегеҙ ҙә матур балалар тәрбиәләнгән башҡорт ғаиләһе башлыҡтары. Балаларығыҙҙы спортҡа ылыҡтырҙығыҙмы? Һеҙҙең уйығыҙса, спорт балаларға һәр ваҡыт файҙа килтерә аламы? Баланы 4-5 йәшенән спортҡа тапшырып, хата яһап ҡуйырға мөмкинме?**

**Р. Бикембәтов:** Улымды биш йәшенән гимнастикаға бирҙем. Был иң иртә башлана торған спорт төрҙәренең береһе. Артабан үҙе һайлай белгәнсәгә тиклем физик һәм рухи әҙерлек алһын, тип уйланым. Бөгөн бит балалар беҙҙең бала саҡтағы кеүек ауылда иркен сабышып йөрөп, иртә ҡул аҫтына инеп бешекмәй. Балалар баҡсаһында ла өйҙә үтә көндәре. Шунлыҡтан, гимнастика улыма спортҡа башланғыс булыр тинем. Күпмелер ваҡыт гимнастикала йөрөнө лә, Бөрйәнгә барып, үҙенән саҡ ҡына ҙурыраҡ малайҙарҙың боҙҙа елдерешеп йөрөүен күреп, ҡуша уйнап ҡайтҡандан һуң, "Хоккейға барам" тине. Быға саса хоккей ҡарарға йөрөтә инем, әммә уның менән шөғөлләнеү, уйнау бит бөтөнләй икенсе нәмә. Ултыртып, хоккейҙың ни икәнен аңлаттым. Әммә ул бит әле бөтөнләй бәләкәй бала, етди анализлай белмәй. Хатта аңлап та етмәйҙер әле. Был тәңгәлдә ата-әсәгә балаһының мөмкинлектәренә, сәләмәтлегенә ҡарап, ул шөғөлләнәсәк спорт төрөн дөрөҫ һайлай белеү кәрәк. Улымдың хоккей менән үтә ныҡ мауыҡҡанын күреп, күндем. Бына дүрт йыл инде ул хоккейҙа шөғөлләнә. Эйе, ауыр. Әммә беҙ әсәһе менән шулай һөйләшкәнбеҙ: үҙенә һиҙҙереп йәлләмәйбеҙ, яҡлашмайбыҙ, уның өсөн йүгермәйбеҙ. Уңыштарын күреп маҡтайбыҙ, ауыр сағында йылы һүҙ, кәңәш биреп күтәрмәләйбеҙ, уйындарына йөрөйбөҙ һәм башҡалар.

Балаға спорт бер нисек тә зыян килтерә алмай. Был, иң беренсе, уның сәләмәтлеге. Икенсенән, эске тәртибе. Өсөнсөнән, ныҡлы рухы. Бына ошо өс күрһәткес үҫешкәндә, кеше тормоштағы әллә күпме ауырлыҡтарҙы еңеп, ҙур уңыштарға өлгәшә аласаҡ. Шәхес булып формалашыуына ла был яҡшы йоғонто яһаясаҡ.

**Ф. Дәминдаров:** Беҙҙең мәктәпкә балалар 9-10 йәштән йөрөй башлай. Әйтеп үтергә кәрәк, спорт мәктәбенә балалар күп килә, кластар тулы. Хатта тағы ла күберәк итеп алырға ла булыр ине, матди базабыҙ наҡыҫ. Үкенескә күрә, беҙҙә балалар спортына, балалар спорт мәктәптәренә, клубтарына иғтибар етешмәй. Был бигерәк тә икенсе төбәктәр менән сағыштырғанда һиҙелә.

Баланы бәләкәй сағынан ниндәйҙер спорт түңәрәгенә йөрөтөү мотлаҡтыр, тип уйлайым. Үҙебеҙ ҡыҙыбыҙҙы бәләкәйҙән художесто гимнастикаһында шөғөлләндерәбеҙ. Спорт ул, беренсенән, матурлыҡ, икенсенән - сәләмәтлек, өсөнсөнән - характер тәрбиәләү. Балаға профессиональ спортсы булыу талаптары юҡ, әммә башлаған эште аҙағына еткереү тигән принцип бар. Бөгөн сәләмәт тормош алып барыу, һомғол кәүҙәле булыу, әүҙемлек модала, тип тә ҡыҙыҡтырырға була уларҙы. Бала сағынан спорт менән шөғөлләнгән кеше хеҙмәт итеү дәүерендә лә ныҡлыраҡ, тырышыраҡ, стрестарға бирешмәүсәнерәк була ул. Хатта бына үҙебеҙҙең йәштәгеләрҙе алып ҡарағанда ла, кемдеңдер юғары уңыштарға өлгәшеүен, характер күрһәтеп, еңеп сығыу өлгөләрен күҙәткәндә лә, асылда, ул кеше бала саҡтан ниндәйҙер спорт төрө менән шөғөлләнгән булып сыға. Ундай шәхестәр шулай көрәшсе булып формалаша ла.

**Р. Бикембәтов:** Был тәңгәлдә ата-әсә иң башта уҡ балаһын ҡайҙа һәм ниндәй шарттарға алып барыуын аңлай белергә тейеш. Әгәр һин уны етди спортҡа алып килдең икән - йәлләмә. Йәлләмәү ул ҡанһыҙ булыуҙы аңлатмай. Мин дә, мәҫәлән, улымды йәлләйем, әммә уны уға илке-һалҡылыҡ юҫығында күрһәтмәйем. Тренер нимәләр талап итә, шуларҙы өйҙә лә талап итәм. Ниндәйҙер сикләүҙәр, тейеш нәмәләр, мотлаҡ булған тәртиптәр барыһы ла теүәл үтәлә. Баштараҡ хоккейсы балалар араһында ла кескәй генә малайҙар танауҙарын мыш-мыш тартып илап, ҡараштары менән ата-әсәләрен күҙләп ултыра торғайны. Кемдәрҙе йәлләйҙәр, шулар төшөп ҡалып та бөттө. Бөгөн иһә улар араһынан иң сыҙамлылары, иң көслөләре генә ҡалып шөғөлләнә. Спорт донъяһы ул шундай - ул көслөләр һәм сыҙамлылар, тырыштар һәм ҡыйыуҙар майҙаны. Бында мәмәйҙәргә урын юҡ.

**Баланың спорт өлкәһендәге тәрбиәһендә тренер ниндәй роль уйнай ала? Республика ауылдарында тренерҙар бармы ул?**

**Р. Бикембәтов:** Тренер - ул ҙур көс. Тренер - профессионал. Үҙемдең спорт өлкәһендә белемем дә, тәжрибәм дә булғанда ла, улымды тулыһынса хоккей буйынса тренер тәрбиәһенә тапшырғанмын. Тренер бит ул спортсы ғына түгел, ул балалар менән эшләй белеүсе педагог, психолог, авторитет та. Күп балалар аталарын тыңламаҫҡа ла мөмкин, ә тренерҙарының күҙенә генә ҡарап торалар. Быны мин үҙем дә күҙәткәнем булды. Тренер булараҡ, тәрбиәләнеүсем ата-әсәһенә ыжлап бармай, ә мин әйткәнгә күнә ине. Шул тәңгәлдә ҡайһы бер ата-әсәләр тренерҙарҙы балаларының дөйөм тәрбиәһендә лә файҙалана. Мәҫәлән, тренерҙарҙың үҙ тәрбиәләнеүселәре менән уҡыуҙа өлгәшеү, ниндәйҙер фәнгә иғтибар биреү йәки өйҙә әсәйгә ярҙам итеү кәрәклеге тураһында ла һөйләшкәнен ишеткәнем бар.

Балалар тренерҙары бик аҙ. Башҡорт телле тренерҙар тураһында һүҙ ҙә юҡ. Улай ғына ла түгел, спорт өлкәһендә милләттәш етәкселәребеҙ ҙә юҡ кимәлендә.

**Ф. Дәминдаров:** Ата-әсәләрҙең үҙҙәренең һәм, әлбиттә, балаларының да спортҡа килергә психологик яҡтан әҙер булмауы арҡаһында йыш ҡына аңлашылмаусалыҡтар ҙа тыуып тора. Мәҫәлән, әсә улын тхэквандоға алып килә лә, уның бер ерен дә ауырттырмауҙарын талап итә. Тәнендә саҡ ҡына күк күрһә лә, тренерға бәлә һала. Балаһы ла ҡайта ла ошаҡлай, ҡайта ла ошаҡлай. Унан һуң, баланы бер көн күнекмәгә йөрөттөләр ҙә, икенсе көн йәлләп алып ҡалдылар, өсөнсө көн йоҡоһо туймай, дүртенсе көн ауырый һәм бишенсе көн тағы ла алып киләләр. Сөскөрһә лә, кәйефе булмаһа ла уны аяй һалалар. Быңдай мөнәсәбәттән берәүгә лә файҙа булмаясаҡ. Тренерҙың ваҡыты алына - шул ғына. Быңдай мөнәсәбәт спортта ғына түгел, тормоштағы башҡа төрлө мәсьәләләрҙә лә уңышһыҙлыҡҡа юл ул.

Спорт мәктәбе етәксеһе булараҡ, мин балалар менән эшләүсе тренерҙарға ни тиклем сабыр һәм аҡыллы булырға тура килгәнен беләм. Ә бит шул уҡ ваҡытта уларға хеҙмәт емештәре лә кәрәк. Ул баланы ниндәйҙер үрҙәргә әйҙәүгә, күрһәткестәр биреүгә өмөтләнә. Унда көрәшсе, еңеүсе характеры тәрбиәләргә тырыша. Тәүге йылдарында тренер бала менән бер рәттән, ата-әсәне лә тәрбиәләй. Баланан спортсы, ә ата-әсәнән спортсы ата-әсәһе яһай. Шулай ҙа була.

Ә райондарҙа, ауылдарҙа ысынлап та тренерҙар юҡ тиерлек. Бер үк физкультура уҡытыусыһы иртәнсәк уҡытыусы, кистәрен тренер булып йөрөй. Ул



***Әммә башҡа милләттәр менән сағыштырып ҡарағанда, милләттәштәребеҙ балалар спортында күпкә артта ҡала. Ни өсөндөр беҙҙең ата-әсәләр балаларын еңелерәк, артыҡ талаптар булмаған, сығымдар талап ителмәгәнерәк өлкәләргә бирергә тырыша. Мәктәптә былай ҙа тынсыу бүлмәләрҙә ултырып сыҡҡан баланы һаман шундай уҡ бүлмәгә алып барып индерәләр. Сәләмәт, шуҡ малайҙы, мәҫәлән, һүрәт төшөрөүгә ултырталар ҙа, тыйып ала алмайҙар. Йәки һимереүгә китеп барған ҡыҙыҡайҙы һаман ниндәйҙер хәрәкәтһеҙ түңәрәктәргә йөрөтәләр. Йәнәһе, фортепиано йә бейеү спортҡа ҡарағанда файҙалыраҡ та, ҡурҡыныcһыҙыраҡ та инде. Яңылышлыҡ был.***

*✓ Еңеүҙәр яулайһы спортсы - ул көслө генә түгел, аҡыллы ла, хәйләкәр ҙә, сос та, осҡор ҙа булырға тейеш. Ул тиҙ уйлай, йәһәт хәл итә, дөрөҫ юлдар һайлай, уйлы аҙымдар яһай белергә бурыслы.*



спортҡа һөйөү уята ала, әммә һәр спорт төрөнөң үҙ тәртиптәре бар. Уларҙы ябай уҡытыусы белеп етә лә алмай. Был тәңгәлдә спорт федерациялары райондарға йөрөп, спортта көслө балаларҙы табып, ҡалаларҙағы спорт мәктәптәренә, интернаттарға урынлаштырырға тейештер, тип уйлайым. Таҫыллы балаларҙың тәжрибәле тренерҙар ҡулына килеп эләгеүен төрлө яҡлап тәьмин итергә ине.

**Спорт төрҙәрен милли һыҙаттарға ҡарап айырып буламы? Мәҫәлән, башҡорт балаларына ғына хас спорт төрҙәре бармы ул? Һәм башҡорт балалары спортты үҙ итәме?**

**Ф. Дәминдаров:** Минең аралашҡан кешеләр, йәғни башҡорттар араһында балаларын төрлө спорт төрҙәрендә шөғөлләндергәндәр бик күп. Әммә башҡа милләттәр менән сағыштырып ҡарағанда, милләттәштәребеҙ балалар спортында күпкә артта ҡала. Ни өсөндөр беҙҙең ата-әсәләр балаларын еңелерәк, артыҡ талаптар булмаған, сығымдар талап ителмәгәнерәк өлкәләргә бирергә тырыша. Мәктәптә ә спортта аҡса сығармай булмай. Костюмдар, ҡоралдар, уйын кәрәк-яраҡтары, атрибуттар һәм башҡалар арзан тормай. Әммә бында ла хәл итеү юлдары юҡ түгел. Беҙ, мәҫәлән, бәләкәй балаларға бындай әйберҙәрҙе ҡулдан алдыҡ. Олораҡ балалар үҙҙәренең әйберҙәрен осһоҙ хаҡҡа һата, уларҙы бәләкәсерәктәр алып кейеп тора. Саңғыларҙы ла, конькиҙарҙы ла, бокс бирсәткәләрен дә, хоккей ҡорамалдарын да шулай итеп йөрөтәбеҙ. Теләк булғанда, юлдарын табырға була.

Башҡорттарҙың ҙур спортта аҙ булыуҙарының тағы ла бер сәбәбе: өҫтә әйтелгән һәм башҡа сәбәптәр арҡылы бала саҡтан спортҡа килмәү. Ә бит профессиональ спорт ул йылына бер сығып айҡаша торған һабантуй көрәше йәки йүгереше түгел. Беҙҙең анда һаман да спортты ана шул һабантуй батыры образында ғына күреү һаҡлана. Бөгөнгө спорт - ул бала саҡтан һалына торған өҙлөкһөҙ хеҙмәт күрһәткесе.

Һорауға ҡайтҡанда, эйе, беҙҙең көрәш, уҡ атыу, ат сабышы кеүегерәк милли спорт төрҙәребеҙ бар, әммә мин тырҙарыбыҙ бар. Уларҙың бала сағын һүрәтләгәндәрен иҫләйек әле. Батыр егет өс йәшендә нисәлер ботлоҡ ташты атҡан, ете йәшендә ҡолондо күтәргән һәм башҡалар, тип яҙылған уларҙа. Һәм шул батырҙар халҡына, еренә күпме изгелектәр яһай. Былар беҙгә миҫал түгелме ни!

**Ф. Дәминдаров:** Спорт мәктәптәре спорт менән шөғөлләндереүҙән тыш, педагогик тәрбиә усағы ла булып тора. Үрҙә лә әйттем, беҙҙә тренерҙар педагогик белемле, тәжрибәле уҡытыусылар. Параллель рәүештә психологтар ҙа эшләй беҙҙә. Тәрбиәләнеүсенең холҡонда, ғәҙәтендә ниндәйҙер тайпылыштар һиҙелә икән, улар шунда уҡ был баланы иғтибар үҙәгенә ала, күҙәтә, ата-әсәһе менән һөйләшә һәм дөрөҫ һығымталар яһай, проблеманы хәл итә. Тренерҙың да ролен һөйләп киттек. Уның абруйы ла ҙур роль уйнай, тинек. Тренерҙың маҡсаты - тәрбиәләнеүсеһенән ысын спортсы сығарыу. Ә бер яҡлы ғына үҫешкән кешенән профессионал сыҡмаҫын ул яҡшы белә. Еңеүҙәр яулайһы спортсы - ул көслө генә түгел, аҡыллы ла,

# МАЙҘАНЫ,

## урын юҡ

былай ҙа тынсыу бүлмәләрҙә ултырып сыҡҡан баланы һаман шундай уҡ бүлмәгә алып барып индерәләр. Сәләмәт, шуҡ малайҙы, мәҫәлән, һүрәт төшөрөүгә ултырталар ҙа, тыйып ала алмайҙар. Йәки һимереүгә китеп барған ҡыҙыҡайҙы һаман ниндәйҙер хәрәкәтһеҙ түңәрәктәргә йөрөтәләр. Йәнәһе, фортепиано йә бейеү спортҡа ҡарағанда файҙалыраҡ та, ҡурҡынысһыҙыраҡ та инде. Яңылышлыҡ был.

Беҙҙең мәктәптә спорт төрҙәре улай милләткә ҡарап бүленмәй. Һәм мин балалар алдында, бигерәк тә башҡорт балалары алдында, бындай бүлем яһамаҫ та инем. "Был беҙҙең халыҡҡа хас түгел, был беҙҙең менталитетҡа бармай", тигән барьер ҡуйырға ярамай. Киреһенсә, "Һин быны булдыраһың" тип көс бирергә кәрәк. Спорт - ул көрәш, яу алымдары. Ә яу яланында бөтә төр алымдарҙы ла файҙаланырға мөмкин. Спортсыла яугир рухы, һәм ул майҙанға еңеү өсөн сыға.

**Р. Бикембәтов:** Беҙ ҡалаға уҡырға килгәнбеҙ. Ошонда тороп ҡалғанбыҙ, торлаҡ булдырғанбыҙ һәм йәшәп ятабыҙ. Ә тамырҙарыбыҙ беҙҙең ауылда, өләсәй-олатайҙарыбыҙ ҙа ауылда. Бына, күҙ алдына килтерегеҙ, беҙҙең ғаиләлә атай-әсәй эшләй, ә баланы биш йәшенән ҡайҙалыр йөрөтөргә кеше юҡ. Балалар, теләйһеңме-юҡмы, икенсе планға күсә лә ҡуя. Ата-әсә ипотека, аҡса, донъя тип саба ла саба. Баланы түңәрәккә, секцияға йөрөтөү өсөн айырым аҡса түләп, кемделер ялларға ғына ҡала. Ошо проблема ауыл сығышлы булған һәр башҡорт ғаиләһендә бар. Мин, ярай, маҡсатлы рәүештә быны хәл итергә тырышам, төрлө юлдар эҙләйем. Ә бит күптәр ошо тәңгәлдә ҡул һелтәй ҙә ҡуя. Кемде был һылтау менән эштән сығарып ебәрәләр? Ябай ғына һылтау кеүек, ә ысынында был бик етди мәсьәлә ул.

Икенсе проблема - беҙҙең милләттәштәр балаларына аҡса сығарып өйрәнмәгән. Урыҫса итеп әйткәндә, балаларға "вложение" эшләргә ынтылып бармай, етди ҡарамай был эшкә. дә быларға баҫым яһамайым. Милли уйындарыбыҙҙы бутамай, үҙ тәртиптәрендә һаҡлау һәм шөғөлләнеү зарур, тик улар сигендә генә ҡалыу мотлаҡ түгел. Беҙҙең милли спорт төрҙәрен белгәндә, шул нигеҙҙә көс һәм таҫыллыҡ туплағанда, башҡа бөтә төр уйындарҙа ла алдырырға була.

**Спортсы бала көслө була, уныһы бәхәсһеҙ. Был осраҡта хатта уның физик яғы яҡшыраҡ үҫешәләр. Был ваҡытта уның рухи яғы аҡһамаймы? Бары тик физик көсөн генә алға ҡуйған "машина" тәрбиәләмәү өсөн ниндәй алымдар ҡулланырға?**

**Р. Бикембәтов:** Аңы камил булған баланың, физик яҡтан үҫешһә, рухи



*Был тәңгәлдә ата-әсә иң башта уҡ балаһын ҡайҙа һәм ниндәй шарттарға алып барыуын аңлай белергә тейеш. Әгәр һин уны етди спортҡа алып килдең икән - йәлләмә. Йәлләмәү ул ҡанһыҙ булыуҙы аңлатмай. Мин дә, мәҫәлән, улымды йәлләйем, әммә уны уға илке-һалҡылыҡ юҫығында күрһәтмәйем. Тренер нимәләр талап итә, шуларҙы өйҙә лә талап итәм. Ниндәйҙер сикләүҙәр, тейеш нәмәләр, мотлаҡ булған тәртиптәр барыһы ла теүәл үтәлә.*

яғы ла үҫешә ул. Ә инде аң кимәле генетик яҡтан йәки башҡа сәбәптәрҙән түбәнерәк булғанда, бында уның физик тәрбиәһе сәбәпсе була алмай.

Спорт өлкәһендә, теләһә ниндәй спортта ла, педагогик белемле тренерҙар иң беренсе сиратта спорттың емергес көс булырға тейеш түгеллеген аңлата. Был хаҡта бала бәләкәйҙән хәбәрҙар булып, ниндәйҙер мәрхәмәтлек, абруйлыҡ, ғорурлыҡ тойғоларын һеңдереп үҫә. Бындай уҡыусы бер ваҡытта ла урамға сығып, кеше туҡмап, ҡыйырһытып йөрөмәйәсәк. Спорт бит иң беренсе эмоцияларҙы контролдә тоторға өйрәтә.

Нимә генә тигәндә лә, көслө һәм сәләмәт кешеләрҙе хөрмәт итәләр. Көслө кешеләргә көсһөҙөрәктәр, мәҫәлән, балалар, ҡатын-ҡыҙҙар арҡалана, шулай бит? Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә, эпостарында күпме баxәйләкәр ҙә, сос та, осҡор ҙа булырға тейеш. Ул тиҙ уйлай, йәһәт хәл итә, дөрөҫ юлдар һайлай, уйлы аҙымдар яһай белергә бурыслы. Бына шундай балаларҙы тәрбиәләйбеҙ ҙә инде беҙ спорт мәктәптәрендә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был һөйләшеүҙә балалар спорт донъяһына күҙәтеү яһаныҡ. Әңгәмәселәребеҙ яуаптарҙы тура һәм аныҡ ҡына итеп әйтеп бирҙе. Ошоларҙан сығып, балаларын спортҡа бирергә йыйыныусы ата-әсәләр һығымталар яһаһын ине. Һәм улар ниндәй генә спорт төрөндә үҫешкәндә лә милли һыҙаттарын һаҡлап ҡалһын, башҡорт балаһы булып дан ҡаҙанһын һәм профессионалдар майҙанында ла Башҡортостан спортсыһы булып сығыш яһаһын.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!



# ИРҘӘР ИЛГӘ ҠАЙТҺЫН!

**Республика Башлығы алышынғас, төбәктәге хәл итәһе проблемаларҙың ни тиклем күп булыуы күҙгә асыҡ салынды. Яңы етәксенең халыҡҡа, уның проблемаһына йөҙ менән боролоуы тәүҙә һиҫкәндерҙе, унан уйландырҙы. Улар араһында ышанмаусылыҡ та булды. Хәҙер иһә бөтәһе лә дәррәү рәүештә үҙ мәсьәләләрен яҙа. Ниһайәт, йылдар дауамында хәл ителмәй йөрөгән мәсьәләләренең осона сығыу өмөтө сыҡҡанын күргән Башҡортостан халҡы дәррәү ҡуҙғалды.**

Мин үҙем Ишембай ҡалаһында йәшәйем, ләкин эшкә вахта менән күрше Татарстан Республикаһына йөрөйөм. Оҙаҡ ваҡыт Себер яҡтарында ла булырға тура килде, ләкин унда ла хәҙер аҡса юҡ. Егеттәребеҙ һаулыҡтарын бөтөрөп, әҙ генә аҡсаға ла риза булып эшләп йөрөй. Әлбиттә, бындағы үлсәмдән сығып ҡарағанда, улар хатта бай һымаҡ күренә. Тик йылдар буйы һыуыҡ яҡтарға "сәйәхәт" ҡылыуҙары һаулыҡтарына ныҡ зыян килтерә. Хәйер, һүҙем ул турала түгел. Ни өсөн беҙ ситкә китеп аҡса эшләргә мәжбүрбеҙ? Ир-егеттәр генә түгел, хатта гүзәл заттарыбыҙҙың да күбеһе сиған тормошо менән йәшәй хәҙер. Балалар атай-әсәйле көйө етем кеүек үҫә. Башҡортостанда эш урындары булдырыу, йәштәрҙең ситкә йөрөүен туҡтатыу сараһын күреү - иң мөһим мәсьәлә бөгөнгө көндә. Әлегә тиклем эшләп килгән предприятиелар ябылыу алдында. Ундағы эшселәр ҡайҙа барып морон төртәр, нисек балалар үҫтерер ҙә кредитҡа алған фатирына ни рәүешле түләр? Тағы ла һеперелеп ситкә китергә юл ҡуйырға ярамай бер нисек тә. Мин шәхсән үҙем дә, етерлек эш хаҡы булғанда, үҙ еремдә генә йәшәр инем.

Үҙемде борсоған тағы бер мәсьәләне күтәрәм. Ул да булһа, урындағы хакимиәт башлыҡтарының һайланыуына ҡағыла. Ҡайһы саҡта дәүләт органында бер ниндәй эш тәжрибәһе булмаған кешене ултыртып ҡуялар. Белем яғынан да күптәрҙең "багажы" һай. Грамоталылыҡ аҡһай. Ҡайһы саҡта ниндәйҙер белешмә яҙҙырып алаһың да, уны тәғәйен ергә алып барып бирергә ояլаһың, сөнки күҙгә бәрелеп торған хата менән яҙып бирәләр. Әгәр ҙә белгестәре хата ебәрә икән, ҡул ҡуйыр алдынан башлыҡ уны төҙәтеүҙе талап итергә тейеш. Ундай вазифа биләүсенең республиканың ике дәүләт телендә лә шартлатып һөйләп тороуы мотлаҡ. Хәҙер бөтә байрамдарҙы ла киң билдәләйбеҙ бит инде. Йыйылған халыҡ алдына сығып, ике ауыҙ һүҙ ҡотлау тексын ҡағыҙҙан мөңгөрләп уҡып торған биләмә башлығы бер ниндәй ҙә ышаныс уятмай. Ике һүҙҙе бергә ҡушып әйтә алмаған кеше ауылдар, ундағы халыҡтың тормошо яҡшырһын өсөн нимә ҡыйрата ала? Тәү ҡарашҡа, ваҡ һымаҡ күренһә лә, әле ҡуҙғатылған мәсьәләләр хәл итеүҙе көтә.

**Наил ИЛМЫРҘИН.**
**Ишембай ҡалаһы.**

*✓ Өйҙә ығы-зығы булһа ла, Зәки буласаҡ кәләшен күрмәксе итте. Ун биш йыл буйы көтөп ултырған ҡыҙға сәләм дә бирмәйенсә, никахҡа индереү оятһыҙлыҡ булыр ине.*



**Хөрмәтле уҡыусылар! Бөгөн һеҙҙең игтибарға Ғәлим Хисамовтың "Шаҡай бураны" романынан өҙөк тәҡдим итәбеҙ. Яҙыусының әҫәрендә бынан йөҙ йыл элек булған ваҡиғалар тасуирлана. Уны баҫыуҙың маҡсаты әҫәрҙең бер өлөшө менән таныштырыу ғына түгел. Һеҙ фотола күргән йорт романда һүрәтләнгән Хажмөхәммәт хажи йорто ул. Беҙҙең бәхеткә күрә, ул әле лә Әбйәлил районының үҙәге Асҡар ауылында имен-аман ултыра. Ошо тарихи йортто нисек һаҡларға, тип мөрәжәғәт итәбеҙ уҡыусыларыбыҙға. Ул беҙҙең бөйөктәребеҙҙең эҙен, улар һулаған һауаны, күҙ нурҙары төшкән бүрәнәләрҙе һаҡлай бит. Һеҙҙән хаттар, тәҡдимдәр көтәбеҙ.**



Йола буйынса никахҡа килгән егетте кәмендә кейәү егете, шунан йәш-елкенсәк араһынан дуҫ-ише, тиңдәш туғандары оҙата килергә тейеш. Ә Зәки, Насип бригадаһын һәм уның менән ҡуша Бройдоны оҙатҡандан һуң, туры Әбйәлилгә китте һәм буласаҡ ҡайныһының ҡапҡаһы төбөнә унлаған һыбай яугир оҙатыуында килеп туҡтаны. Был тиклем ғәскәрҙе көтмәгән өй хужаһы тәүҙә аптырабыраҡ ҡалды, шунан Зәкиҙе ҡаршыларға яҡын ир туғанын сығарҙы. Йола буйынса, ҡаршылаусы кеше буласаҡ кейәүҙең атын теҙгененән алғанса, тегенеһе эйәрҙә ултырып торорға тейеш. Ә Зәки килеп туҡтау менән аттан һикереп төштө һәм яугирҙарына күрһәтмәләрен бирергә тотонДо. Ҡаршылаусы ни эшләргә белмәй, баҙап ҡалды. Бының хәлен самалаған Зәки мыйыҡ аҫтынан ғына көлдө лә:

- Кем тип әйтәйем: ҡәйнешме, әллә йәш ҡайнағамы, ат менән мәшәҡәтләнмә, минең егеттәр үҙҙәре рәтен белә ул. Әйҙә, өйгә инәйек.

Зәки тупһа аша атланы ла сәләм бирҙе:

- Әссәләмәғәләйкүм!

Киң соланда торған Хажмөхәммәт хажи сәләмде үҙе алды:

- Вәғәләйкүммәссәләм. Әйҙүк, кейәү, түрҙән уҙ.

- Ҡаршыларға ҡайным үҙе сыҡҡан. Һаумыһың. Нисек кенә йәшәйһегеҙ?

- Аллаға шөкөр. Бына кейәү буласаҡ кешене көтә инек. Иншалла, килеп етте. Юлдар нисек булды?

- Рәхмәт, ҡайным, асыҡ йөҙөгөҙгә, йылы һүҙегеҙгә. Оҙон юл үттек, әммә имен-һау килеп еттек.

Ул арала ҡыя ишек асылды һәм унда Зәкиҙең атаһы менән әсәһе күренде.

- Һа! Минең атай менән әсәй ҙа бында икән. Һаумыһың? - Зәки улар менән ҡуш ҡуллап күреште. Шул арала әсәһе шыбырланы:

- Ни эшләп һин никах уҡымай тороп "ҡайным"дан һалдыраһың? Килешмәгәнде ни, - тип һуҡыранды.

- Әрләмә инде, әсәй. Һуғышта йөрөп, йола ҡағиҙәләрен бутап ташлағанмын.

Хажмөхәммәт хажи үҙе ярҙамға килде.

- Ул түгел, мин ғәйепле. Мин кейәү тигәс, ҡайным тимәй ҡайҙа барһын! Ярар, әйҙәгеҙ, юлдан сәй эсеп алайыҡ. - Хужа ҡунаҡтарын оло бүлмәгә әйҙәне, бер көн Сәғит Мерәҫ маҡтаған күн урындыҡтан урын күрһәтте. Сәй янында һүҙҙе Әхмәтшаһ үҙе башланы.

- Улым, Хажмөхәммәт хажи дуҫ бер-ике көн ял иткәс, никах уҡытырбыҙ. Туйҙы көҙгә ҡалдырырбыҙ, ти. Шулай дөрөҫ була бит?

Зәки өндәшмәй генә сәйен һемереп ҡуйҙы ла, сынаяғын түңкәргәс:

- Атай, ҡайным, ниәтегеҙ һеҙҙең изге. Беҙҙе, балаларығыҙҙы ҙурлап, туғандарығыҙҙы ҡәҙерләп, олонан ҡубып туй булыр ине. Дөрөҫ йола буйынса барһаң, ҡыҙҙы күрер өсөн әллә нисә кәртәне уҙыр кәрәк. Тик былар менән булышырға Зәкиҙең форсаты юҡ. Шуға ул иплән кенә Нәфисә йәшәгән бүлмәнең (быныһын егет алдан белешеп ҡуйғайны инде) ишеген шаҡыны ла яйлап ҡына асты. Ишек тауышына тәҙрә янында торған кеше ялп итеп боролоп ҡараны. Нәфисә

- Әйттем бит мин һинә ишекте биклә ҡуяйыҡ тип, быныһының килеп инерен һиҙгәндәй булдым шул.

- Нишләп беҙҙең рөхсәттән тыш ҡыҙ янына индең? - Тегеләр Зәкигә ташланды.-Инеү генә түгел, ҡулдарын да тотоп өлгөргән.

- Белмәнем мин рөхсәт алырға икәнлекте. Өҫтәүенә, һорарға кеше лә юҡ ине.

Ҡыҙҙарҙың берәһе Нәфисәне елтерәтеп урындыҡҡа илтеп ултыртты, башына ҙур яулыҡ ҡапланы.

- Сығар аҡсаңды. Аҡса бирһәң, ҡыҙҙың йөҙөн асам.

Зәки кесәһенә тығылды, ҙур бер ҡағыҙ аҡса сығарҙы. Ҡыҙ уны йәлп тартып алды.

- Был нимә? Калшак аҡсаһымы? Кәрәкмәй миңә Калшактың силғауы. Һин миңә Никалай батшаныҡын бир, йә Ушредителканыҡын.

Зәки йәнә кесәһен соҡоно.




һарға уйлайһығыҙ. Рәхмәт һеҙгә. Тик һеҙҙең ниәт бойомға ашмаҫ тип ҡурҡам. Сөнки һуғыш бара бит. Кешеләр ҡапма-ҡаршы фронт тотоп һуғышҡан саҡта өйләнеп ятыу үҙе хилаф инде. Ләкин быныһы башҡортта борон да булған хәл. Әммә ҙурҙан ҡубып туйҙар яһау, ҡыҙ яғында, кейәү яғында ҡунаҡ булышыу килеп сыҡмаҫ шул. Аҡтар, ана, Яйыҡ аръяғында ғына ята. Ҡыҙылдар ҙа бында ныҡлап нигеҙләнеп бөтмәгән. Ҡайным, ҡәйнәм, ғәфү итегеҙ, оҙаҡлап ҡунаҡҡа йөрөшә алмабыҙ. Әгәр мөмкин булһа, бөгөн никах уҡытайыҡ һәм бөгөн үк бәләкәй генә табында туй йолаһын үткәрәйек. Иртәгә үк беҙгә Стәрлетамаҡҡа табан юлға сығырға тура киләсәк, Аллаһ бирһә.

Зәкиҙең әйткәненән ике яҡ ҡоҙалар ҙа лыпын ултырҙы. Ун биш йыл буйына көтөп алған туй бына ошолай булһынсәле! Ҡоҙалар, ҡоҙасалар өтәләнеп никах мәжлесенә әҙерләнә башланы. Өйҙә ығы-зығы булһа ла, Зәки буласаҡ кәләшен күрмәксе итте. Ун биш йыл буйы көтөп ултырған ҡыҙға сәләм дә бирмәйенсә, никахҡа индереү оятһыҙлыҡ ине, бүлмәлә бүтән кеше юҡ. Ҡыҙ Зәкиҙе күрҙе лә, ҡото осоп, шаҡҡатты ла ҡуйҙы.

- Һаумыһың, - Зәки тынлыҡты боҙҙо.

Ҡыҙҙың яуап бирерлек рәте юҡ ине. Быны егет һиҙҙе һәм алдына ҡаушырған ҡулдарына бармаҡ осо менән генә ҡағылды.

- Әллә ҡурҡыттым инде? Ҡурҡма, был мин, Зәки, һинең йәрәшкән кейәүең. Таныйһыңмы?

Шунда ғына Нәфисәнең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе.

- Таныйым, - тине ҡыҙ шыбырлап ҡына.

- Мин һине алырға килдем. Миңә кейәүгә бараһыңмы?

- Барам.

- Ҡулдарың боҙ кеүек һыуыҡ та баһа.

- Өшөп торам.

- Бир ҡулдарыңды, йылытайым.

- Йылыт һуң.

Зәки уның ҡулдарын үҙенең усы араһына һалып ҡыҫты.

- Һин элек тә матур инең, хәҙер тағы ла сибәрләнгәнһең.

- Әллә тағы.

Шул саҡ ишек шар асылып китте һәм ике ҡыҙ сарбайлап килеп инде.

- Мә һиңә илле һум.

- Быныһы кемдеке? Һин мине алдарға тырышма!

- Алдамайым, был бит өр-яңы аҡса, совет аҡсаһы, беҙҙең аҡса.

Ҡыҙ ҡағыҙҙы тегеләй-былай әйләндергеләп ҡараны.

- Алдаһаң, ҡара уны, Нәфисәне бирмәнек ҡуйҙыҡ. Шул булыр.

Ул арала йәнә берәү килеп инде.

- Уй, Алла! - Быныһы бот сапты.- Йола боҙоп ни, аҡса даулап торалар былары. - Сығығыҙ бынан. Кейәү, һин дә сыҡ. Нәфисәгә кейенергә кәрәк.

Зәки шым ғына йылмая-йылмая ирҙәр яғына сығып китте. Күпмелер ваҡыт үткәс, әсәһе саҡырып алды Зәкиҙе.

- Әйҙә, кейен. Һуғыш кейеме менән ултырмаҫһың бит инде. - Бик матур елән, буйлы салбар, аҡтан күлдәк, аҡтан ойоҡбаш тотторҙо.

- Быларҙы өйҙән алып килдеңме?

- Ҡайҙан булһын инде бүтән. Минең ҡулдан кейенеүең һуңғы тапҡыр булһын, балам. - Әсәһенең тауышы ҡалтырап китте. -Бынан һуң кейемеңдә килен тәрбиәләр.

Никах табынын оло бүлмәгә ҡорҙолар. Бүлмәнең төпкө бер бәләкәй өлөшөн шаршау менән бүлгәндәр. Зәки менән Нәфисәне шунда индереп ултырттылар. Зәки бер ҡулы менән ҡыҙҙың ҡулын тотто. Баяғы һымаҡ үк һалҡын түгел ине инде ҡулдары. Шаршауҙың теге яғында шым булдылар.

- Әхмәтшаһ дуҫ, - Хажмөхәммәт хажизиң тауышы ишетелде. - Башлайыҡмы?

- Башлайыҡтарҙыр.

- Хәҙрәт, - Хажмөхәммәт хажи өндәште. - Туғандар, йәмәғәт. Әхмәтшаһ дуҫ менән уның йәмәғәте Өммөлхаят, мин - Хажмөхәммәт хажи менән минең йәмәғәтем Салиха, һеҙҙе дуҫымдың улы Әхмәтзәки менән беҙҙең ҡыҙыбыҙ Нәфисәнең никахлашыу табынына саҡырҙыҡ. Быуаттар буйына килгән йолабыҙ буйынса, хөрмәтле хәҙрәт, беҙгә изге Ҡөрьәндән никах сүрәһен уҡып ишеттерһәң һәм тейешенсә анттар иттерһәң икән.

- Һүҙегеҙҙе йыға алмайым, үтәйем. -Быныһы хәҙрәт ине. Шунан бисмилла итеп, яңғырауыҡлы тауыш менән сүрә уҡыны һәм:

- Әхмәтшаһ имам менән йәмәғәте, һеҙ улығыҙ Әхмәтзәкигә Хажмөхәммәт хажи менән уның йәмәғәтенең ҡыҙы Нәфисәне үҙ иркегеҙ менән алдығыҙмы?

- Алдыҡ, - тине Әхмәтшаһ.

- Хажмөхәммәт хажи менән уның йәмәғәте, һеҙ ҡыҙығыҙ Нәфисәне Әхмәтшаһ имам менән уның йәмәғәтенең улы Әхмәтзәкигә үҙ иркегеҙ менән бирҙегеҙме?

- Бирҙек, - Хажмөхәммәт хажи яуабы ишетелде.

Шунан хәҙрәт шаршау артындағыларға мөрәжәғәт итте:

- Әхмәтшаһ имам менән уның йәмәғәтенең улы Әхмәтзәки, һин Хажмөхәммәт хажи менән уның йәмәғәтенең ҡыҙы Нәфисәне үҙ иркең менән алаһыңмы?

- Алам. - Зәкиҙең тауышы көр генә сыҡты.

- Хажмөхәммәт хажи менән уның йәмәғәтенең ҡыҙы Нәфисә, һин Әхмәтшаһ имам менән уның йәмәғәтенең улы Әхмәтзәкигә үҙ иркең менән бараһыңмы?

- Барам.

- Ишетмәйем, - хәҙрәттең тауышы ҡырыҫ ҡына сыҡты.- Ошондағы бөтөн кеше лә ишетерлек итеп әйт. Юҡһа, был ҡыҙҙы көсләп бирәләр икән тип уйларҙар. Хажмөхәммәт хажи менән уның йәмәғәтенең ҡыҙы Нәфисә, һин Әхмәтшаһ имам менән уның йәмәғәтенең улы Әхмәтзәкигә үҙ иркең менән бараһыңмы?

- Барам. - Нәфисә хәл ҡәҙәренсә ҡысҡырып әйтте.

- Ярар,- тине хәҙрәт, -ишетелгәндәй булды шай.

- Әхмәтшаһ имам менән уның йәмәғәте, Хажмөхәммәт хажи менән уның йәмәғәте, бына һеҙ ҡоҙалар һәм ҡоҙағыйҙар булдығыҙ. Ошо хәл Аллаһ Тәғәләнең сауабына туры килһен тип, хәйер-саҙаҡаларығыҙҙы бирһәгеҙ ҙә була.

**(Дауамы. Башы 49-сы һанда).**

✓ *Ғәжәпләнде әсә: "Нимә?*
*Ҡунаҡхана, ти?..*
*Әсәйеңде апҡайтырға*

*"Өйөң юҡмы ни?"*
*Өй бар ҙа ул, - тине Марсель, -*
*Урын бик тығыҙ.*

*Мәүлит ЯМАЛЕТДИН*




# Баллада

Был - булған хәл.
Ә мин уға
Яҙам тик тәфсил...
Юл тотто Германияға
Мәғәфүр-Марсель.
Бауман университетын
Ҡыҙыл дипломға
Тамамлағас та, киң юлдар
Асылды уға:
Теләйһеңме - Америка
Йәки Израил?..
Ул һайланы Европаны -
Һау бул, тыуған ил!..
Тәгәрмәстәр -
"тыҡ-тыҡ!" - поезд
Елгән ыңғайға...
Ул әйләнә уйҙарында
Кескәй малайға.
Ул әле Марсель түгел, ә
Мәғәфүр ине.
Өйҙәрендә һәр саҡ рәхәт,
Һәр саҡ нур ине.
Ул ағылды әсәһенең
Һыңар күҙенән,
Ихлас йылмайыу китмәгән
Алсаҡ йөҙөнән.
Әсә мөхәббәтен тойоп
Үсте Мәғәфүр;
Тиҫтерҙәре араһында
Булманы кәм-хур.

* * *

Дүрт йәштә барҙы Мәғәфүр
Бала-баҡсаға.
Быяса ят булған донъя
Асылды уға.
Бер көн баҡсанан ҡайтҡас, ул
Һалдырҙы һүҙҙе:
"Башҡаларҙың әсәләре
Икешәр күҙле;
Ә һинеке ниңә һыңар?
Береһе ҡайҙа?"
Әсә, көлөп, күкрәгенә
Ҡыҫты малайҙы,
Әйтте: "Улым, бер иш кенә
Булмай кешеләр.
Ҡай саҡ осрай минең кеүек
Һыңар күҙлеләр.
Элегерәк икәү ине
Минең күҙҙәрем.
Береһе ҡайҙа булғанын
Бер саҡ һөйләрмен..."

* * *

Һуңынан мәктәп йылдары
Башланып китте.
Мәғәфүрҙең күңелендә
Тынғылыҡ бөттө.
Уҡыуы шәп, ләкин уның
Хәлдәре мөшкөл:
Класташ малайҙары уны
Итәләр мыҫҡыл -
Хурлыҡлы ҡушамат тағып,
Үртәйҙәр йәнен.
(Яҙғы килмәй йүнһеҙҙәрҙең
Ни тип әйткәнен).
Оло ләззәт кисерәләр
Уны үсекләп,
Йәнәһе лә, Мәғәфүрҙең
Әсәһе - циклоп.
Ә Мәғәфүр нишләргә лә
Белмәй гәрлектән;
Эстән генә ҡара янып,
Көйә хурлыҡтан.
Етмәһә, әсәһе килә
Мәктәпкә бик йыш
Ундай көндәрҙә уғата
Көсәйә "тыш-быш".
"Мәктәпкә килмә!" -
тип, малай
Әсәһен тыя.
Тик әсә, уға йылмайып,
Көлә лә ҡуя.
Бер аҙҙан һуң тағы килә
Мәктәпкә әсә,
Әйтерһең, бер бөртөк улы
Күҙенән оса.
"Йөрөмә унда!" - тип, малай
Әсәһен тыя.
Ләкин әсә, аҫҡа ҡарап,
Шыма ла ҡуя.
Бер аҙ үткәс, әсә йәнә
Мәктәпкә килә.
(Бала өсөн һәр бер әсә
\Шулай өҙөлә).

"Күренмә унда!" - тип, малай
Әсәһен тыя.
Ләкин әсә, ситкә ҡарап,
Илай ҙа ҡуя...

* * *

Бына, Мәскәү.
Уҡыған ер -
Университет.
Дипломдар яҡлаған көндә
Булды ҙур банкет.
Ҡыуаныс оло: һәммәһе
Көлә, шатлана!
Гүйә, бар донъя кисерә
Бик ҙур тантана.
Балаларын ҡотлап килгән
Ата-әсәләр:
Йөҙҙәрендә нурҙар балҡый,
Ҡулда - сәскәләр.
Тик Марселдең әсәһе юҡ
Табын түрендә.
Ул әсәһен саҡырмаған -
Ғәйеп үҙендә.
Һорарһығыҙ:
"Ниндәй Марсель?"
Аңлатам хәҙер:
Үҙенә Марсель тип исем
Ҡушты Мәғәфүр.
Иҫкә төшөрөп тормаһын
Тыуған яҡтарҙы,
Хурлыҡ кисереп үткәргән
Бала саҡтарҙы...
Банкет ҡыҙа.
Ҡотлау яуа
Ҡотлау артынан.
"Ниңә әсәң килмәне?" - тип
Һорайҙар унан.
Марсель алдай: "Ул ауырый
Ошо арала;
Хәбәр иттеләр, ята, тип,
Дауаханала".
Ә ысынында был хәлдең
Сәбәбе тик шул:
Үҙ әсәһен күрһәтергә
Ғәрләнде Марсель.

* * *

Поезд елә.
Тәгәрмәстәр
Һамаҡлай: "Тыҡ-тыҡ!..
Киттек, киттек!..
Сикте сыҡтыҡ!..
Кирегә юл юҡ!.."
Һаумы, һаумы, Германия -
Таныш түгел ил!
Һиндә даланын табырға
Ашҡына Марсель!

2

Үтте йылдар, ярға ҡаҡҡан
Тулҡындар һымаҡ,
Бер-береһенә тағылған
Вагондар һымаҡ.
Марсель ҡәнәғәт - даланын
Сит ерҙә тапты;
Һөйгән йәрен - алман ҡыҙын
Шунда осратты.
Ғаиләлә ике бала -
Бер малай, бер ҡыҙ.
Марселдең донъяһы теүәл,
Шатлығы игеҙ.
Эшендә лә (күҙ теймәһен!)
Яҡшы хәлдәре:
Ҙур бер корпорацияла
Бүлек мөдире.

* * *

Берҙән-бер көн, һәүетемсә
Барғанда тормош,
Серле икәнен күрһәтте
Хикмәтле яҙмыш.
Вахтанан шалтыраттылар,
Ә телефонда:
"Һеҙҙе бер ҡатын таптыра
Мөдир әфәнде..."
Кем икән ул?
Аҫҡа төшһә,
Марсель ни күрә:
Һыңар күҙен мөлдөрәтеп,
Әсәһе тора!
"Әсәй! - тип шаҡ ҡатты
Марсель
Торған урында. -
Һинме был, түгелме?
Нисек
Килдең һин бында?.."

"Һаумы, улым! - тине әсә. -
Ерҙә изгелек
Барыбер күп - ярҙам итте
Минә илселек".
"Нинә килдең? -
тине Марсель, -
Ығалар сигеп,
Буштан-бушҡа бар-юҡ ҡына
Аҡсанды түгеп".
Иңрәне әсә, Марселгә
Мөлдөрәп ҡарап:
"Тәҡәттәрем бөттө, улым -
Һағындым харап.
Минең өсөн һин һаман да
Бәләкәй бала.
Һинән ҡәҙерле кешем юҡ
Яҡты донъяла..."
"Ярай, әсәй, - тип, хәбәрҙе
Бүлдерҙе Марсель. -
Бушты-бушҡа ауҙарырға,

Был Рәсәй түгел.
Аҙаҡ һөйләшербеҙ, әле
Ваҡытым бик тар.
Һине бер ҡунаҡханаға
Илтеп ҡуйырҙар".
Ғәжәпләнде әсә: "Нимә?
Ҡунаҡхана, ти?..
Әсәйеңде апҡайтырға
Өйөң юҡмы ни?"
"Өй бар ҙа ул, -
тине Марсель, -
Урын бик тығыҙ;
Кескәй өйгә беҙ үҙебеҙ
Саҡ-саҡ ныябыҙ".
"Шулаймы ни? - тине әсә. -
Уй, ҡалай ҡыйын.
Әллә илгә ҡайтаһыңмы,
Табып бер яйын?"
"Ярай, әсәй, аҙаҡ, аҙаҡ...
Ә хәҙергә хуш!.."
"Бик һағындым, һин иртәрәк
Килергә тырыш!.."
И, әсә күңелкәйҙәре -
Мөҡәддәс, изге!
Ышана ул үҙ балаһы
Әйткән һәр һүҙгә.
Ысынында, был хәйләнең
Сәбәбе тик шул:
Үҙ әсәһен күрһәтергә
Ғәрләнде Марсель.

* * *

Үтте йылдар, ярға ҡаҡҡан
Тулҡындар төҫлө,
Бер-береһенә тағылған
Вагондар төҫлө.
Олпат иргә әүерелде
Мәғәфүр-Марсель.
Атлап йөрөүҙәре талғын,
Ҡарашы уйсыл.
Балалары бер-бер артлы
Еттеләр үҫеп;
Ҡошсоҡтар кеүек, оянан
Сыҡтылар осоп.
Йәшәй килә, башҡа етди
Уй керә икән,
Бәғзе ҡиммәттәргә ҡараш
Үҙгәрә икән.
Ҡайһы саҡта үкенестәр
Өйкәй бәғерҙе;
Өҙөк-һырыҡ иҫтәлектәр
Биләй хәтерҙе.
Элек уйлап та ҡуймаһа
Марсель ул хаҡта,
Хәҙер төштәрендә күрә
Ул тыуған яҡты.

Әсәһе лә төшкә инә
Йыш-йыш уғата;
Элеккеләй, бер шелтәләй,
Берсә йыуата.
Әсә, әсә!..
Ҡатын-ҡыҙҙар
Бик күп донъяла.
Әсә - берәү.
Уйлайбыҙмы
Ошо турала?..
Ә һуң Марсель уйланымы
Әсә күңелен?
Уйламаны.
Ҡайғыртты ул
Бары тик үҙен.
Бер фекергә килде Марсель,
Уйлана торғас,
Тыуған ерен төштә күреп
Уяна торғас:
Ул ҡайтып күрергә тейеш
Быйыл әсәһен,
Донъя йөҙөндә берҙән-бер
Ғәзиз кешеһен.
Барыһы өсөн дә унан
Ғәфү үтенер.
Әгәр шуны эшләмәһә,
Мәңге үкенер.

* * *

Поезд елә.
Тәгәрмәстәр
Таҡмаҡлай: "Тыҡ-тыҡ!..
Ҡайттыҡ, ҡайттыҡ!..
Сикте сыҡтыҡ!..
Илгә юл асыҡ!.."
Һаумы, икһеҙ-сикһеҙ киңлек!
Һаумы, тыуған ил!
Тиҙҙән әсәһен күрергә
Ашҡына Марсель.

3

Бына, Башҡортостан ере...
Урал арьяғы.
Ул ҡайтып еткәндә, ине
Йәйҙең аҙағы.
Таныш ҡала, таныш урам,
Тап-таныш өйҙәр.
Айырма шул: таныш түгел
Күпселек йөҙҙәр.
Дөйөм йорт та элеккесә,
Подъезд да шул уҡ.
Өсөнсө ҡат...
Йөрәк ҡаға
Күкрәктә "туҡ-туҡ!.."
"Һеҙгә кем кәрәк?" - ишекте
Асты сит ҡатын.
Фу, хәйерһеҙ!
Бутанымы
Фатирҙың ҡатын?
Улай тиһән, тура килә
Торлаҡтың һаны.
"Кем кәрәк һеҙгә?" -
тип ҡатын
Йәнә һораны.
"Кисерегеҙ, - тине Марсель. -
Нисек әйтәйем -
Ошо фатирҙа йәшәне
Минең әсәйем..."
Ҡатын әйтте: "Был квартира
Беҙҙеке хәҙер.
Әгәр ҙә ышанмаһағыҙ,
Күрһәтәм ордер".
"Мин ышанам, -
тине Марсель. -
Бер һорау, һеңлем:
Әсәйҙең яңы адресы
Түгелме мәғлүм?"
"Белмәйем, - тине ҡатын, -
мин
Түгел хәбәрҙар.
Былтыр ҡолаҡҡа салынды
Төрлө хәбәрҙәр -
Кемдер, күсеп киткән, тине,
Билдәһеҙ яҡҡа;
Кемдер, китеп барған, тине,
Мәңгелек йортҡа...
Туҡтағыҙ!
Ике йыл элек
Килде ул бында;
Конвертлы бер хат бар ине
Уның ҡулында.
Әгәр бында килһә бер саҡ
Мәғәфүр, тине,
Ошо хатты, зинһар өсөн,
Уға бир, тине..."

* * *

Аулаҡта ултырып, Марсель
Конвертты асты,
Уның эсенән, йөрәкһеп,
Сығарҙы хатты.
Әсә яҙған: "Ғәзиз улым
Мәғәфүр! - тигән. -
Һуңлап аңлатҡанға, ғәфү
Итә күр, - тигән. -
Мин белмәйем -
был хатты һин
Уҡырһың ҡасан?
Яҙып ҡалдырам, дөрөҫөн
Һин белһен өсөн.
Һин ул саҡта кескәй инең -
Иҫ белмәҫ йәштә.
Үҙгәртеп ҡороу башланды
Бер мәл тормошта.
Атайың тәүәккәл ине,
Үҙе йәш, көслө.
Эшҡыуарлыҡҡа тотондо,
Бик күптәр төҫлө.
Баштан уҡ шәп, ыңғай китте
Уның эштәре.
Дуҫтар ҡыуанды, дошмандың
Янды эстәре.
Шулай көндө-төнгә ялғап
Йыл ярым үтте.
Бер көндө ул Силәбегә
Тауарға китте.
Тик был сәфәрҙән тереләй
Килмәне ҡайтып:
Көндәштәре юлда уны
Киттеләр атып.
Болғансыҡ замандар ине -
Баш та, түш тә юҡ;
Ундай мәхшәр өндә түгел,
Хатта төштә юҡ.
Кемгә бара беләйем һуң,
Зарлап, ошаҡлап?
Мин янғыҙ ултырып ҡалдым,
Һине ҡосаҡлап.
Тиҙ үк бөттө атайыңдан
Ҡалған аҡсалар.
Эргә-тирәлә һис кем юҡ,
Беҙҙе ҡурсалар.
Ә йәшәргә кәрәк.
Инде
Ни хәл итергә?
Шул саҡ ҡарар иттем: һыңар
Күҙҙе һатырға!
Һатыр алдынан, кисерҙем
Ғазаплы уйҙар;
Йоҡоһоҙ төндәр үткәрҙем
Бер нисә айҙар.
Ләкин үҙенекен итте
Аяуһыҙ тормош -
Тәүәккәлләнем, шулдыр, тип,
Бирелгән яҙмыш.
Үҙебеҙҙең аҡса түгел -
Һаттым долларға.
Ул аҡсалар етте беҙгә
Бик күп йылдарға.
Мин барыһын тоям, улым,
Һәммәһен беләм:
Һыңар күҙем булмағанға
Ғәрләндең минән.
Һин минең өсөн кәмһендең,
Улым Мәғәфүр.
Ғазаптар татытҡан өсөн
Ғәфү итә күр.
Һине бүтән күрә алмам -
Һиҙә күңелем.
Иҫән-һау бул.
Мине уйлап,
Ҡайғырма, улым.
Онотма шуны: мин һине
Яратам һаман.
Ошо ерҙә бәхилләшәм.
Сәләм-хат тамам..."

* * *

Хатты уҡып сыҡҡандан һуң
Тетрәнде Марсель;
Үҙ-үҙенең булмышынан
Ерәнде Марсель;
Әсә хәлен һуңлап ҡына
Аңланы Марсель;
Әсенеүгә түҙә алмай,
Иланы Марсель;
Үҙенә бер меҫкен булып
Күренде Марсель,
Ытырғанып, үҙ-үҙенән
Ғәрләнде Марсель.

**✓ Бөтөн башланғыстар ҙа ғаиләнән килә. Өйөндә башҡортса аралашыу булмаған баланы уҡытыусы дәрестәр менән генә "телле" итә алмай. Был тәңгәлдә уҡытыусы - ата-әсә - мәктәп үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейеш.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ТАБИПТЫ... АЛДАЙҘАР!

■ Пациенттарҙың 60-80 проценты табип менән һөйләшкәндә алдаша икән. Улар бигерәк тә табип алдында абруйын юғалтыуҙан хәүефләнә һәм спиртлы эсемлектәр эсеүе, тәмәке тартыуы, нисек туҡланыуы, спорт менән шөғөлләнеүе тураһында дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр әйтә. Юта университеты ғалимдары билдәләүенсә, табиптың фекере үҙҙәре өсөн мөһим тип иҫәпләгәндәр йышыраҡ алдаша. Ҡатын-ҡыҙҙар, йәштәр, үҙбаһаһы түбән булғандар тап ошондай пациенттар араһында.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы билдәләүенсә, хәҙерге көндә һәр 6-сы кеше яман шештән үлә. һәр өсөнсө осраҡты дөрөҫ туҡланмау менән бәйләп була. Ошоно иҫәптә тотоп, белгестәр хәүефле ризыҡтар исемлеген төҙөгән. Беренсе урында - шәкәр һәм шәкәрҙе алыштырыусы препараттар. Улорҙы күп ҡулланыу эндокрин, йөрәк-ҡан тамырҙары ситемаһы ауырыуҙарына, шулай уҡ һимереүгә килтерә. Әгәр ҙә организмда шәкәр менән туҡланыусы яман шеш күҙәнәктәре бар икән, улар үҫә башлаясаҡ. Бельгия ғалимдары әйтеүенсә, шәкәрҙе күп ашау тура эсәк, күкрәк һәм бәүел ҡыуығы яман шешенә килтерә ала, ә бына глиома - мейе яман шешенән һаҡлай. Шәкәрҙе алыштырыусы препараттар, буяуҙар, тәм биреүсеhelp токсик матдәләр. Аш һеңдереү тракты аша үткәндә улар туҡымаларға үтеп инә һәм унда шеш барлыҡҡа килтерә башлауы ихтимал. Колбаса, сосиска кеүек эшкәртелгән ит аҙыҡтары ла күп һорауҙар тыуҙыра. Көн һайын 50 грамм ғына колбаса ашау ҙа яман шеш хәүефен 18 процентҡа арттыра.

■ Абердин университеты белгестәре 50 кеҫә телефонын бактерияларға тикшереп ҡараған. Телефон унитаз ултырғысынан да бысраҡ булып сыҡҡан. Иң бысраҡ телефондар - күн тышлыҡтағы, бигерәк тә уларҙың бер юлы аҡса янсығы ролен үтәгәндәре. Уларҙа унитаз ултырғысына ҡарағанда бактериялар 17 тапҡыр күп икән. Пластик тышлыҡтар таҙараҡ. Бактериялар башҡалар менән ҡул бирешеп иҫәнләшкәндә лә күсә.

■ Гарвард университеты профессоры Эрик Римм бер порцияла 6 фри картуфы булырға тейеш, тип билдәләй. Әгәр ҙә ошо нормаға ярашлы туҡланғанда, был замана ризығының сәләмәтлеккә зыяны ҙур түгел. Ысынбарлыҡта иһә күптәр был норманан артығыраҡ ашай. Аҙнаһына 2-3 тапҡыр фри картуфы алаһығыҙ икән, диабет, һимереү ҡурҡынысы янай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, аҙаҡҡы 25 йыл эсендә фаст фуд өлкәһендә порциялар күләме 2-3 тапҡырға ҙурайған. Мәҫәлән, бейгдлың киңлеге хәҙер 15 сантиметр, башта ул 7-8 сантиметр ғына булған. Попкорндың уртаса ҡабы 2 тапҡырға ҙурайған, фри картуфының 1 порцияһында хәҙер 55 картуф таяҡсаһы, сағыштырыу өсөн - элек 15. Әммә ашарға әҙерләнгән ризығының күләме ике тапҡырға кәмеүен күптәр теләмәйәсәк, ти ғалимдар. Шуға ла уларҙан ябай ғына ике кәңәш: бер порцияны дуҫтар менән бүлешеп ашау һәм балалар өсөн тәғәйенләнгән өлөштө һатып алыу. Шул рәүешле булһа ла үҙегеҙҙе зыянлы ризыҡтан баш тартырға өйрәтегеҙ, ти улар.

БЕЛЕМ УСАҒЫ



**Өфө районындағы Шамонино ҡасабаһы үҙе бер күренеш ул. Баш ҡала эргәһендәге күбеһенсә башҡорттар менән нигеҙләнгән беренсе ауыл. Барлыҡҡа килде лә, етеҙ генә итеп ҙурайып та китте. Ауылдың урамдарынан үтеүе күңелле, бөтөн йорттар ҙа яңы, бар ерҙә таҙалыҡ, иркенлек. Ә инде иң түбәлә балҡып ултырған мәктәп был ауылда ғына түгел, бөгөн республикала ла шундай уҡ күренеш булырҙай. Асылған йылы 115 баланы ҡабул иткән булһа, быйылғы уҡыу йылына 855 уҡыусыны һыйҙырған. Мәктәп - күҙ өҫтөндәге ҡаш. Һәм ошондай белем биреү учреждениеһын етәкләүе еңелме ул? Ниндәй урын биләй бөгөн мәктәп йәмғиәттә? Хәҙерге мәктәп менән ата-әсәләр ниндәй мөнәсәбәттә? Был һорауҙарға Шамонино ауылы урта белем биреү мәктәбе директоры Рәшиҙә Әҙеһәм ҡыҙы Мостафина яуап бирә.**

# БЕҘ БЕР БӨТӨН:

## уҡытыусы - уҡыусы - атай-әсәй

**➔ Ниндәй урын тота бөгөн йәмғиәттә мәктәп? Заман алға барған һайын уның дәрәжәһе үҫәме, әллә кәмейме?**

- Ер йөҙөндәге барлыҡ халыҡтарҙа ла белем алыу һәм белем биреү усаҡтары юғары баһаланған. Шулай уҡ белемгә өйрәтеүсе уҡытыусы һөнәре лә хөрмәтле һөнәрҙәрҙең береһе һаналған. Һәм ул бөгөн дә шулай. Һуңғы йылдарҙа, бәлки, был позиция бер аҙ сигенә биреп тә киткәндер, әммә мәктәптәр әле лә үҙ бурыстарын намыҫлы атҡара һәм йәш быуынды тәрбиәләүҙә берҙән-бер төп көс булып ҡала килә. Әлбиттә, бөгөн заман ҡатмарлы, йәмғиәттең дә психологияһы бик үҙенсәлекле. Тик нисек кенә булмаһын, һәр ғаиләлә балаһына белем биреү алға ҡуйылған һәм был тәңгәлдә беҙҙең хөкүмәттең дә ҡанундары ныҡлы. Йәғни, һәр бала бушлай белем алыуға хоҡуҡлы. Илдәге хөкүмәт ҡарамағындағы бер мәктәп тә дөйөм тәртиптәрҙән сыға алмай һәм уларҙың маҡсаты ла бер йүнәлештә - йәш быуынды уҡытыуға, тәрбиәләүгә, шәхес итеп формалаштырыуға ҡоролған. Бына ошондай изге ниәттәр нигеҙендә эшләүсе мәктәптең ни өсөн дәрәжәһе кәмергә тейеш?

**➔ Һеҙҙең мәктәп уҡыусыларының алтмыш процентнан ашыуы башҡорт милләтле балалар. Әммә тел мәсьәләләре һеҙҙә лә ҡырҡыу тора, шулай бит? Башҡорт телен уҡытыу, балаларҙы туған телдәрендә һөйләштереү проблемаларын хәл итеүҙә нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Был тәңгәлдә мәктәптең роле ниндәй?**

- Башҡорт теленең йәмғиәттә тотҡан урынын, башҡа милләт вәкилдәренең ерле халыҡ теленә ҡарашын билдәләү уртаға һалып һөйләшеүҙе талап итә. Хәҙерге олатай-өләсәй институты юҡҡа сыҡҡан ығы-зығылы заманда күпселек ата-әсә теле асылыр-асылмаҫ элек балаһын телевизор алдына ултырта. Ә унда - тиҫтәләгән ҡыҙыҡлы сюжетлы, мауыҡтырғыс йәнһүрәт, береһе оҡшамаһа, пульт төймәһенә баҫып, икенсеһен һайларға мөмкин. Йә булмаһа, компьютер уйындары менән әүрәтәләр. Әлбиттә, ундағы геройҙар рус телендә һөйләшә. Бала отҡор, шунда уҡ быны үҙенә һеңдерә бара. Теле башҡорт (туған) телендә асылған бала ла балалар баҡсаһында рус тел мөхитенә сума. Өйгә ҡайтҡас та атаәсәһенә русса өндәшә ул, тора-бара улары ла балалары менән туған телдә аралашыуҙан туҡтай. Аҙаҡ инде фекерләүе лә, телмәре лә рус телендә формалашҡан баланы мәктәпкә тапшыралар һәм туған телде белеүен талап итәләр. Бөгөнгө көндә туған телдәрҙе һаҡлап ҡалыуҙы ғәмәлдә мәктәпкә йөкмәтеп ҡуйҙылар, уның төп функцияһына әйләндерҙеләр. Әлбиттә, туған телдәрҙе өйрәнеүҙә, милли рухлы шәхес тәрбиәләүҙә мәктәптең роле баһалап бөткөһөҙ, ләкин бар эште лә мәктәпкә генә япһарыу дөрөҫ булмаҫ, минеңсә. Системалы эш кәрәк. Беренсе сиратта, йәш башҡорт ғаиләләренә иғтибарҙы көсәйтеү зарур. Бөтөн башланғыстар ҙа ғаиләнән килә. Өйөндә башҡортса аралашыу булмаған баланы уҡытыусы дәрестәр менән генә "телле" итә алмай. Был тәңгәлдә уҡытыусы - ата-әсә - мәктәп үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейеш. Шунда ғына һөҙөмтәләр ыңғай буласаҡ.

**➔ Үҙ мәктәбегеҙ хаҡында нимәләр әйтә алаһығыҙ? Яңы мәктәп, матур мәктәп…**

- Мәктәп ҙур, яңы, бөтөн яңы талаптарға ла яуап бирерлек. Мәктәп туғыҙ йыл ағымында бик етеҙ рәүештә үҫеш кисерҙе. Дөрөҫөн әйткәндә, ул юҡ ерҙә барлыҡҡа килеп, тиҫтә йыл эсендә ҡалала ғына түгел, республика кимәлендәге белем биреү учреждениеһына әүерелде. Белеүегеҙсә, Шамонино республикабыҙҙың йәш белгестәрен торлаҡлы итеү ниәтендә нигеҙләнгән ҡасаба. Бында уҡытыусылар, табиптар, артистар төйәкләнгән. Ғаиләләр йәш. Башта был бигерәк тә һиҙелә ине, хәҙер бынан һигеҙ-туғыҙ йыл элекке йәш ғаиләләр ярайһы олпатландылар, балалары ла үҫеп бөттө. Ҡасабала халыҡтың йәшәү, торлаҡ мәсьәләләре хәл ителгән. Күңелдәре тыныс, тип әйтергә була. Был ауылдың демографик торошонда ла сағылыш таба. Тыуым ярайһы ғына юғары, 2010 йылда дөйөм мәктәптәге балалар һаны 115-те тәшкил итһә, бөгөн 855 булдыҡ. Йыл да 100-110 балаға артып торабыҙ. Ике йыл тирәһенән был һан меңдән ашып китәсәк, тип күҙаллайбыҙ. Был, әлбиттә, өҫтәмә уҡыу кластары, йәғни, киңәйеүҙе, уҡытыусылар коллективының ҙурайыуын да талап итә. Быларҙы күҙ уңында тотоп, 2019 йылда яңы кабинеттарҙы реконструкциялауға субсидия бүленәсәк. Был мәсьәлә республика етәкселеге контролендә.

Уҡыусыларыбыҙ менән ысын мәғәнәһендә маҡтана алабыҙ. Улар беҙҙең республика ғына түгел, Рәсәй кимәлендә лә алдынғы урындарҙа. Туғыҙ йыл осорондағы еңеүҙәрҙе, ҡаҙаныштарҙы барлай китһәң, һанай китһәң, бик оҙаҡ һөйләргә тура киләсәк. Мәктәп базаһында төрлө спорт түңәрәктәре, бейеү ансамбле, театр, ҡул эштәре төркөмдәре, музыкаль кластар эшләп килә. Әйтеп үтергә кәрәк, һәр ҡала мәктәбе бындай бай һәм төрлө яҡлы өҫтәлмәлектәр менән маҡтана алмай. Мәктәптә берәй төрлө түңәрәктә шөғөлләнмәгән бер генә бала ла юҡ. Был тәңгәлдә Шамонино мәктәбе ябай белем биреү учреждениеһы ғына түгел, ә социальмәҙәни үҙәк тә булып тора. Беҙҙә ҡала һәм республика кимәлендәге саралар ҙа уҙа. Мәктәбебеҙ йыш ҡына киң даирәле конференциялар, фестивалдәр үткәреү майҙаны ла итеп файҙаланыла.

Уҡытыусыларыбыҙҙың барыһы ла юғары квалификациялы педагогтар. Республика һәм Рәсәй мәғариф алдынғылары ла, атҡаҙанған уҡытыусылар ҙа бар беҙҙә. Белем биреү кимәлен Берҙәм дәүләт имтихандары күрһәткестәре лә дәлилләп тора. Сығарылыш уҡыусыларыбыҙҙың күбеһе бюджет урындарға уҡырға инә. Йыл һайын алтын һәм көмөш миҙалдарға эйә. Үткән йылғы сығарылышта ғына ла ете бала мәктәпте алтын миҙалға тамамланы һәм республика, Рәсәй юғары уҡыу йорттары студенттары булып киттеләр.

2011 йылда беҙҙә, мәғрифты үҫтереү институты менән берлектә, һәләтле балалар менән эшләүсе Республика тәжрибә майҙансығы асылғайны. 2014 йылда был майҙансыҡ ябылды һәм мәктәбебеҙ ЮНЕСКО-ның дуҫтар клубына индерелеүе был эштең һөҙөмтәһе булды. Бөгөн ошо статусты алыу, йәғни ЮНЕСКО-ның Ассоциациялы мәктәбе исемен алыу өсөн документтар туплана. Өфө районында беҙ әлегә бындай дәрәжәгә лайыҡ булған берҙән-бер мәктәп. Әлбиттә, ғорурланабыҙ.

**➔ Ата-әсәләр менән мәктәп мөнәсәбәте нисек ҡоролған бөгөн? Замана ата-әсәләре менән эш итеүе ауырмы?**

- Ата-әсәләр менән эшләүе еңелдән түгел. Был - тәбиғи ҙә. Ата-әсә беҙгә үҙҙәренең иң ҡәҙерле кешеләрен - балаларын алып килгән һәм балаларына бәйле булған бөтөн хәл-вәҡиғаларға ла бик сетерекле ҡарайҙар. Ә мәктәптәрҙә хәҙер, белеүегеҙсә, бөтөн нәмәләр ҙә асыҡ, күҙ алдында. Уҡыу-уҡытыу, тәрбиә, туҡланыу, өҫтәмә шөғөлләнеүҙәр, түңәрәктәр - барыһы ла ата-әсәләрҙең ҡатнашлығы, булышлығы менән ғәмәлгә ашырыла. Замана ата-әсәләренең йәшәү темпы ла ҡыҙыу. Улар ҡара таңдан эшкә юллана, күптәре ҡараңғы төшкәс тә ҡайтып инә алмай. Күп балалар бәләкәйҙән өйҙәрендә үҙаллы донъя көтәләр. Дәрестәрен дә үҙҙәре әҙерләй, түңәрәктәргә лә бер үҙҙәре килә. Көндәре эштә үткән ата-әсәләрҙең балаларының тормошон белеүгә, өйрәнеүгә ваҡыты ла ҡалмай. Һәм йыш ҡына улар мәктәпкә лә тик ата-әсәләр йыйылышына йәки уҡытыусы саҡыртҡанға ғына килеп сыға. Һәм йыш ҡына уҡытыусыларға шундай һорау бирелә лә: "Минең улым (ҡыҙым) нисек уҡый?" Нисек кенә ҡыҙғаныс булмаһын, бөгөнгө балаларҙың белем кимәлен дә, тәртибен дә, ҡыҙыҡһыныуҙарын да уҡытыусылары яҡшыраҡ белә. Әммә беҙ бының менән ата-әсәләрҙе ғәйепләргә теләмәйбеҙ. Улар ошо балаларҙы ашатабыҙ, кейендерәбеҙ тип эш юлында саба. Ата-әсәләр комитеттары кәрәкле мәсьәләләрҙә мәктәпкә таяныс, ярҙамсы була ала. Ниндәй һорауҙарҙа ла беҙ улар тарафынан аңлау табабыҙ. Шунлыҡтан, мин Шамонино мәктәбе ата-әсәләрен мәктәп һәм уҡытыусылар менән һәр ваҡыт бөгөнгөләй бер-береһенә итәғәтле, хөрмәтле мөнәсәбәттә йәшәргә саҡырам. Беҙҙең ҡараштар һәм маҡсаттар айырымланырға тейеш түгел. Беҙ һеҙҙең менән бер ылауҙа.

Миләүшә СӘЙҒӘФӘРОВА
әңгәмәләште.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ҠАҘ ӨМӘҺЕ



**Ҡаҙ өмәһе - халҡыбыҙҙың иң матур, иң күркәм йолаларының береһе. Был йола көҙҙө оҙатҡас, ергә ап-аҡ ҡар яҡкас башҡарыла. Ауыл халҡы, күрше-күлән, туған-тыумаса берҙәм булып, бер-береһенә ярҙамға килеп, өмә үткәрә. Муллыҡ, татыулыҡ байрамына әйләнгән был матур йола республикабыҙ ауылдарында дәррәү уҙа.**

Беҙҙең Бөрйән районы Килдеғол ауылында ла был матур йола онотолмай, йыл һайын үткәрелеп килә. Быйылғы "Ҡаҙ өмәһе" ауылдың ағинәйҙәре, китапхана һәм ауыл мәҙәниәте йорто хеҙмәткәрҙәре менән берлектә ойошторолдо һәм күпләп ҡош үстереүсе уңғандар - Фирҙәүес һәм Рәүеф Ваһаповтар менән Зарима һәм Сәйет Билаловтарҙа үтте. Йорт хужалары ҡаҙҙарҙы салып биреп торҙо, егәрле ҡатын-ҡыҙҙар уйын-көлкө, ҡыҙыҡлы хәбәрҙәр араһында пыр туҙҙырып уларҙы йолҡоп та ҡуйҙы. Ҡулдары эш белгән, уңған ауылдаштарымдың Һарағы йылғаһына ҡаҙ сайҡатырға барыуы үҙе бер йәмле күренеш булды. Милли кейемдәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауылды гармун моңона, йырға күмеп урамдан үтеүҙәре үҙе ни тора!

Өмә башланғансы уҡ төрлө номинацияларҙа конкурс иғлан ителде. Бәйге ҡыҙыу барҙы. Һәр кем ниндәй ҙә булһа номинацияла еңеү әләктерергә тырышып, ҡулдарында ел уйнатты, ләкин эштең сифаты тураһында ла онотманы. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса Билалова Кәримә инәй менән Миндеғолова Рәйлә еңгәй "Иң оло ҡаҙ йолҡоусы"лар тип танылһа, "Иң йәш ҡаҙ йолҡоусы" тип Рита Ҡарағолова билдәләнде. Исхакова Резеда, Искужина Тәслимә, Билалова Айһылыу апайҙар, Ғиләжова Нәйлә, Миндеғолова Рәшиҙә килендәр "Иң оҫта ҡаҙ йолҡоусы", Фәткуллина Әнисә, Көмөшбаева Вәсилә, Усманова Гөлсинә "Иң шәп ҡаҙ йолҡоусы", Мөхәмәтҡолова Фәйрүзә апай "Уңған ҡаҙ йолҡоусы", Әйүпова Гөлсинә "Иң таҙа ҡаҙ йолҡоусы" исеменә лайыҡ булдылар. Ә "Иң сос ҡаҙ йолҡоусы" тип Көмөшбаева Флүзә табылды. Еңеүселәрҙең барыһына ла маҡтау ҡағыҙҙары тапшырылды.

Эш тамамланғас, хужабикәләр өмәселәргә тәмле ҡаҙ һурпаһы менән һыйланы, ҙур эште әүҙем генә башҡарырға ярҙам итеүселәргә рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Милли йолаларыбыҙға шулай йән өрөп, берҙәм йәшәйек, ауылдаштар тигән теләктәрен еткерҙе улар.

**Нәзилә ИСҠУЖИНА.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

2. Ваҡыты-ваҡыты менән мейегеҙҙе тынысландырып алығыҙ, был ваҡытта ул бер нәмәне лә анализламаһын, бер нәмәгә лә эске ҡарашын йүнәлтмәһен, бер нәмәгә лә ҡаршы килмәһен, ҡабул итһен әммә һәкламаһын. Аңығыҙҙы ҡамасаулаусы шарттарҙан һәм сикләүҙәрҙән азат итегеҙ.

3. Эстән генә йыйнаҡланығыҙ, тулыһынса һауығыуға һәм йәшәреүгә көйләнегеҙ. Уңыш һәр саҡ уңышҡа көйләнеүселәргә йылмая. Хатта ваҡытлыса уңышһыҙлыҡта ла мәғәнә бар. Тимәк, интуицияғыҙ йүнәлеште үҙгәртергә ҡуша.

4. Аңығыҙҙан "сир" тигән һүҙҙе алып ташлағыҙ. Йышыраҡ эстән генә йәки ҡысҡырып: "Мин сәләмәт", "Мин бәхетле", "Мин йәш", "Мин барыһын да эшләй алам" тип ҡабатлағыҙ.

5. Үҙегеҙҙе һәр саҡ эстән нисек булырға һәм тыштан нисек күренергә теләйһегеҙ, шулай күҙаллағыҙ.

6. Үҙегеҙҙе һәр саҡ яратығыҙ һәм ихтирам итегеҙ, бер ваҡытта ла әрләмәгеҙ, кәмһетмәгеҙ, хатта уйығыҙҙа ғына булһа ла. Бәләкәй генә уңыш өсөн дә маҡтағыҙ. Үҙегеҙҙе яҙмышығыҙҙың һәм тәнегеҙҙең хужаһы итеп тойоғоҙ.

## "Маятник" күнекмәһе: күңелһеҙлектән - көлкөгә

Үҙегеҙҙе бәхетле, йәш, сәләмәт, ғашиҡ булған сағығыҙҙағы ваҡытта һәм урында итеп күҙаллағыҙ: яҙғы сәскәле баҫсала, таң ҡаршылағанда... Һалҡынса саф һауа... һеҙ шул һауаны һулайһығыҙ... йәки урманда - ылыҫ еҫе, уның еҫе иң төпкө күҙәнәктәрегеҙгә үтеп инеп, уларҙы йыуа, таҙарта... Тын алған һайын тынычлана барабыҙ (көй аҫтында булһа тағы ла яҡшыраҡ). Был күнекмә ниңә кәрәк? Организмды күнектереү, уны үҙен бәхетле һәм сәләмәт итеп тойорға өйрәтеү өсөн. Әле организмығыҙ был тойғоно үҙ аллы булдыра алмай, шуға уға ярҙам итеп ебәреү зарур. Ашыҡмағыҙ, иң мөһиме - тынығыҙҙы сирле ағзағыҙ аша үткәрегеҙ. Барлыҡ күнекмә өсөн 15 минут етә.

Ошо тороштан сыҡмай ғына хис-тойғоларҙы күнектерәбеҙ. Һеҙ - актер, ролгә инәбеҙ.

**Беренсе роль:** бәхетһеҙ кеше. Илайбыҙ: ҡулбаштар һәленгән, тын алыу - йыш, аҫҡы яңаҡ бер ни тиклем төшкән... Нимә өсөн илаған мөмкин икәнен уйлап, илағыҙ. Үкһеп илауға күсегеҙ: ауыҙығыҙҙы асығыҙ, ирендәр ҡалтырай, шул тороштo көсәйтәбеҙ, тағы ла көсәйтәбеҙ...

Туҡтаныҡ... **икенсе - тыныс кеше роленә күсәбеҙ:** башыбыҙҙы күтәрәбеҙ, ҡулбаштарыбыҙҙы турайтабыҙ... Тәрән тынысланыҡ күсәбеҙ: еңелсә йылмаябыҙ... Һеҙ - король (йәки королева), шуны тойоғоҙ. Башыбыҙҙы, дәрәжәбеҙҙе белеп кенә, тағы ла юғарыраҡ күтәрәбеҙ. Һеҙ - тыныслыҡтың үҙе...

Хис-тойғоларҙың ҡапма-ҡаршы яғына сығайыҡ. **Өсөнсө роль - көләбеҙ.** Күҙебеҙҙе асымай ғына көлкөлө ваҡиғаны уйлайбыҙ һәм көләбеҙ. Туҡтамайынса көләбеҙ... Күҙҙәребеҙҙе асабыҙ һәм тирә-яғыбыҙға ҡарайбыҙ... Нимәгә көлдөк, нимәгә иланыҡ? Быҡын өсөн сәбәп булдымы ни? Юҡ. Һеҙ быны яһалма саҡырҙығыҙ һәм организмығыҙ шуға буйһонdo. Тимәк, үҙегеҙҙе буйһондороп була. Шундай илауҙан һәм шундай көлөүҙән һуң ниндәй тыныслыҡ тойғоһо тыуғанына иғтибар итегеҙ. Был эске тыныслыҡ тойғоһон табыу өсөн мөһим.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ!

# ҺУҒЫМЫҒЫҘ ҺИМЕҘМЕ?

**Ата-бабаларымдың элек-электән килгән йолаларын, йәшәү рәүешен уйлайһың да хайран ҡалаһың. Ниндәй ҡунаҡсыл, мәрхәмәтле, изге күңелле булған улар! Бөгөн һеҙгә йыйындарҙан, һабантуйҙарҙан тыш киң таралған, хәҙерге ваҡытта ла үҙгәрешһеҙ һаҡланған йола - һуғым ашы тураһында әсәйемдән ишеткәндәремде һөйләп үткем килә.**

Һуғым ашы йолаһын һәр ауыл халҡы үҙенсә ойоштора. Ә беҙҙә ул шулай башҡарыла. Һуғым һуйып, итен келәттәргә элеп, эсәк-ҡарынын таҙалап алғандан һуң, хужалар ауылдаштарға һуғым ашын ашатырға әҙерләнә башлай. Иң тәүҙә тултырма әҙерләнә. Тултырмаға тигән эсәктәрҙе бешәләйҙәр (йылғаға алып барып йыуғандан һуң ҡайнап торған һыуҙа 2-5 минут ҡайнатып алыу беҙҙең яҡта бешәләү тип атала). Бешәләнһән, эсәк сөрөшөп кесерәйә һәм бәләкәс кенә булып ҡала. Үпкәбауырҙы, йөрәкте самалап ҡушып, ит турағыс аша үткәрәләр. Бер аҙ ит һәм малдың эс майын да ҡушалар. Ошо массаға тоҙ, борос, һуған ҡушып, эсәктәргә тултыралар. Эсәк бушағыраҡ тултырылырға тейеш, сөнки бешкән саҡта эсәк кесерәйә һәм тултырма шартларға мөмкин. Һаҡлыҡ өсөн 1-2 урындан энә менән тишеп ҡуялар.

Матур итеп һалма йәйәләр. Һалманы ике төрлө: бишбармаҡ итеп тә (йоҡа ғына йәйелгән һалманы дүрткелләп ҡырҡыу), туҡмас итеп тә (нәҙек кенә итеп оҙонса ҡырҡыу) ҡырҡырға мөмкин.

Уңған хужабикәләр ҡомалаҡтан әҙерләнгән әсетке менән күпертеп, йомшаҡ итеп икмәк бешерә. Хәҙер ҡомалаҡ урынына магазин әсеткеһен тотоналар. Әйтергә кәрәк, был әсетке барыбер үҙебеҙ эшләгән ҡомалаҡ әсеткеһенә етмәй.

Ҡышлыҡ ҡорот күптән әҙерләнгән. Уны ла ике төрлө әҙерләргә мөмкин. Аш өсөн әсе итеп - айырым һәм сөсөрәк итеп, шәкәргә болғап, айырым ултырталар. Шәкәрле ҡорот та бик үтемле була, уны мунсанан һуң һыуға болғап эсһәң дә, аппетит юғалғанда ла ашарға мөмкин.

Ауылыбыҙҙа һәр кемдең ҡапҡа эсендә, ә ҡайһы берәүҙәрҙең өй эсендә һыу сығанаҡтары бар (беҙҙең ауылда уны "кочок" тип кенә ебәрәләр). Әммә һуғым ашына һалынасаҡ ит өсөн һыуҙы Үҙән йылғаһынан килтерәләр. Йылға һыуында бешкән аштың ите лә тәмле була, һурпаһы ла тәмлерәк тойола, ә сәй өсөн Үҙән йылғаһының һыуы айырыуса һәйбәт.

Аш өсөн иттең иң майлы, иң матур киҫәктәрен һайлап алалар. Итте ҡыҙыу булмаған утта тандыр ғына ҡайнаталар. Ҡайнап сығыу менән өҫтөндәге түпрәһен йыйып алалар. Ит бешеп сығыр саҡта тоҙлоғон алып, уға һуған турайҙар һәм һуғанды бер аҙ бешереп алалар. Ваҡ һөйәктәрә эләгеп ҡуймаһын өсөн һурпаны мотлаҡ һөҙәләр.

Тултырманы беҙҙә айырым бешерәләр, сөнки ҡунаҡтарҙың ҡайһы берәүһенә тултырма һурпаһының тәме оҡшамауы мөмкин.

Бына инде аш та өлгөрҙө. Әҙер ашты 5-6 алдырға бүлеп һалалар. Аш өҫтөнә мул ғына итеп бая һалынған һуғанлы тоҙлоҡто ҡоялар. Ҡунаҡтар алдына айырым кәсәләр, ә алдырға аш һалғыстар ҡуйыла. Һәр кем үҙенә кәрәгенсә алдырҙан ризыҡты һалып ала. Тултырма өләш итеп ҡырҡылып, шулай уҡ ҡунаҡтар алдына ултыртыла.

Ҡунаҡтар ашап туйып, ҡалаҡтарын ҡуя башлаһа, һыйлаусы тағы ла уларҙың кәсәһенә аш һалып сыға. Был элек "һоғондороу" тип аталған, сөнки борон ҡул менән ашағандар һәм ҡунаҡтарҙы һыйлаусы ла ҡул менән һоғондорған.

Һуғым ашына ике-өс мәртәбә саҡыралар. Һуйышҡан кешеләрҙе, күрше-күләнде, туған-тыумасаны, аралашып йәшәгәндәрҙе ҡалдырмайҙар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙебеҙҙең күңелле лә, фәһемле лә йолаларыбыҙ, гөрөф-ғәҙәттәребеҙ бихисап. Ниндәй генә заманда йәшәһәк тә, ошо хазиналарыбыҙҙы онотмай, киләһе быуынға тапшыра килһәк, халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәре юғалмай, үҙ сафлығында һаҡланыр ине. Һуғымдарығыҙ һимеҙ, ашығыҙ тәмле булһын!**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**



## 17 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 17 декабря. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Чужая кровь". [16+]
23.25 "Познер". [16+]
0.25 Т/с "Второе зрение". [16+]
2.20 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.15 "Модный приговор". [6+]
4.15 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Контригра". [16+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00 "Алтын". [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Перекличка". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 "Красная кнопка". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Наши годы. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Тайм-аут".**
**20.00 Наука 102. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Бизнес-проба. [12+]**
**21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Кустэнэс. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.45 "Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Москва - не Москва". [16+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Райса+Файзи". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 18 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 18 декабря. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Чужая кровь". [16+]
23.25 Премьера. "Большая игра". [12+]
0.25 Т/с "Второе зрение". [16+]
2.20 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.15 "Модный приговор". [6+]
4.15 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Контригра". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Послание ВРИО Главы Республики Башкортостан Р.Ф. Хабирова Государственному Собранию - Курултаю Республики Башкортостан.**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 "Бәхетнамә" (на баш.яз.).**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**15.00 "Алтын". [12+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Дорога к храму. [0+]**
**17.15 Имею право. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Новости (на рус. яз.).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Сочи" - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.00 Новости (на баш. яз.).**
**0.30 Х/ф "Полное превращение". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 19 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 19 декабря. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Чужая кровь". [16+]
23.25 Премьера. "Большая игра". [12+]
0.25 Т/с "Мурка". [16+]
2.30 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.25 "Модный приговор". [6+]
4.20 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Контригра". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 "Бәхетнамә" (на баш.яз.).**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**15.00 "Алтын". [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ. [0+]**
**15.45 "Ал да гөл. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Хазина о Хазине. [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Песня года". [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Лабиринты любви". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 20 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Сегодня 20 декабря. День начинается". [6+]
9.45 "Модный приговор". [6+]
10.45 "Жить здорово!" [16+]
11.40 "На самом деле". [16+]
12.00 Новости.
12.15 "На самом деле". [16+]
12.55 "Время покажет". [16+]
14.00 Пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
17.00 Новости с субтитрами.
17.15 "Время покажет". [16+]
20.00 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Чужая кровь". [16+]
23.25 Премьера. "Большая игра". [12+]
0.25 Т/с "Мурка". [16+]
2.30 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.30 "Мужское / Женское". [16+]
4.15 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 Вести.
14.00 Пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
17.00 Вести.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
23.20 Праздничный концерт ко Дню работника органов безопасности РФ. Прямая трансляция из Государственного Кремлёвского Дворца.
1.35 Т/с "Контригра". [16+]
3.20 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дом престарелых".**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Позывной "Барс". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 "Алтын". [12+]**
**13.30 "Бәхетнамә" (на баш.яз.).**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**15.00 Торжественное собрание, посвященное 25-летию Конституции Республики Башкортостан.**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 "Аль-Фатиха. [12+]**
**17.15 Современник. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Новости (на рус. яз.).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.00 Новости (на баш. яз.).**
**0.30 Х/ф "Упакованные". [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 21 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 21 декабря. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.25 "Давай поженимся!" [16+]
16.15 "Время покажет". [16+]
17.15 Чемпионат России по фигурному катанию-2018. Короткая программа. Прямой эфир. А. Загитова, Е. Медведева, Е. Туктамышева и другие сильнейшие фигуристки.
18.30 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Голос. Перезагрузка".
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Концерт группы "The Rolling Stones". "Sticky Fingers". [16+]
2.10 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 "Модный приговор". [6+]
4.00 "Давай поженимся!" [16+]
4.45 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой".
17.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
23.20 Х/ф "Решение о ликвидации".
2.55 Х/ф "В плену обмана". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Спектакль "Наследство". [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**15.00 "Алтын". [12+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.00 "Гора новостей. [6+]**
**16.15 "Преград.net". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Победить себя… [6+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан".**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Бирешмә. Профи. [12+]**
**19.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Позывной "Барс". [12+]**
**21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Пари на любовь". [16+]**
**2.30 Спектакль "Таштугай". [12+]**
**4.00 Х/ф "Пари на любовь". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 22 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10 Х/ф "Возвращение резидента". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Возвращение резидента". [12+]
7.55 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.45 М/с "Смешарики. Новые приключения". [0+]
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Они знают, что я их люблю". К юбилею Галины Волчек.
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.20 "На 10 лет моложе". [16+]
13.10 "Идеальный ремонт". [6+]
14.20 Концерт Валерия Меладзе. [12+]
16.25 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Премьера сезона. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.40 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.40 Чемпионат России по фигурному катанию-2018. Произвольная программа. Прямой эфир. А. Загитова, Е. Медведева, Е. Туктамышева и другие сильнейшие фигуристки.
23.10 Премьера. Вечер в театре "Современник". К юбилею Галины Борисовны Волчек. [12+]
1.00 Х/ф "Мегрэ расставляет ловушку".
2.45 "Мужское / Женское". [16+]
3.35 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Через беды и печали". [12+]
15.00 "Выход в люди". [12+]
16.15 Субботний вечер с Николаем Басковым.
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Родная кровь". [12+]
1.15 Х/ф "Поздняя любовь". [12+]
3.15 "Выход в люди". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Фиксики". [0+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 Моя вершина. [6+]**
**10.15 Күстәнәс. [12+]**
**10.45 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 Тәмле. [12+]**
**13.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Северсталь" (Череповец).**
**19.00 Новости (на баш. яз.).**
**19.30 Республика Live. [12+]**
**20.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.15 Победить себя… [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Следопыт. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Запах вереска". [16+]**
**1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.30 Спектакль "Похищение девушки".**
**4.30 Х/ф "Запах вереска". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 23 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

4.30 Х/ф "Конец операции "Резидент".
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Конец операции "Резидент".
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код". [0+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Заметьте, не я это предложил..." К юбилею Леонида Броневого. [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.20 Д/ф "Клара Лучко. Цыганское счастье". [12+]
13.20 "Наедине со всеми". [16+]
15.15 Премьера. Юбилейный вечер Юрия Николаева. [12+]
17.35 Чемпионат России по фигурному катанию-2018. Показательные выступления. [0+]
19.30 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
23.45 Х/ф Премьера. "Эйфория". [16+]
1.35 "Мужское / Женское". [16+]
2.30 "Модный приговор". [6+]
3.25 "Давай поженимся!" [16+]
4.10 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

4.35 Х/ф "В плену обмана". [12+]
6.40 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Сто к одному.
10.15 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.35 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
13.10 Х/ф "Крылья Пегаса". [12+]
17.25 "Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица". Финал.
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "ЧиЧиленд". [0+]**
**8.30 "Йома". [0+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [0+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Гора новостей. [6+]**
**11.45 Замандаш. [12+]**
**12.00 Моя семья. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [6+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 "Пусть сказочным будет детство!" Творческий вечер Айгиза Баймухаметова.**
**18.00 "Мисс интернешнл-2018". [12+]**
**19.30 Полезные новости. [12+]**
**19.45 Имею право. [12+]**
**20.00 Әлләсе… [12+]**
**20.45 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Свидание с джазом. [12+]**
**0.00 Х/ф "Сокровища ОК". [12+]**
**2.00 Спектакль "Шестая жена Ивана Грозного". [12+]**
**4.30 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

*ИҒЛАН*

Продается автомобиль марки **DAEWOO NEXIA**, 2009 года выпуска, пробег 248 910 км. Цена **54 800 рублей**. Тел.: **8-987-60-50-969**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЫЛ НИНДӘЙ ЫРЫУ ВӘКИЛДӘРЕ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**49-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Шәкүр. Аҡмулла. Фажиғә. Абакан. Ҡойон. Тояҡ. Уртлам. Этил. Зөлҡәрнәй. Рейх. Әй. Әрәм. Нарком. Әшнә. Итака. Өйрә. Ҡәрт. Әлшәй. Баул. Әрйә.

**Вертикаль буйынса:** Ҡәнзәфәр. Фәйзуллин. Нәҙәрә. Анри. Йәнәби. Ғата. Әсмүхә. Миәкә. Эйә. Ләлә. Һөкот. Алыш. Ралли. Әсәй. Абдуллина. Өй. Рюрик. Карл. Нурмөхәмәт.

**Сканворд һорауына яуап:**

| I | II | III | IV | V |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |

БӘЙГЕЛӘР



**Ошо көндәрҙә баш ҡалала "Башҡортостан гүзәле-2018" матурлыҡ конкурсы уҙҙы. Икенсе тапҡыр ойошторолған был сараның финал ярышында республиканың төрлө төбәктәренән ун һигеҙ һылыуҡай ҡатнашты.**

# ТАҒЫ ЛА МАТУРЛЫҠ...

Тәүге һынау шарттарына ярашлы, конкурсанттар атаһы, ағаһы йәки ҡустыһы, хәләл ефете менән сәхнәгә күтәрелде. Был үҙенсәлекле күренеш булып тойолдо, сөнки ҡатын-ҡыҙ өсөн ир-егет фекере һәр саҡ мөһим, үҙенә ҡарата һөкләнеү, маҡтау, яратыу һүҙҙәрен яҡын кешенән ишетеү ҡанатландыра. Әммә ойоштороусылар әллә ҡатнашыусыларға аңлата алмаған, әллә сәхнәгә сыҡҡан атай, ағай, ҡустыларҙың ҡәҙерләләренә әйтер һүҙҙәре булмай сыҡтымы - ун һигеҙ сығыш яһаусы араһында ни бары икәүһе генә уңышлы килеп сыҡты. Береһе Өфө ҡалаһынан Альбина Ейәнбәтованың ете йәшлек улы, икенсеһе Стәрлебаш районынан Ҡәҙриә Зөбәйерованың атаһы ине. Тап ошо ике ир-егеттең һүҙҙәренән бөгөн беҙҙең алда яратҡан һәм яратылған әсәй, ҡәҙерле һәм һөйөклө ҡыҙ бала баҫып тороуын аңланыҡ. Был ир-егеттәр башҡалар кеүек оҙон шиғыр ҙа ятлап торманы, тәҫ-башын да шаштырып маҡтаманы, бары тик тормоштарына йәм биреүсе ҡатын-ҡыҙ тураһында күңелендә йөрөткән һүҙҙәрҙе еткерҙе. Ә башҡалар матурлыҡ конкурсына яңы йүнәлеш бирерлек үҙенсәлекте тейешле файҙалана белмәне. Шулай ҙа конкурстың бер ыңғай яғын билдәләп китмәй булмай - башҡа оҡшаш сараларҙан айырмалы рәүештә, конкурсанттар башҡорт милли кейемендә сыҡты, башҡорт халыҡ йырбейеүен башҡарҙы, туған телендә бик матур һөйләшә белеүен күрһәтте. Ошоға ымһынып, хатта бик күп етешһеҙлектәрен дә шәйләмәҫкә мөмкин ине, ләкин "Интернет гүзәле" номинацияһында билдәләнгән Альбина Ейәнбәтова әйтмешләй, матурлыҡ конкурстары тәү сиратта тамашасыларҙың да, ҡатнашыусыларҙың да рухын күтәреүсе бер сара булырға тейеш бит. Был йәһәттән "Башҡортостан гүзәле" конкурсына үҫергә лә үҫергә әле.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ХОККЕЙ

# ХЕЛЬСИНКИҘАҒЫ ЕҢЕҮ!

**Шишәмбе "Салауат Юлаев" хоккей командаһы "Йокерит" менән уйынаны һәм 2:3 иҫәбенә еңеү яуланы.** Был уйында ҡапҡаны Юха Местола һаҡланы. Уйын тәүге минуттарҙан уҡ ҡыҙыу башланды һәм аҙаҡҡаса көсөргәнешле булды. Тәүге мәрәйҙе үҙ иҫәбенә юлаевсы Тему Хартикайнен яҙҙы. Әйтергә кәрәк, Өфө командаһы өсөн был иҫтәлекле - 100-сө - гол булды. Икенсе осорҙа бер команда ла уңышҡа өлгәшмәне. Өсөнсө осорҙа еңеү өсөн алыш тағы ла нығыраҡ ҡыҙып, командалар бер-бер артлы шайбалар менән алышты. Шулай ҙа был уйындың һуңғы нөктәһен ҡунаҡтар ҡуйҙы. Тему Хартикайнен "Йокерит"ҡа тағы ла бер шайба "бүләк" итте.

"Салауат Юлаев" хоккей командаһы декабрь айына планлаштырған 12 уйынының 6 матчын үткәреп, шуларҙың өсәүһендә еңеү яулауға өлгәште. Континенталь хоккей лигаһының көнсығыш конференцияһында юлаевсылар бөгөнгө көндә 46 мәрәй менән 6-сы урынды биләй. Был йылдың һуңғы уйынын юлаевсылар "Кунлунь Ред Стар" менән Өфөлә уҙғараcаҡ.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабигел ахыр) | Иртән ге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ақшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (10) дүшәмбе | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 18 (11) шишәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 19 (12) шаршамбы | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 20 (13) кесе йома | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 21 (14) йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 22 (15) шәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 23 (16) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 декабрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**16 декабрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+
**20 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мәҙәрисова), мелодрама 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 декабрь "Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева әҫәре буйынса), музыкаль риүәйәт 12+
**20 декабрь "Сундучок Деда мороза"** Әкиәте. Башлана 10.30, 12.30 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**15-16 декабрь "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова), Яңы йыл тамашаһы. Башлана 16.00 0+
**15 декабрь "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+
**16 декабрь "Три поросенка"** (С. Михалков) 0+. Башлана 12.00, 14.00
**20, 21 декабрь "Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). Башлана 11.00, 14.00

АФАРИН!

# ТЫУҒАН ТЕЛЕҢДЕ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм БР Мәғариф министрлығы тарафынан ойошторолған Башҡорт теле көнөнә арналған сара республиканың төрлө төбәктәренән башҡорт теле буйынса конкурстарҙа еңеү яулаған ике йөҙҙән ашыу баланы Өфөгә йыйҙы.**



Һәләтле балаларҙың республика слеты "Тыуған тел илселәре" республика акцияһы сиктәрендә ойошторолған интерактив майҙансыҡтар эше менән башланып китте. Ойоштороусылар балаларҙы ете төркөмгә бүлеп, төрлө ҡыҙыҡлы уйындар, викториналарға йүнәлеп итте. Стәрлебаш районы, Ибраҡай ауылы мәктәбе уҡыусыһы Камил Гәрәев "Алтын тирмә" уйынында ҡатнашҡан, ул башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадаларҙа призлы урындар яулаған уҡыусы. "Алтын тирмә" уйынында алдан да ҡатнашҡаным бар, төрлө райондарҙан килгән тиҫтерҙәрем менән бик мауыҡтырғыс итеп уйнаныҡ бөгөн дә. "Алдынғы" командаһы еңеү яуланы, беҙ уларҙын саҡ ҡына ҡалыштыҡ. Әммә иң мөһиме бында тыуған телебеҙҙә матур итеп аралаша, уйнай, таланттарыбыҙҙы күрһәтә алдыҡ", - ти егет.

Икенсе секцияла "Башҡортостан беҙҙән башлана" тигән интеллектуаль уйын барышын да инеп күҙәтеп сыҡтыҡ. Унда уҡыусылар Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты уҡытыусылары әҙерләгән һорауҙарға тунәрәк өҫтәл артында ултырып яуап ҡайтарҙы. Әйтергә кәрәк, нәҡ ошо секция эше барышында хәҙер Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте, географияһы буйынса айырым дәрестәр үткәрелмәүҙең тәүге "емештәрен" күрҙек. Уҡыусылар башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Ватан тарихы дәрестәрендә уҡытыусылар телгә алып киткән дөйөм мәғлүмәттәр буйынса ғына хәбәрҙар. Ә бит бында тыуған телен яҡшы белгән, төрлө конкурс еңеүселәре йыйылғайны...

Слеттың "Тыуған ерҙә - тыуған телдә" һәм "Мостай иленә сәйәхәт" интеллектуаль уйындарында балалар бер нисә командаға бүленеп, тест һәм викторина һорауҙарына яуап эҙләне. Уйынды үткәреүсе Өфө ҡалаһы 68-се лицейы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ринат Сөләймәнов өсөн балалар менән аралашыуы ғәҙәти хәл булһа ла, бында ул башҡорт рухлы, мәҙәни, тәрбиәле һәм белемле уҡыусылар менән осрашыуынан ҡәнәғәт ҡалған. "Был сара уҡыусыларға ғына түгел, беҙгә - уҡытыусыларға ла, ҡанат өҫтәне", - ти Ринат Миңлеғәле улы.

Слетта бер төркөм уҡыусылар "Халыҡ ижады ынйылары" иленә сәйәхәт итте, уларға был мауыҡтырғыс сараны Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһының директор урынбаҫары Марат Ғилманов һәм Өфө ҡалаһы 10-сы белем биреү үҙәгенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ләйсән Хәсәнова ойоштороҙо. Уҡыусылар бергәләп башҡорт ғаиләһендәге йола, тәрбиәне һәм мәҡәл-әйтемдәрҙе, милли биҙәүес, һуғыш ҡоралдарының атамаһын, ҡулланылышын хәтергә төшөрҙө, үҙҙәренең ырыуы тураһында һөйләне. Ойоштороусылар сулпы, ян нимә булыуын әйтә алмай баҙап ҡалған уҡыусыларға социаль селтәрҙәр аша бәйләнешкә сығып яуап бирерһегеҙ, тигән бурыс та ҡуйып ҡайтарҙы. Һуңғы ваҡытта башҡорт йәштәре араһында мәғариф форумдарында ҡатнашыу, идеяларын тормошҡа ашырыу өсөн төрлө грантлар яулауын күптәр белә. Шундай йәштәрҙең береһе Байрас Азаматов һәләтле балаларҙың республика слетындағы тәжрибәһе менән уртаҡлашты. "Күгәрсен районы Йомағужа ауылында йәшәүсе 15 йәшлек Динислам Ҡотломбәтов та һеҙҙең кеүек уҡыусы. Ул бөгөн Башҡортостандың тыл ветерандары тураһында китап баҫтырыу өсөн грант отоп, ошо идеяһын тормошҡа ашырған үҫмер. Бөгөн һеҙҙең менән проект яҙыу схемаһын өйрәнәбеҙ, ҡурҡмайынса идеяларығыҙ менән бүлешегеҙ. Идеягыҙҙы бөрәү урлап ҡуйыр тип хафаланмағыҙ, киреһенсә, фекерҙәштәр һәм ярҙам итеүсе кешеләр табырһығыҙ", - тип башланы һүҙен Байрас. Әйткәндәй, осрашыу барышында һигеҙ уҡыусыға үҙ идеяһын ҡағыҙға яҙып, тиҙ арала шуны проект формаһында яҡлап ҡарау мөмкинлеге бирелде. Проект эштәре менән мәктәп эскәмйәһенән шөғөлләнә башлау мөһим, тигән һығымтаға килде ойоштороусылар.

Һәләтле балаларҙың республика слетына мәктәпкә тиклемге йәштәге балалар һәм башланғыс синыф уҡыусылар ла килгәйне. Улар "Базис" компанияһының Федераль белем биреү стандарттарына ярҡлаштырылған ҡорамалдарында уйнап ҡарай алды. Иң мөһиме, "Интерактив ҡомлоҡ", "Интерактив иҙән", "Уйна һәм үҫеш" комплекстары, виртуаль ысынбарлыҡ күҙлеге ярҙамында атҡарылған экскурсия башҡорт телендә үтте. Компания етәксеһе Азат Әхтәмов әйтеүенсә, башҡорт телен белмәгән балалар ҙа уйнап ҡына уны өйрәнә ала, сөнки был ҡорамалдарҙа юл ҡағиҙәләре, әйберҙәр атамаһы, тыуған төйәгебеҙгә ҡағылышлы ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирелгән. Бер аҙ элек кенә әҙерләнгән был махсус программалар әлеге көндә мәғариф хеҙмәткәрҙәрендә лә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған.

Республика слетында бына шундай мауыҡтырғыс майҙансыҡтар эшләне. Сара сағ башҡортса итеп ойошторолған матур концерт программаһы һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, БР Мәғариф министрлығы тарафынан үткәрелгән конкурстарҙа еңеүселәрҙе тәбрикләү менән тамамланды. Тантана барышында милләтебеҙҙең йөҙөк ҡашы булыр балалар төрлө атамалы конкурстарҙа, "Башҡортостандың 100 шағиры" республика әҙәби марафоны, иншалар, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр" бәйгеләрендә еңеү яулауы өсөн тәбрикләнде. Әйткәндәй, Учалы районынан "Урал батыр"ҙы яттан һөйләүсе Ләйсән Золотарева һәм Ишембай ҡалаһынан Гөлсәсәк Шәрипоәаға Әхмәт Сөләймәнов исемендәге премия тапшырылды. Сибай ҡалаһынан "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында беренсе урын алған Зөлфиә Яхина шиғырҙар ятларға, "Толпар" телеҫтудияһында әкиәттәр һөйләргә, яҡшы билдәләргә өлгәшергә, кескәй Лилиә һеңлеһе менән уйнарға ла өлгәрәүе тураһында бәйән итте. Ә бына Белорет районы Егәҙе ауылынан килгән Роза Хәйбуллина Константин Паустовскийҙың "Алтын рауза" повесын башҡортсаға тәржемә итеп, икенсе урын яуланы. Ҡыҙ телдәрҙе яҡшы белһәң, тәржемә эше артыҡ ауыр булмауы һәм уны эшләгәндә һүҙлектәр менән ҡулланмауын һөйләне. Башҡорт теле көнөнә арналған һәләтле балаларҙың республика слеты бына шундай талантлы, аҡыллы, белемле һәм рухлы балаларҙы туплағайны.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪ ҮПКӘЛӘҺӘ, дошман кинәнер

Әҙәплелек билдәһе - эйелеп сәләм биргәне, яҡын итеү билдәһе - кисектермәй килгәне.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Икеләнеү - ул дошман: тәүәккәл аҙымдан ҡурҡырға мәжбүр итеп, ул беҙҙе яулап була торған нәмәләрҙән мәхрүм итә.

**(Вильям Шекспир).**

Үҙенең ахмаҡ икәнен белгән ахмаҡ - ысын дәрәжәһендә аҡыл эйәһе, ә инде үҙен иң аҡыллыһы тип уйлаған кеше - иң ахмағы.

**(Будда).**

Хәҡиҡәткә ғашиҡ кешегә шағир булырға ла, бөйөк булырға ла тырышырға кәрәкмәй. Ул ысын мәғәнәһендә шағир һәм бөйөк.

**(Жюль Ренар).**

Һәр хәҡиҡәтте лә ҡыҫҡырып әйтеп булмай: берәүһен үҙең өсөн әйтмә, икенсеһен икенсе бөрәү хаҡына әндәшмә.

**(Бальтасар Грасиан)**

Ысын дуҫ һәр нәмәлә беҙгә оҡшарға тырышмаясаҡ, һәр ҡылығыбыҙ өсөн маҡтарға ла атлығып тормаясаҡ, ул беҙҙәге иң яҡшыны ғына ҡабул итәсәк.

**(Плутарх).**

Күҙҙәр берҙе һөйләп, тел икенсене һөйләгәндә, тәжрибәле кеше уларҙың тәүгеһенә ышана.

**(Ралф Эмерсон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡһаҡалға йәш кеше килә һәм:**

**- Һеҙҙең һымаҡ аҡыллы булыу өсөн миңә нимә эшләргә?- тип һорай. Аҡһаҡал:**

**- Урамға сыҡ та, шунда баҫып тор... - тип яуап бирә.**

**- Урамда баҫып тороу миңә нисек итеп ярҙам итә ала икән? - тип икеләнә егет, ә шулай ҙа аҡһаҡалдың әйткәнен үтәп, урам уртаһына сығып баҫа. Бына ҡойоп ямғыр яуа башлай, йәш кеше үтәнән-үтә һыулана. Бер аҙҙан түҙмәй, аҡһаҡал янына яңынан инә һәм:**

**- Мин урамда баҫып торҙом, унан ниндәй файҙа булды һуң? - тип һорай. - Урамда баҫып торғанда башыңа ниндәйҙер уй килдеме? - тип һорай аҡһаҡал.**

**- Ниндәй уй килһен, ти! Мин үҙемде бер алйот хәлендә тойҙом... - ти йәш егет.**

**- Бына был асыш! - ти аҡһаҡал. - Был аҡылға табан тәүге аҙым. Әгәр ҙә һин үҙеңдең алйот икәнеңде беләһең икән, тимәк, һин дөрөҫ юлда һәм һин яҡшы яҡҡа үҙгәрә башлағанһың..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
14 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 2315/12